ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

13-19 май (һабанай) 2023

№ 18 (1060)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Көсөбөҙ...**

тыуған яҡҡа



4,6

**Һәр эштә лә сабырлыҡ кәрәк...**



8-9

**Халҡыбыҙҙы йәшәтер им-әмәл**



10

**Башҡорт Зояһы**



12

@KISKEUFA

Беҙҙең Телеграм каналға рәхим итегеҙ!

смартфон камераһын төбә

***Иғтибар! "Киске Өфө" (индексы ПР905) гәзите менән бергә булыусы аңлы, зыялы уҡыусыларыбыҙҙы 2023 йылдың икенсе яртыһы өсөн баҫмабыҙға 842 һум 28 тингә яҙылырға саҡырабыҙ. Ә беҙ һеҙҙе рухиәт менән һуғарыуҙы, кәрәкле мәғлүмәттәр еткереүҙе дауам итербеҙ, матур йөкмәтке менән танһыҡтарығыҙҙы ҡандырырға тырышырбыҙ, тигән вәғәҙәбеҙҙе яңыртабыҙ. Гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргәндәр араһынан кемдәрҙер бүләккә бик шәп китаптар аласағы тураһында ла онотмағыҙ. Бергә булайыҡ!***

***МӨХӘРРИРИӘТ.***

## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

### Бөгөн йәштәр ғаилә ҡорорға ашыҡмай, тиҙәр, был фекер менән килешәһегеҙме?

***Ғәли ФӘХРЕТДИНОВ, педагог-ветеран, Башҡортостандың мәғариф отличнигы, Баймаҡ ҡалаһы:*** Бөгөн йәштәр ғаилә ҡорорға ашыҡмай, тигән фекер менән килешмәйем. Үҙем белгән егеттәр, уҡытҡан уҡыусыларымдың байтағы һөнәр үҙләштереп, армия сафында хеҙмәт итеп ҡайтып, 1-2 йыл да үтмәй, ғаилә ҡороп, матур итеп йәшәп китеүҙәренә шаһитмын һәм бик шатмын. Бындай күңелле күренеш: никах, туй тантаналары, шөкөр, бигерәк тә ауыл райондарында йыш булып тора. Миҫал өсөн генә әйткәндә лә, республикабыҙҙың башҡа яҡтарында нисек икәнен Бәйләнештә социаль селтәрен асып ҡарап барыу ҙа етә. Ҡупшы кәләштәр менән кейәү балаларҙың, уларҙың ата-әсәләре, туғандары, дуҫтарының никах тантанаһынан матур-матур фотолары әленән-әле ошо биттең диуарҙарын биҙәп, йәмләндереп тора. Йәштәрҙең никахлашырға ашыҡмауы тигән нәмә, һәр хәлдә, ауыл ерендә хас күренеш түгел.

Дөрөҫ, шул уҡ ваҡытта 30-40 йәште үтеп тә өйләнмәй йөрөгән ир-егеттәр ҙә барбарлыҡҡа, ләкин уларҙың был ҡылығында ниндәйҙер шәхсән генә сәбәптәр барҙыр, тейем. Уларҙың ҡайһы берҙәре ошо йәшкәсә ата-әсәһе менән йәшәп, әсәһе итәгенән айырыла алмай, үҙаллылыҡ тигән нәмә тәрбиәләнмәгән. Йә булмаһа, эскелеккә бирелгән. Исмаһам, ҡырға сығып китеп, аҡса эшләргә лә булдыра алмағандары ла осрай. Ә бына ҡалаларҙа бындай насар ғәҙәттәргә бирелмәгән хәлдә лә, йәшәргә фатиры, эшләргә эше, ашарға ашы була тороп та, өйләнмәй йөрөүсе егеттәргә аптырайым мин. Тимәк, ҡала ерендә барыбер ҙә, һеҙ әйткәнсә, ғаиләле булырға ашыҡмаған йәштәр бар. Уйлап ҡараһаң, ҡалаларҙа йәштәргә аралашыу, танышыу өсөн шарттар ҙа күберәк. Күрәһең, хәҙер ундай йәштәр өсөн виртуаль донъяла йәшәү, интернет, телефондан башҡа мөһим нәмә юҡ. Ауылдарҙа өйләнмәгән буйҙаҡ ир-егеттәр проблемаһы беҙҙең өсөн яңылыҡ түгел, сөнки ҡыҙҙар ҡалаға китә; ә ҡалала, киреһенсә, ҡатын-ҡыҙ былай ҙа күп, тик егеттәр аҙ. Ҡыҙыҡ өсөн Росстат мәғлүмәттәрен ҡарап ултырҙым. Бынан бер нисә йыл элек 18-24 йәшлек йәштәр ғаилә ҡорһа, хәҙер 26-28 йәштәгеләр өйләнешә. Элегерәк ҡалала юғары уҡыу йорттарында уҡығанда уҡ, 20 йәштә кейәүгә сыға ине ҡыҙҙар. Мәҫәлән, ауыл хужалығы институтында уҡыған егеттәр медицина, педагогия уҡыу йорттары ҡыҙҙары менән дуҫлашып, өйләнешеп тә ҡуя инеләр, ниндәй үҙаллылыҡ, яуаплылыҡ булған уларҙа! Ә хәҙер вуз студенттары был йәһәттән бөтөнләй әҙерлекле түгел, һаман да әсәләре итәгенән төшөп етмәгән, бөтөн ваҡытын компьютер, телефонға ҡапланып ултырыусы бала-саға кеүек тойолалар.

Унан һуң хәҙер, демографтар фекеренсә, ҡыҙҙар күпкә үҙаллыраҡ, уҡымышлыраҡ, эшҡыуарлыҡ менән шөғөлләнәләр, шуға күрә улар үҙ тиңен эҙләй, ҡайҙандыр кемделер көтһә, көтә, ләкин үҙенән көслөрәк һәм әүҙемерәк ир-егетте эҙләй. Тәүҙә - карьера, ә ғаилә - аҙаҡ, тигән маҡсат менән йәшәгән ҡыҙҙар, шулай итеп, 30-ҙы үтеп, 40-ҡа яҡынлағас та үҙ ишен таба алмай, әсә бәхетенән дә мәхрүм була, ә йәшерәк ир-егеттәргә уларҙың үҙенән көслөрәк кәләш кәрәкмәй. Бер психологтың фекеренсә, никахлашыуҙар һанының кәмеүенә ике яҡтың да бер-береһенә юғары талаптар ҡуйыуы ла ҡамасау икән.

## АФАРИН!

# АЛТЫН МИҘАЛ ЯУЛАНЫ!

**Ҡаҙағстанда үткән Халыҡ-ара Менделеев олимпиадаһында Башҡортостандан унынсы класс уҡыусыһы Вадим Харисов химия буйынса бәйгелә алтын миҙал яуланы.**




Астанала бөтәһе 30 илдән, шул иҫәптән Рәсәй, Австрия, Болгария, Венгрия, Израиль, Ҡаҙағстан, Ҡырғыҙстан, Монголия, Берләшкән Ғәрәп Әмирлектәренән уҡыусылар ҡатнашты. Һөҙөмтәлә, Рәсәй командаһы барлығы 10 миҙал яуланы. Был командала Республика инженер лицей-интернаты уҡыусыһы Вадим Харисовтың да булыуы тураһында үткән һанда яҙғайныҡ инде. Ул ӨДНТУ-ның ошо уҡыу йорто базаһындағы предуниверсарийында белем ала. Был ҙур сараға әҙерлекте Вадим Олимпиада хәрәкәте остаздары ассоциацияһының (АНОД) дәрестәрендә һәм "Изотоп" Йәйге химия мәктәбендә үткән. Әйткәндәй, был Ассоциация эшмәкәрлеген Рәсәйҙең халыҡ уҡытыусыһы Лиза Ҡыям ҡыҙы Әғәҙуллина тәжрибәһенә таянып башҡара.

Вадим Харисовтың был еңеүе Башҡортостан өсөн ҙур бүләк. 17 йыл эсендә беренсе тапҡыр республика уҡыусыһы химия буйынса Халыҡ-ара Менделеев олимпиадаһында алтын миҙал яуланы. Республика Башлығы Радий Хәбиров та үҙенең телеграм-каналында: "Вадимды һәм унын уҡытыусыһы, илебеҙҙең йыйылма командаһы етәкселәренең береһе Айнур Ғүмәровты ҡотлайым. Һәләт, ныҡышмалы хеҙмәт, уҡыусыларыбыҙҙы үҫтереү системаһының яҡшы булыуы ошондай юғары һөҙөмтәләргә килтерә", - тип яҙҙы.

12+

**✓ Замандың яңы башҡорто - ул егерме икенсе быуатҡа балаларын, ейән-ейәнсәрҙәрен башҡорт милләте вәкиле итеп сығара алыусы, ата-олаталарының рухи эстафетаһын киләсәк быуындарына тапшыра алыусы башҡорт.**



ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ

**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишерелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда, майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәләнеүҙәрҙән төңөлдөргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**



# ИҢ ЯҠШЫ ТӘРБИӘ...

## шәхес өлгөһөндә

***Гөлсөм МОНАСИПОВА, Нияз Мәжитов исемендәге Красноусол Башҡорт гимназия-интернаты директоры:*** Бөгөн мәғариф системаһында белем биреү генә түгел, тәрбиәнең дә әһәмиәтле булыуы тураһында күп һөйләйҙәр. Мәктәптә тәрбиә эше былай ҙа туҡталып торғаны булмаңы, тәрбиәне белем биреүҙән айырып ҡарау ҙа мөмкин түгел.

Тәрбиә ул бик кәрәкле, етди мәсьәлә, беҙ ҙә шундай ҡараштабыҙ һәм тәрбиә алырлыҡ ниндәй мөмкинлектәр бар, уларҙың бөтәһенә лә ҡушылабыҙ. Мәҫәлән, районды "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһы шул тиклем матур эшләй, уның ағзалары менән тығыҙ бәйләнештәбеҙ. Ағинәйҙәрҙең сараларына беҙҙең балалар ҙа ҡушылып китә. Мәрйәм Бураҡаеваның "Урал батыр мәктәбе" тип аталған үҙенең майҙансығы бар, беҙ уға республикала иң тәүгеләрҙән булып ҡушылдыҡ, сөнки уның нигеҙендә тәрбиә ята. Малайҙарҙы - Урал батыр, ҡыҙҙарҙы Һомай өлгөһөндә тәрбиәләһәк, халҡыбыҙ өсөн кәрәкле шәхестәр үҫтерә алырбыҙ.

Элек үҙтәрбиә тигән төшөнсә була торғайны. Бала ниндәйҙер кимәлгә етһә, үҙен-үҙе тәрбиәләү менән дә булырға тейеш. Маҡсаттар, бейеклектәр ҡуйырға һәм шуға ынтылырға тейеш - уҡыусыларыбыҙҙы ошоға ла өйрәтәбеҙ. Мин табип, йә нефтсе булам, тип әйтеүе еңел, ниәтеңә өлгәшер өсөн көн режимы төҙөп, дисциплина булдырып, нисек туҡланаһың, ниндәй өҫтәмә дәрестәр алаһың, ниндәй китаптар уҡыйһың - ошоларҙың барыһын да бала үҙаллы контролдә тотоп, эшләй белһен. Шул уҡ ваҡытта, һәләтеңә ҡарап, йырлап, бейеп, спорт менән дә шөғөлләнеп, гитарала уйнарға өйрәнеп тә өлгөрөргә тейешһең.

Тәрбиә тигәндә, шәхестең өлгөһө менән тәрбиәләү - иң яҡшы ысул. Был йәһәттән дә беҙ бәхетле. Гимназиябыҙға 25 йыл тулғанда, уға күренекле ғалим, академик, яҡташыбыҙ Нияз Мәжитовтың исеме бирелде. Балаларға, ул да һеҙҙең кеүек малай булған, бәләкәй генә ауылдың мәктәбендә уҡыған, юғары маҡсаттар ҡуя белгәс, үҙен үҫтергәс, шундай уңыштарға өлгәшкән, яҡты, ялҡынлы ғүмер йәшәгән, тип әйтеп торабыҙ. Уның кешелек сифаттары, халҡы өсөн кәрәкле шәхес дәрәжәһенә күтәрелеүе хаҡында күп әңгәмәләшәбеҙ. Йәмғиәт өсөн кәрәкле кешенең генә шәхес булыуын аңлатабыҙ. Ғөмүмән, беҙҙең гимназияға был исемде ҡушыуҙарын яратып ҡабул иттек. Гимназияла яңы һулыш, яңы донъя барлыҡҡа килгән һымаҡ булды, яңы бейеклектәр ала башланыҡ. "Бишле"гә генә өлгәшкән уҡыусыларға значок тағабыҙ, улар "Мәжитовсы" исемен ала. Быйыл августа Нияз Мәжитовтың тыуыуына 90 йыл була. Беҙҙең йылыбыҙ шуға ла Мәжитовҡа арналды. Яңыраҡ уҡыусылар араһында "Мәжитов уҡыуҙары" үтте, көҙгә йәмәғәтселек, район халҡы менән ҙур саралар ойошторорға ниәтләнеп торабыҙ.

ТУРАҺЫН ӘЙТКӘНДӘ...

# ЯҢЫ БАШҠОРТ...

## сеймал түгел



**Күпселектең яңы башҡортто, әгәр ҙә бында яңырыуға йөҙ борған кеше хаҡында һүҙ барһа, "яңы урыҫ"тың күсермәһе рәүешендә ниндәйҙер мөғжизә менән сереп байыған кеше итеп күрергә теләүе аптырата. "Яңы башҡорт" "яңы урыҫ" түгел.**

Йәнәһе, уның мотлаҡ бай кеше йә танылған сәхнә йондоҙо булыуы шарт. Ундай башҡорттарҙың да йортонда булырға тура килгәне бар, күбеһенең өйөндә бер башҡортса китап, гәзит-журнал күрмәҫһең, араларында үҙ ғүмерендә бер китап уҡымағандары ла бар. Етмәһә, байлыҡ принцибына ҡарап, балаларының да теләһә ниндәй милләт вәкиле менән ғаилә ҡороуына күҙ йомоп ҡарай бәғзеһе. Һөҙөмтәлә "яңы башҡорт" тигәненең ейән-ейәнсәрҙәре бөтөнләй башҡа милләт вәкиле булып китә, уның ҡаны, заты, үҙе лә бүтәндәр өсөн сеймалға әүерелә. "Сеймал" икән, тураһын әйткәндә, ул "яңы" ғына ла түгел, ғөмүмән, башҡорт түгел.

Миңә ҡалһа, замандың яңы башҡорто - ул егерме икенсе быуатҡа балаларын, ейән-ейәнсәрҙәрен башҡорт милләте вәкиле итеп сығара алыусы, ата-олаталарының рухи эстафетаһын киләсәк быуындарына тапшыра алыусы башҡорт. Ошо ғәмәлдәрҙе тормошҡа ашырыу өсөн кәрәкле сифаттарға эйә булһа, ана шулдыр ул яңы башҡорт. Минеңсә, яңы башҡорттоң асылын уның төп маҡсаты билдәләйҙер. Киреһенсә булған осраҡта йәшәүебеҙҙең дә мәғәнәһе юҡ бит.

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## ? Бөгөн йәштәр ғаилә ҡорорға ашыҡмай, тиҙәр, был фекер менән килешәһегеҙме?



***Айгөл БОХАРБАЕВА, Сибай ҡалаһы, ЗАГС бүлеге начальнигы:*** Йәштәрҙең никахын теркәү урынында эшләгәнлектән, мин һеҙ ҡуйған һорау менән килешмәҫ инем. Ғәҙәттә, алыҫтан яҡшыраҡ күренә, тиһәләр ҙә, был осраҡта беҙгә яҡындан һәм тағы ла яҡшыраҡ күренә. Әлбиттә, статистикала тирбәлештәр булып тора һәм был бөгөнгө күрһәткестәргә генә хас түгел. Күп кенә мосолман ғаиләләре хәҙер мәсеттә никахлашыуҙы хуп күрә, ләкин улар барыбер был факты ЗАГС бүлегендә теркәтеп, законлаштырырға тейештәр, сөнки был уларҙың үҙҙәренең мәнфәғәтендә. Мәсьәләнең матди-финанс хәлен алып ҡарағанда ла был бөгөн айырыуса көнүҙәк, сөнки, ир-егеттәребеҙ Махсус хәрби операцияға китә икән, ти, мәҫәлән, уның ғаиләһе бит закон нигеҙендә дәүләт яҡлауы саралары менән файҙаланасаҡ. Статистикалағы тирбәлештәргә килгәндә, 1993-2000 йылдарҙа тыуған балалар тап бөгөн өйләнешеү йәшенә килеп етте, ләкин улар тыуған осорҙа илдәге иҡтисади хәл, дефолт менән бәйле, тыуым аҙ булды. Был да йәш ғаиләләр һанын кәмерәк күрһәтеп тороусы сәбәптәрҙең береһе. Уның ҡарауы, Махсус хәрби операция иғлан ителеп, мобилизация башланғас, никахҡа инеүселәр һаны бермә-бер артты. Был йәһәттән, уйынлы-ысынлы әйткәндә, Татарстан ЗАГС-тары пландарын арттырып үтәгәндер, тип әйтергә урын бар, сөнки беҙҙең ир-егеттәр шунда әҙерлек үтте һәм шул мәлдә байтаҡ ҡына йәштәр никахлашып өлгөрҙө.

Хәҙер никахлашыусылар өсөн генә түгел, ә бала тыуыу һәм башҡа акттарҙы теркәүҙә лә бөтөн уңайлыҡтар булдырыла. Мәҫәлән, былтыр 1 ғинуарҙан алып ЗАГС хеҙмәте Берҙәм дәүләт реестры программаһына күсерелде. Унда Дәүләт хеҙмәттәре порталы аша бөтөн кәрәкле мәғлүмәттәрҙе, шулай уҡ документтарҙы алырға була. Ә инде йәштәр, йәшәгән, эшләгән йә уҡып йөрөгән урынына ҡарамаҫтан, никахтарын тотҡарлыҡһыҙ үҙҙәре теләгән ҡала-ауылда теркәтә ала. Апрелдә мосолмандарҙың - ураҙа, православныйҙарҙың пост булды, унан һуң май айы ла халыҡтарҙа никах тантаналары өсөн бик уңышлы осор иҫәпләнмәй. Урыҫ халҡының "в мае - всю жизнь маяться" тигән ырымы башҡа халыҡтар өсөн тыйыу булмаһа ла, был яҙғы эштәр мәле һәм, ғөмүмән, беҙҙең халыҡта борондан уңыш йыйып, ҡыр эштәре тамамланғас, тәүге ҡар күҙе төшөп, һуғымдар һуйылғас башлана туй тантаналары. Алла бирһә, ЗАГС ишектәре яңы тормош башлаусы йәштәргә шар асыҡ булыр һәм әлеге көндә лә буш ултырмайбыҙ. Сағыштырыу өсөн былтырғы йылдың тәүге кварталында 77 никах теркәлгән булһа, быйыл шул уҡ осорға 68 пар мөнәсәбәттәрен законлаштырҙы. ЗАГС хеҙмәтенең, икенсе яҡтан, күңелһеҙ бурысы ла бар: никах теркәү шатлыҡлы ғәмәл, әлбиттә, ләкин бына ғаиләләрҙең айырылышыу актын теркәү һәр ваҡытта ла үкенесле хәл. Был йәһәттән ил буйынса күрһәткестәр арта бара, тиһәләр ҙә, йыш ҡына бының менән дә ризалашыуы ауыр. Бигерәк тә был төрлө сәбәптәр менән ялған (фиктив) айырылышыу осраҡтарына ҡағыла икән. Ә ғаилә тарҡалыуҙар, ысынлап та, борсоуға һала, шуға күрә бергә тормош ҡорорға ниәтләгән йәштәргә был яуаплы аҙымға барыр алдынан бер-береһен ныҡлап һынарға, уйларға, туғандар менән кәңәшләшергә кәрәк, тип уйлайым. Иң тәүҙә йәш кеше һайлаған йәренең яҙмышы өсөн яуаплылыҡ алырға, ғаиләлә булып торған төрлө хәлдәргә түҙеп, сабырлыҡ, фиҙаҡәрлек күрһәтеп йәшәргә әҙерменме, тип үҙ-үҙенә һорау бирергә тейеш.

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров оператив кәңәшмәлә республика Премьер-министры Андрей Назаровҡа Луганск Халыҡ Республикаһы менән эш буйынса юл картаһын ғәмәлгә ашыра башларға ҡушты. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, бынан алдараҡ республика етәксеһе вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Леонид Пасечник менән осрашыу булғайны.

✓12 майҙа Өфөнән бишенсе ирекле батальон хәрби әҙерлек үтеү урынына юлланды. Хәрби формированиеға легендар генерал Таһир Күсимовтың исеме бирелде. Был хаҡта Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Хөкүмәттең оператив кәңәшмәһендә хәбәр итте. Батальон Совет майҙанынан юлға сыҡты.

✓Башҡортостанда ирекле мотоуҡсылар полкын туплау эше дауам итә. Радий Хәбировтың Хөкүмәттең аҙналыҡ оператив кәңәшмәһендә билдәләүенсә, Рәсәй оборона министрының беренсе урынбаҫары Руслан Цаликовтың республикаға сәфәре барышында уны ойоштороу мәсьәләләре тикшерелде. Бынан алдараҡ полкта 2 меңгә яҡын кеше хеҙмәт итәсәге хәбәр ителгәйне. Улар - бер нисә батальон, артиллерия дивизионы, медицина хеҙмәте, танк, артиллерия подразделениелары.

✓Башҡортостанда яҙғы сәсеү 75 процентҡа тамамланған, тип хәбәр итте республика Хөкүмәтенең оператив кәңәшмәһендә Башҡортостан вице-премьеры - ауыл хужалығы министры Илшат Фәзрахманов. Тәүлегенә республикала яҡынса 90 мең гектар сәселә. Шул уҡ ваҡытта Әлшәй, Архангел, Дәүләкән, Ҡалтасы, Ҡырмыҫҡалы һәм Мәләүез аграрийҙары сәсеү эштәрен 90 проценттан ашыуға үтәгән.

✓Быйыл сығарылыш класы уҡыусылары өсөн һуңғы ҡыңғырау 22 йәки 23 майҙа яңғырай, сығарылыш кисәләре 2023 йылдың 23 йәки 24 июнендә була. Республиканың Мәғариф һәм фән министрлығынан хәбәр итеүҙәренсә, Башҡортостанда 15 меңгә яҡын сығарылыш уҡыусыһы өсөн ошондай мәктәп байрамдары ойошторола.

✓Башҡортостанда Һуңғы ҡыңғырау байрамында хәмер һатыу тыйыла, тип хәбәр иттеләр республиканың Сауҙа һәм хеҙмәттәр министрлығынан. Республика законына ярашлы, был тыйыу магазиндарҙа алкоголь продукцияһын ваҡлап һатыуға ҡағыла. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, республикала яңы йыл каникулдарында, Йәштәр көнөндә, Белем көнөндә һәм һабантуй үткәрелгән көндәрҙә лә алкоголь һатыу сикләнә.

ДОНЪЯ ШАҢДАУЫ

# БӨЛДӨРӘБЕҘ, ТИП...

## көслөрәк иттеләр...




**Рәсәй Хәрби Көстәр командалығы тарафынан Украинаның тыныс халыҡ йәшәгән ҡалаларына зыян килтермәү, фәҡәт хунтаның хәрби инфраструктураһы: хәрби аэродромдар, авиация, һауа һөжүменә ҡаршы оборона объекттарын ғына эшлектән сығарыу маҡсаты хаҡында алдан иғлан ителә килде һәм шул йүнәлеш әлегә тиклем һаҡлана.**

Тыныс халыҡҡа һәм социаль объекттарға хәүеф янамауына ҡабат-ҡабат баҫым яһалыуға ҡарамаҫтан, шуны уҡ Украина Ҡоралды Көстәре тарафынан өмөт итергә тура килмәй. Ул ғына ла түгел, Украинаның Хәүефһеҙлек хеҙмәте "күпләп ҡорбан булыусылар" хаҡында ялған видеороликтар төшөрөп, телеграм-каналдарға, социаль селтәрҙәргә һала һәм оятһыҙ рәүештә алдаҡ хәбәрҙәр тарата. Рәсәй оборона министры Сергей Шойгуның украин хәрбиҙәренә ҡарата ла кешелекле булыу хаҡындағы махсус күрһәтмәһе лә мәғлүм хатта, ләкин беҙҙең тарафтан кешелеклелек акты күрһәтелгән һайын, ҡаршы яҡтың мәкерлеге лә арта бара кеүек. Рәсәйгә япһарыу өсөн Украина хәрби көстәренең һәм нац-батальондарҙың үҙ халҡына ҡаршы ут асыу фактары хаҡында ла төрлө хәбәрҙәр йөрөй. Ә шулай ҙа бер көн килеп Кремлгә яҫҡыныу ихтималлығын эстән уйлаған хәлдә лә ысынбарлыҡта күҙ алдына килтереүе ҡыйын ине, сөнки Мәскәүҙең генә түгел, уның йөрәге Кремлдең күҙ ҡараһылай һаҡланыуына бер кемдең дә шиге булмағандыр, моғайын. Был террористик акт хаҡында РФ сит ил эштәре министры Сергей Лавров, Вашингтон күрһәтмәһе буйынса Киев режимы тарафынан эшләнгән һөжүм, тип атаны һәм уға ҡаршы анығ ғәмәлдәр менән яуап биреләсәк, тип әйтте. Шул уҡ ваҡытта америка йоғонтоһо хаҡындағы һүҙен йөпләп, АҠШ-тың дәүләт секретары Блинкендың, Мәскәүгә ҡаршы көрәш юсылдарын һайлауҙа Вашингтон Киевка ҡамасаулыҡ итмәйәсәк, тигән оятһыҙ белдереүен иҫкә төшөрҙө. Тимәк, Кремль күгендәге шартлауҙың кем тарафынан һөслөтелеүенә бер ниндәй шик тә юҡ. Рәсәйҙең бөгөнгө донъя ҡоролошона ҡаршы сығыуы гегемон роленә ингән АҠШ-тың һарыуын ҡайната. Әлбиттә, ул ошо йөҙөн һаҡлап ҡалырға һәм сәйәсәтте үҙенең шарттары буйынса атҡарырға тырыша. РФ сит ил эштәре министры урынбаҫары Сергей Рябковтың Беренсе канал эфирында әйтеүенсә, "Беҙ АҠШ менән мөнәсәбәттәрҙә ҡоралды конфликттан алып ҡалыу өсөн бөтәһен дә эшләйбеҙ." Ә бына Чехияның элекке хәрби разведка хеҙмәте башлығы генерал Петр Пелз Рәсәй менән Европа мөнәсәбәттәрен көйләүҙә бер генә юл күрә, ул да булһа, үҙ-ара килешеүҙәргә өлгәшеү. Сөнки, ти ул, Мәскәүҙе санкциялар менән бөлдөрәбеҙ тип, беҙ уны тағы ла көслөрәк эшләнек. Икенсенән, беҙ Ҡытайҙың Рәсәй менән яҡынайыуына булышлыҡ иттек, ә был союзды енеүе мөмкин түгел, тип иҫәпләйем, ти чех генералы Пелз. "Беҙ (йәғни Европа - **Авт.**) шуны аңларға теләмәйбеҙ: иң китмәле тәбиғи байлыҡтарға эйә, ватанын һаҡлап алып ҡалыу хаҡына ер өйҙәрҙә йәшәп, үлән ашарға ла риза булған шундай тарихлы рус халҡы булған донъялағы иң ҙур илгә унан Макдоналдстарҙы тартып алып ҡына зыян эшләүе мөмкин түгел" , - ти ул.

Әйткәндәй, Мәскәү АҠШ, Евросоюз һәм НАТО менән үҙ-ара ихтирам нигеҙендә мөнәсәбәттәр төҙөргә әҙерлеген бер нисә тапҡыр белдергәйне инде, ләкин, сит ил эштәре министры С.Лавров әйтмешләй, Көнбайыш менән мөнәсәбәттәрен, уның етәкселәре "айнығҡас" та, Рәсәй фәҡәт үҙ шарттарына ярашлы көйләйәсәк. Юғиһә, РФ Хәүефһеҙлек советы секретары Николай Патрушев "Известия" гәзитенә биргән әңгәмәһендә билдәләүенсә, АҠШ һәм уның Европа-клиенттары бер ниндәй оялыуһыҙ халыҡ-ара ойошмалар трибунаһынан тороп Рәсәйҙең һыу ресурстары менән планетаның бөтөн илдәре лә файҙалана алыу идеяһын килтереп сығарҙы. Йәнәһе, Рәсәйҙәге эсәр һыу запасы унда йәшәгән халыҡ һаны һәм илдең иҡтисади әүҙемлегенә тап килмәй. Ғөмүмән, көнбайыш ғалимдары һәм сәйәсмәндәре фәҡәт коллектив Көнбайыштың ғына донъя ресурстары менән файҙаланыу хоҡуғына эйә булыуы хаҡында әйткән һатырға батырсылыҡ итә, ә Рәсәйҙең, улар фекеренсә, был байлыҡтарға хужа булыуы ғәҙел түгел, имеш. Эш бына ҡайҙа табан бара. Бер ниндәй әхлаҡ сиктәренә һыйғыһыҙ ошондай аҫтыртын ниәттәре менән бергә үҙҙәренең мәкерле ике йөҙлөлөгән дә асып һалды беҙҙең күршеләр.

Илгә тағы ҙур һынау килде, ир-егеттәребеҙ ватаныбыҙ һағына баҫты. Үҙебеҙҙе үҙебеҙ һаҡламаһаҡ, беҙҙе тағы кем яҡлар?..

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## ? Бөгөн йәштәр ғаилә ҡорорға ашыҡмай, тиҙәр, был фекер менән килешәһегеҙме?

***Әлисә ҠУРАМШИНА, психолог:*** Бөгөн, ысынлап та, йәштәр ғаилә ҡорорға ашыҡмай. Ваҡытында беҙҙең өләсәйҙәр - 16, әсәйҙәр 18-20 йәштә кейәүгә сыҡһа, бөгөн был хәлдә осратыу ҡыйын. Совет осоро ҡыҙ һәм егеттәренең 15 йәштән колхозда эшләп, ата-әсәләренә ярҙамлашыуы, вуздан һуң йәнәтәндәре менән эшкә сумыуҙары хаҡында яҡшы беләбеҙ. Шул уҡ ваҡытта улар ғашиҡ булырға ла, гөрләтеп ғаилә ҡороп ебәрергә һәм балалар үстерергә лә өлгөргәндәр. Ошоларҙы уйлаһаң, бөгөн йәмғиәтебеҙ йәшәрә бара, тик был, үкенескә, йәштәрҙең балалыҡ осоронан сығыуы көрәгенән оҙағыраҡҡа һуҙылыу менән бәйле, тип әйтер инем. Йәмғиәттең, шулай тип әйтергә яраһа, "замана етлекмәгәнлеге" ( инфантилизация общества) йәштәрен артыҡ ҡурсылап-бәпләүенән киләләр, теһен. Был, тимәк, кешенең өлкәнлек ҡорона инеү ваҡыты кисектереләкилә, тиһәм һуҙ, сөнки ул үҙ иненә яуаплылыҡ алыуҙан ҡурҡа. Биологияла "неотения" тигән термин бар, ул теге йәки был биологик берәмек-организмдың "курсаҡ" (личинка) кимәлендә үсешмәй туҡтап ҡалыуын аңлата. Һәр бер сағыштырыу аҡһай, тиҙәр, ләкин кешегә ҡарата был терминды, белгестәр фекеренсә, психологик планда ҡулланырға була. Эйе, заманыбыҙ йылдам үҙгәрә: гаджеттар, заманса технологиялар кеше тормошон бик нығ еңеләйтә. Ә еңелгә кеше бик тиҙ өйрәнә: ниңә әле көс, нервылар түгергә? Янғыҙ башы, тыныс ҡолағы. Йәш кеше үҙен һөнәре өлкәһендә, планета буйлап сәфәрендә, яратҡан шөғөлөндә әҙләй, ә ғаилә уның өсөн "аяҡтарға - тышау, муйынға - ҡамыт, иректе тотҡарлаусы көртә" булып тойола. Ғашиҡ булырға, яратырға мөмкин, тик бына бер ҡыйыҡ аҫтында никах тураһында мисәтле ҡағыҙға буйһоноп йәшәү ҡайһы берәүҙәр өсөн мөмкин булмаған хәл тойола. Биғәйбә, был йәштәр йәмғиәтенең ниндәйҙер бер өлөшөнә хас күренеш; бәхеткә, бөтөн йәштәребеҙ ҙә улай уйламай. Күптәр табыша, ҡауыша. Ҡайһы берәүҙәргә ана шул алдынғы технологиялар ярҙам итә танышырға, аралашырға. Ҡайһы берәүҙәрҙең никахҡа инергә ашыҡмауына, шулай итеп, замана ҡасафатын да, бөгөнгө тормош рәүешен дә, башҡаһын да ғәйепләргә мөмкин, тик шулай ҙа мөһим бер нәмәне лә оноторға ярамаҫ ине: бөгөнгө йәштәр ниндәй ғаиләлә үҫкән, ниндәй тәрбиә алған, уларҙың бала саҡ йылдары бәхетле, ҡурсаулы булғанмы; ата-әсәләре араһында мөнәсәбәттәр ниндәй булған? Ә бит күпселек йәштәр тыныслыҙ, әр һәм талаш, эскелек хөкөм һөргән ғаиләлә буй еткергән һәм, тәбиғи, күңелендә шундай күңелһеҙ бала саҡ әҙемтәһе булған психик яра һаҡлай. Ошо юҫыҡта баланың киләсәк бәхете, яҙмышы имен һәм татыу ғаиләлә яралырға тейеш, тип ҡат-ҡат ҡабатлағы килә ата-әсәлек бурысы башҡарыусы өлкәндәргә төбәп.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.**

## Н И М Ә ?   Ҡ А Й Ҙ А ?   Ҡ А С А Н ?

✓26 майҙа Өфөлә "Китап байрамы" халыҡ-ара китап йәрминкәһе барышында "Кобайыр-шоу" этно-концерты була. Унда Башҡортостандан, Алтайҙан, Дағстандан, Саха Яҡутстандан, Ырымбур, Силәбе өлкәләренән, Мәскәүҙән, Екатеринбургтан, шулай уҡ Ҡытайҙан, Ҡырғыҙстандан, Малайзиянан, Үзбәкстандан сәсәндәр бер сәхнәгә йыйыла. Сара БДПУ алдындағы майҙанда киске сәғәт 6-ла башлана.

✓Киләһе "Атайсал" форумы Шүлгәнташ музейы майҙансығында була. Был хаҡта Башҡортостан Хөкүмәтенең оператив кәңәшмәһендә республика етәксеһе белдерҙе. "4 майҙа беҙ II "Ятташлыҡ көсө" форумын үткәрҙек. Беҙ башлап ебәргәндән алып кешеләр тыуған төйәгенә миллиард ярым һумға яҡын аҡса йүнәлткән. Ғаризалар арта - миненсә, проект билдәлелек яуланы", - тине Радий Хәбиров.

✓Башҡортостандың Мәғариф һәм фән министрлығы ведомство наградалары тураһында положениеға ҡайһы бер үҙгәрештәр индерергә ҡарар итте. Йәғни хәҙер Башҡортостанда йәшәүселәрҙең күбеһе "Почетлы остаз" билдәһен алыра мөмкин. "Уҡытыусы һәм остаз йылы хөрмәтенә Башҡортостандың Мәғариф министрлығы бойороғо менән "Почетлы остаз" билдәһенә тәҡдим ителгәндәргә талаптар ҡайтанан ҡаралды. Шулай уҡ квоталар арттырылды", - тип хәбәр иттеләр ведомствонан.

✓1 июлдән рәсәйҙәр, шул иҫәптән махсус хәрби операцияла ҡатнашыусылар поликлиникаларҙа психологтарға мөрәжәғәт итергә мөмкин. "Беҙҙә яңы тәртип буйынса һәр поликлиникала медицина психологтары булдырыла. 1 июлгә тәртип үҙ көсөнә инә. Әле төбәктәр менән эшләйбеҙ", - тине илдең һаулыҡ һаҡлау министры Михаил Мурашко, махсус хәрби операцияла ҡатнашыусыларға психологик ярҙам программаһын әҙерләү тураһында һорауға яуап бирел.

✓Башҡортостан Хеҙмәт министрлығынан республика халҡының 2023 йылдың июнендә нисек ял итәсәген хәбәр иттеләр. 2023 йылда йыл һайын 12 июнда билдәләнгән Рәсәй көнө дүшәмбегә тура килә. Шуға күрә рәсәйҙәр шәмбе, 10 июндән алып дүшәмбе, 12 июнгә тиклем өс көн ял итә. 9 июндә эш көнө ҡыҫҡармай. 28 июндә иһә мосолмандарҙың Ҡорбан байрамы. Быйыл ул шаршамбыға тура килгәс, Башҡортостан халҡы ошо көндә генә ял итә.

✓ *Башҡортостан Башлығы, "Башҡорт аты" үҙәген проектлағанда халыҡ-ара стандарттарҙы иҫәпкә алыу кәрәклеген билдәләп, Күсмә халыҡтарҙың бөтөн донъя уйындары кеүек ҙур саралар үткәреү мөмкинлектәрен ҡарарға ҡушты.*



## АТАЙСАЛҒА - ИЗГЕ ҒӘМӘЛДӘР

АТАЙСАЛ

# КӨСӨБӨҘ...

## тыуған яҡҡа

**Бер-беребеҙгә ярҙам итеү, кәрәк саҡта иңеңде ҡуя белеү, терәк-таяныс булыу - халҡыбыҙҙың иң матур ғәҙәттәренең береһе. Элек-электән холҡобоҙҙағы ошо сифаттар матур йолаларыбыҙға нигеҙ булған: бергәләшеп өй күтәреү, бесән әҙерләү, һуғым һуйыу, тула баҫыу, ауылдарыбыҙҙың тирә-яғын, йылға-күлдәребеҙҙе таҙартып тороу кеүек күмәк көс менән башҡарыла торған эштәр халҡыбыҙҙы берләштергән, илһөйәрлек, ерһөйәрлек сифаттары ла изге ғәмәлдәр аша тәрбиәләнгән.**

"Атайсал" проекты 2021 йылда уҡ Башҡортостан Республикаһы Башлығы Радий Хәбиров тарафынан тормошҡа ашырыла башлағайны. 2022 йылда ойошторолған "Яҡташлыҡ көсө" тип аталған тәүге форум был проекттың ни тиклем кәрәкле икәнен күрһәтте. Ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә әллә күпме файҙалы эштәр башҡарылған! Республика кимәле генә тар был проект өсөн - тыуған төйәгенән ситтә йәшәгән яҡташтарыбыҙҙың да был изге эшкә ҡушылырға теләктәре ҙур. Уларҙы барлау, матур ғәмәлдәрҙе баһалау, тыуып үҫкән ауылын, районын күркәмләндереү өсөн үҙ өлөшөн индерергә теләүселәрҙе берләштереү маҡсатында 2023 йыл "Атайсалға - изге ғәмәлдәр" йылы тип иғлан ителде. Асылыбыҙҙағы аҫыл сифатыбыҙҙың милли идеология кимәленә күтәрелеүен халыҡ ҡуш ҡуллап күтәреп алды. Бөгөнгө көндә "Атайсал" порталында 4 мең 600 кеше теркәлгән. 16, 5 мең проект (шуларҙың 6 меңгә яҡыны ағымдағы йылда) тормошҡа ашырылған: тыуған ауылында мәсет төҙөү, юл һалдырыу, ауыл зыяратын кәртәләү, клуб йә спорт залы һалдырыуға ярҙам итеү, мәктәп ремонтлатыу, дауаханаларҙы, мәҙәниәт усаҡтарын ҡиммәтле ҡорамалдар менән тәьмин итеү, балалар майҙансыҡтары төҙөү, конкурстарҙа бағыусы булыу, күп балалы әсәләргә йә һаулығы сикләнгәндәргә шифахаларға юлламалар бүләк итеү, тыуған төйәгенең йәш яҙыусы һәм шағирҙары өсөн әҙәби премия булдырыу - изге ғәмәлдәрҙең ниндәйе генә теркәлмәгән "Атайсал" порталында! Унда башҡарылған эштәргә күҙ һалыу менән яҡташлыҡ көсөн барлаусы проекттың кәрәк һәм изге ғәмәл икәнлегенә инанаһың.

**(Дауамы 6-сы биттә).**

## ТӨРЛӨҺӨНӘН

# УН ИКЕ АУЫЛ ЕҢДЕ



**"Торатау" конгресс-холында уҙған "Яҡташлыҡ көсө" форумында Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров "Айыҡ ауыл - 2022 " республика конкурсы еңеүселәренә наградалар тапшырҙы.**

Конкурстың йомғаҡлау ултырышында 12 еңеүсе раҫланды. Положениеға ярашлы, улар халҡының иҫәбенә ярашлы номинациялар буйынса билдәләнде. "Айыҡ ауыл-2022" республика конкурсы еңеүселәре:

**"Эре тораҡ пункттар" номинацияһы:**
I урын - Дүртөйлө районының Мәскәү ауылы;
II урын - Тәтешле районының Иҫке Күрҙем ауылы;
III урын - Йылайыр районының Юлдыбай ауылы.

**"Ҙур тораҡ пункттар" номинацияһы:**
I урын - Күгәрсен районының Бикбулат ауылы;
II урын - Хәйбулла районының Әбүбәкер ауылы;
III урын - Мәләүез районының Смаҡ ауылы.

**"Уртаса ҙурлыҡтағы тораҡ пункттар" номинацияһы:**
I урын - Йәрмәкәй районының Бекетов ауылы;
II урын - Белорет районының Олойылға ауылы;
III урын - Бөрйән районының Исламбай ауылы.

**"Бәләкәй тораҡ пункттар" номинацияһы:**
I урын - Көйөргәҙе районының Кинйә-Абыҙ ауылы;
II урын - Ғафури районының Оло Үтәш ауылы;
III урын - Ҡырмыҫҡалы районының Күлләр ауылы.

Республика конкурсының бүләк фонды - 40 миллион һум. Алты миллион күләмендәге иң ҙур приз "Эре тораҡ пункттар" номинацияһында еңеүсегә бирелде. Башҡа номинацияларҙа еңеүселәргә 5, 4 һәм 3 миллион һум тапшырыла, сумма ауылдың ҙурлығына ҡарап бүленә. "Айыҡ ауыл" проекты Башҡортостандың граждандар йәмғиәтенә булышлыҡ итеү фондынан республика етәксеһе гранты иҫәбенә тормошҡа ашырыла.

# ҠОМАРТҠЫЛАР ТЕРГЕҘЕЛӘ



**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров күсмә цивилизацияларҙың буласаҡ Евразия музейы майҙансығын ҡараны. Республика етәксеһе уның проекты менән былтыр июлдә "Шүлгәнташ" тарихи-мәҙәни комплексын асҡанда таныштырғайны.**

Яңы объект мәғәнә-йөкмәтке йәһәтенән бер нисә төп тарихи ҡомартҡыны, шул иҫәптән, Алтын Урҙа осороноң Турахан һәм Хөсәйенбәк мавзолейҙарын берләштереп торасаҡ. Музей комплексын бер нисә этапта төҙөү ҡарала. Быйыл уның биләмәһендә 550 кв.метр майҙанлы визит-үҙәк төҙөләсәк. Ә Турахан мавзолейына ял итеү өсөн майҙансыҡтар менән йәйәүлеләр һуҡмағы һалынасаҡ. "Архтамға" эксперт-проект бюроһының генераль директоры Рөстәм Әлибаев, визит-үҙәктә тарихи артефакттар күргәҙмәһе, лекция амфитеатры, кафе, балалар өсөн һәм экспозициялар ҡарау майҙансыҡтары урын аласаҡ, тип белдерҙе.

Радий Хәбиров шулай уҡ яңы төҙөләсәк "Башҡорт аты" үҙәгенең майҙансығында ла булды. Бында сабыштар өсөн манеждар, глэмпинг, оҫта ҡул-һөнәрселек ауылы һәм башҡа этно-тарихи биләмәләр булдырыу ҡарала. Былар музей комплексынан юл аша ғына урынлаштырыласаҡ. Башҡортостан Башлығы, "Башҡорт аты" үҙәген проектлағанда халыҡ-ара стандарттарҙы иҫәпкә алыу кәрәклеген билдәләп, киләсәктә бында, мәҫәлән, Күсмә халыҡтарҙың бөтөн донъя уйындары кеүек ҙур саралар үткәреү мөмкинлектәрен ҡарарға ҡушты.

Республика Туризмды үҫтереү үҙәге директорының урынбаҫары Артур Иҙелбаев төп объекттар, башҡорт аты һәм күскенселәрҙең традицион һөнәрселеге менән бәйле эштәр хаҡында һөйләне. "Беҙ Ҡымыҙ үҙәге һәм Түмәр-солоҡ умарталығы асырға уйлайбыҙ. Һөнәрселек ауылы күргәҙмә экспозицияһы булараҡ эшләйәсәк. Бынан тыш, оҫталар һәр төрлө әйберҙәр эшләп, күргәҙмәгә килеүселәргә һатасаҡ. Республикала киң таралған кейеҙ баҫыу, станокта һуғылған әйберҙәр, түмәр-солоҡ умарталары, саналар эшләү кеүек һөнәрселек төрҙәренә айырыуса иғтибар биреләсәк", - тип һөйләне Артур Иҙелбаев.

# ҠОРОЛОҠ БУЛЫРМЫ?



**Һыу кимәленең - аномаль түбән, март-апрелдең яуым-төшөмһөҙ булыуы һәм майҙа ҡоро көндәр көтөлөүе һөҙөмтәһендә яҙ һуңында уҡ Башҡортостан ҡоролоҡ һәм һыу наҡыҫлығы менән күҙгә-күҙ осрашыуы ихтимал.**

Быйылғы ташҡын кимәле барлыҡ тарихта иң түбәне булып тора. Өфө районында Ағиҙел йылғаһы ни бары 302 сантиметрға күтәрелә. Былтыр һыу кимәле - 460 сантиметр, 2021 йылда 637 сантиметр була. Әлеге ваҡытта Өфө эргәһендә Ағиҙелдә күтәрелгән һыу кимәле 72 сантиметр тәшкил итә. Был йәй уртаһы өсөн хас күренеш. Былтыр был ваҡытта йылға кимәле - 246, 2021 йылда 387 сантиметр булған.

Синоптиктар майҙы ҡоро һәм йылы, һауа температураһының уртаса күрһәткесе норманан 1 градусҡа юғарыраҡ, йәғни 14 градус буласаҡ, тип фаразлай. Яуым-төшөмгә килгәндә, уның күләме уртаса айлыҡ норманан кәмерәк көтөлә. "Ҙур территория - Төньяҡ-Көнбайыш федераль округ, Урал, Волга буйы, Көнбайыш Себерҙең төньяғы фаразланған аномалиялар солғанышында, йәғни уларҙа температура сағыштырмаса юғары буласаҡ", - тип белдерә ТАСС, Рәсәй Гидрометүҙәгенең ғилми етәксеһе Роман Вильфанд фаразына нигеҙләнеп.

2010 йылдан алып Башҡортостанда аҙ һыулы һәм ҡоро йылдар осоро йышайҙы. Был коммуналь инфраструктураға, сәнәғәткә һәм ауыл хужалығына климаттың яңы ысынбарлығына ҡулайлашыу мөмкинлеген бирҙе. Атап әйткәндә, эсәр һәм сәнәғәт һыуҙары йыйылған конструкциялар йылғаларҙың түбән кимәле шарттарында эшләүгә яраҡлаштырылды, юлдарға ҡеүәтле һәм оҙайлы ҡояш йылыһына сыҙамлы асфальт һалына башланы. Ауыл хужалығында яландарҙы һуғарыу өлкәһе киңәйтелә. Шуға ҡарамаҫтан, ҡоролоҡ һәм йылғаларҙа һыу кимәленең түбән булыуы ҡыҫҡа ғына ваҡытта миллиард һумлыҡ зыян килтерергә һәләтле проблема булып ҡала.

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓20 майҙа Өфөлә унынсы "Йәшел марафон" ойошторола. Старт "Башҡортостан" лайфстайл үҙәге майҙанынан (Менделеев урамы, 205А) иртәнге сәғәт 10-да башлана. Балалар араһында иң етеҙҙәре билдәләнә, ә көндөҙгө сәғәт 12-лә 4,2 саҡрымға күмәк старт башлана. "Йәшел марафон" Рәсәйҙең 180 ҡалаһында үткәрелә. Өфөлә иһә был сарала йыл һайын 7 меңдән ашыу кеше ҡатнаша. Ярышта ҡатнашыусыларҙың физик әҙерлеге мөһим түгел, ләкин табиптың рөхсәте кәрәк. 6+

✓16 майҙа Өфөлә "Торатау" Конгресс-холында башҡорт халҡының күренекле дини үә йәмәғәт эшмәкәре Зәйнулла Рәсүлевтың 190 йыллығына арналған Халыҡ-ара фәнни-ғәмәли конференция була. Ойоштороусылары - БР Башлығы Хакимиәте, Өфө фән һәм технология университеты, Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты, Рәсәй мосолмандарының Үҙәк диниә идараһы, Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы һәм "Әбүғәлисина" фонды (Мәскәү ҡалаһы).

✓Өфө туҡланыу индустрияһы һәм сервис колледжы "Хәрби ашнаҡсылар эшен ойоштороу" программаһы буйынса ашнаҡсыларҙың квалификацияһын күтәреү программаһын башлап ебәрҙе. Курстар тәү сиратта махсус хәрби операция зонаһына юлланырға әҙерләнгәндәр өсөн тәғәйенләнгән. Уҡыу бушлай. Дәрестәр Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 32 адресы буйынса үткәрелә. Тулыраҡ мәғлүмәтте (347)295-94-04 телефоны буйынса (өҫт. 302) алырға мөмкин. Мария Сергеевна Юртаеваға мөрәжәғәт итергә.

✓"Пятерочка" магазинында "фермер утрауы", йәғни "магазин эсендәге магазин" асылды. Ҙур сауҙа селтәре эсендәге "фермер утрауы" шәхси эшҡыуарҙарҙың тауарын һатыу күләмен арттырырға ярҙам итергә тейеш. Әле бында 18 етештереүсе үҙ тауарын тәҡдим итә. Мәғлүм булыуынса, фермер продукцияһы сифатлы, хәүефһеҙ булыуы менән отошло.

✓Өфөгә Мәскәү трамвайҙары килеүе дауам итә. Май уртаһына тиклем барлығы 7 вагон "Татра"Т3 МТТЧ (Чехияның модернизацияланған "Татра" трамвайы) килергә тейеш. Мәскәү трамвайҙары яңы булмаһа ла, улар 98 процентҡа таушалған Өфөнөкөнән йәшерәк. Бынан тыш, илдең баш ҡалаһы тотонолған транспортты төбәктәргә бушлай бирә, был иһә муниципаль бюджетты өҫтәмә көсөргәнештән бушата.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

# ИР-ЕГЕТ УҠЫТЫУСЫНЫҢ...

## күберәк булғаны яҡшы



**Черниковка - баш ҡаланың эшселәр районы булараҡ билдәле. 48-се Башҡорт лицейы - райондың милли-мәҙәни үҙәктәренең иң мөһиме булып һанала, сөнки ул ошо территорияла йәшәгән башҡорттарҙың балаларының әсә телендә белем алыу, уның мәҙәниәтен, тарихын әсә телендә өйрәнеү хоҡуғын тормошҡа ашыра. Киләһе 2023-2024 уҡыу йылында лицейҙың барлыҡҡа килеүенә теүәл сирек быуат була. Ошо ваҡыт эсендә белем усағы ниндәй уңыштарға өлгәшкән? Лицей директоры Оксана МӨХӘМӘТЙӘНОВА менән әңгәмәне шул һорауҙан башланыҡ.**

- Лицей тарихында иң ҙур проект тип быйыл икенсе тапҡыр үткәрелгән "Заман" республика медиафорумын билдәләргә мөмкин. Быға тиклем ундай ҙур форматтағы сара булғанын уҡыу йортобоҙ иҫләмәйҙер ҙә. Шуға ла 2024 йылда медиафорумды тағы ла юғарыраҡ кимәлгә күтәреп, уны төбәк-ара форматта ойоштороу идеяһы менән янабыҙ. "Заман" үҙ эсенә оҫталыҡ дәрестәрен, семинарҙарҙың мобиль фото төшөрөү, блогер һөнәре, видеомонтаж нигеҙҙәре, журналистика, медиапроекттар һәм медиафинанс мәсьәләләре кеүек йүнәлештәрен берләштерә. Лицейҙа үҙенең операторы, монтажсыһы, фотографы булған "48-се кадр" тип аталған медиаүҙәк бар. Тап ошо балалар медиафорумын үткәрергә ярҙам итте, фотоға төшөрөп йөрөнөләр, интервьюлар алдылар, репортаж, сюжет эшләнеләр. Медиаүҙәк "Тамыр" телеканалы менән хеҙмәттәшлек итә, Рөстәм Рәфғәтдинов тигән егетебеҙ телеканалда ла, "Тамыр"ҙың төрлө концерттарында ла төп алып барыусы. Азалия Хөсәйенова ла сюжеттар төшөрөп, әлеге ваҡытта эшләп йөрөй. Ошондай һөҙөмтәләрҙе лицей уҡыусылары күреп йөрөй һәм үҙҙәренә өлгө итеп ала. Мәҫәлән, быйыл 11-се синыфта уҡып йөрөгән Диана Чуднина тигән ҡыҙыбыҙ Өфө фән һәм технологиялар университетының Башҡорт филологияһы, шәрҡиәт һәм журналистика факультетына уҡырға барам, журналист булам, тип, үҙ алдына маҡсат ҡуйҙы.

**➔ Һеҙҙең лицей - баш ҡаланың сәнәғәт зонаһы булған Черниковка бисҭәһенең йәш быуынында телгә, мәҙәниәткә, тарихҡа һөйөү тәрбиәләүсе үҙәк. Ошо йүнәлештә белем усағы эсендә ниндәй эштәр алып бараһығыҙ?**

- Беҙҙә бик күп түңәрәктәр эшләй, шуларҙың бер нисәһе тап башҡорт мәҙәниәтенә ҡағыла. Мәҫәлән, "Зәлифә" бейеү ансамбле, "Һорнай" ҡурайсылар ансамбле, фольклор түңәрәге бар. Балалар уларға бик теләп йөрөй. "Новатор" мәҙәниәт һарайы ҡарамағында эшләп килгән йәкшәмбе мәктәбе балаларҙың әҙәби телмәрен үҫтереү йәһәтенән ҙур эш алып бара. "Урал батыр" эпосын балаларға ятлатып, конкурстарға сығаралар. Быйыл ике уҡыусыбыҙ "Һаумы, һаумы, әкиәт!" конкурсында беренсе урынға лайыҡ булды. Шулай уҡ башҡорт телендәге "Шаяниум" шаяндар һәм тапҡырҙар бәйгеһендә йыл һайын ҡатнашабыҙ һәм уңышлы сығыш яһайбыҙ.

Мәғлүм булыуынса, баш ҡаланың үҙәгендә урынлашҡан, нигеҙҙә зыялыларҙың балалары уҡыған 158-се, 20-се башҡорт гимназияларынан айырмалы, беҙҙә Черниковка заводтарында эшләгән ябай эшселәрҙең балалары белем ала. Ата-әсәләре көнө-төнө эштә, өйҙә балалары менән башҡортса бик һөйләшмәйҙәр. Шуға бындай балалар менән эшләү ҡыйыныраҡ, әлбиттә, әммә ата-әсәләр менән дә эш алып барыла. Ҡайһы бер балалар башҡортса бик матур һөйләшә, ҡайһы берҙәре тырыша һәм барыһының да башҡортса һөйләшергә, уҡырға, телмәрен камиллаштырырға теләге бар. Тағы беҙҙә "Оҫҡон" гәзите сығып тора һәм унда балалар үҙҙәренең мәҡәләләрен, шиғырҙарын баҫтыра.

**➔ Черниковка завод-предприятиеларында төрлө милләт вәкилдәре эшләй. Башҡорт лицейы тип аталһа ла, һеҙҙә башҡорт балалары ниндәй нисбәттә? Белем биреү, нигеҙҙә, ниндәй телдә алып барыла?**

- Лицейҙа территориаль беркетеү булмаһа ла, төрлө милләт балалары белем ала, шулай ҙа балаларҙың дөйөм һанының яртыһын башҡорттар алып тора, шуға башҡорт мөхитенә төп иғтибар бирелә. Төрлө башҡорт милли байрамдарын һәм йолаларын үткәрәбеҙ, икенсе байрамдар беҙҙә юҡ. Ҡайһы бер сараларҙы башҡортса-русса алып барһаҡ, ҡайһы берҙәрен тик башҡортса ғына алып барабыҙ, сөнки уҡырға килгәндә үк барыһы ла башҡорт лицейына килгәнен белеп килә. Хатта ҡайһы бер икенсе милләт вәкилдәренең балалары мотлаҡ беҙҙең лицейҙы һайлай һәм быны башҡорт белем усаҡтарында тәртиптең яҡшыраҡ булыуы менән аңлаталар.

**➔ Башҡа милләт балалары уҡыған мәктәптә, гәҙиттә, ата-әсәләре башҡорт телен уҡытыуға ҡаршы сыға. Был йәһәттән һеҙҙә хәлдәр нисек?**

- Әллә эшселәр булғанғамы, ни өсөндөр, уныһын аңлата алмайым, әммә ата-әсәләр менән башҡа милли белем усаҡтарында булған проблема беҙҙә юҡ. Ата-әсәләр уҡыу барышына, бигерәк тә башҡорт телен уҡытыуға ҡыҫылып, шау-шыу тыуҙырмай. Башҡорт теле беренсе линия буйынса туған тел булараҡ уҡытыла. Лицейҙа уҡырға теләгән һәр кемде һәм уларҙың ата-әсәһен уҡытыу процесы менән таныштырабыҙ һәм башҡорт теле, рус теле, математика буйынса һынау тапшыртып ҡабул итәбеҙ.

**➔ Башҡа белем усаҡтарында булмаған ниндәй сараны үҙегеҙгә генә хас үҙенсәлек тип әйтә алаһығыҙ?**

- Беҙ ҡыҙҙар өсөн "Матурҡай" тигән конкурс үткәрәбеҙ. Унда 1-11-се кластан берәр ҡыҙ ҡатнаша. Сара саф башҡортса үтә, быйыл икенсе тапҡыр ойоштороҡ. Былтыр ҡыҙҙар Альбина апай Исхакова эшләгән селтәрҙәрҙе кейеп, дефиле үткәрһә, быйыл селтәр, хәситә, маңлайса һ.б. башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының биҙәнеү әйберҙәрен үҙ ҡулдары менән эшләп, үҙҙәре күрһәтте. Шулай уҡ конкурс барышында милли аштарҙы әҙерләүгә ҙур иғтибар бирелә.

**➔ Ҡыҙҙар өсөн бөтөн мөмкинлектәр, шарттар күберәк тыуҙырыла, ә малайҙар һәм үҫмерҙәрҙе ир-егет итеп тәрбиәләү өсөн нимәләр эшләнә?**

- Дөрөҫөн әйткәндә, малайҙар өсөн үҙенсәлекле проект индереп өлгөрмәнек, сөнки мин директор булып эш башлағанға әле ике генә йыл. Әммә беҙҙең лицейҙа шундай ыңғай бер мәл бар: ике йыл элек лицейҙа 2-3 ир-егет эшләй ине, әлеге ваҡытта улар 12 кеше. Минең фекеремсә, белем усаҡтарында ир-егеттәр күберәк булырға һәм малайҙар, егеттәр уларҙан өлгө алырға тейеш. Балалар ир-егеттәрҙе ярата, уларҙың дәрестәренә ҙур теләк менән йөрөй. Хыялда малайҙар-егеттәр менән айырым эш алып барыу ниәте бар, әммә уның өсөн төплө, харизматик ир-егет кәрәк һәм ул тәжрибәле, абруйлы булырға тейеш.

**➔ Лицейҙа ир-егеттәр күбәйгәс, мәктәптәге малайҙарҙың, үҫмерҙәрҙең холҡо, үҙҙән тотошо үҙгәрҙеме, юҡмы?**

- Әлбиттә, улар үҙҙәрен икенсерәк тота башланы. Һәм, ғөмүмән, ҡатын-ҡыҙға мөнәсәбәте үҙгәрә. Мәҫәлән, 1-се класс булһынмы, 11-се класс булһынмы - мин уларға һәр саҡ ир-егет итеп ҡарайым, шуға уҡыусы ҡыҙҙарға ла ултырғыстарҙы партанан күтәреп төшөрөргә рөхсәт итмәйем. Ҡыҙҙарға малайҙар-үҫмерҙәр ярҙам итә. Әле шуны һиҙәм, эш башлағанда коридорҙа үтеп барғанда ҡараштарын йәшереп, оялыңҡырап үтеп китһәләр, хәҙер малайҙар һәм үҫмерҙәр бөркөт һымаҡ ҡанаттарын киреп, егеттәр кеүек ғорур, күҙҙәренән осҡон сәсеп йөрөй. Был үҙгәреш күҙгә ташланып тора.

**➔ Ир-егеттә ирҙәр характерын тәрбиәләүҙә ҡатын-ҡыҙҙың да әһәмиәте ҙур, тимәк. Уларға бәләкәйҙән шундай ҡараш булырға тейеш.**

- Әлбиттә. Шәхсән мин өс бала әсәһе, шуларҙың икеһе малай, икеһе лә хоккеист, бер ҡыҙ. Бәләкәй улыма биш йәш тә тулмаған, мин уға бәләкәй ир-егет итеп ҡарайым. Уның ишеккә көсө лә етмәҫкә мөмкин, әммә ул минә ишек асып тотоп тора, атаһы өйҙә булмаһа, иң төп кеше булып ҡала. Үҙен иркен тота һәм мыжып, ныйылдап-мыйылдап йөрөмәй.

**➔ Белем биреүҙә күп нәмә уҡытыусынан тора, тип әйтә алаһығыҙмы?**

- Әлбиттә, мәҫәлән, 20-се Башҡорт ҡала гимназияһы һәм башҡалар ҡаланың үҙәгендә урынлашҡан. Улар уҡытыусыларҙы һайлап алыу мөмкинлегенә эйә. Ә Черниковкаға килеүселәр бик аҙ, уларҙы һайлап алып та булмай. Ләкин шул ваҡытта ла күберәк уҡытыусы табырға һәм һайлап алырға тырышаһың. Мәҫәлән, беҙгә биология уҡытыусыһы "Мир фирмаһы" туҡталышынан Черниковкаға килеп уҡытып йөрөй, уға ныҡ алыҫ һәм ҡыйын. Ә үҙебеҙҙең эргәнән табыу - бик ауыр. Кузнецов Затонынан килеп эшләгән педагогтар булды. Улар йыл-йыл ярым ғына түҙә һәм икенсе урынға китә. Шуға белем усағының урынлашыуы ла ҙур роль уйнай. Был йәһәттән булған уҡытыусыларҙы заманса эшләргә, ҿҙаллы белем алырға, камиллашырға өйрәтергә кәрәк.

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ әңгәмәләште.**

# ХАЛЫҠ ДАУАҺЫ



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Һары сәрүәр ағасы

❖ Һары сәрүәр ағасының (карагана древовидная - желтая акация) 2 ҡалаҡ кипкән япрағына 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, 2 сәғәт төнәтергә. Төнәтмәне үҙәк көйгәндә 2-3-әр ҡалаҡ эсергә. Былдай төнәтмәне оҙайлы ваҡыт, бер айҙан күберәк эсһәң, атеросклероздан ярҙам итә. Хатта баш ауырыуы ла бөтөүе ихтимал.

❖ Киҫкен респираторлы ауырыуҙан 1 балғалаҡ һары сәрүәр ҡайырыны 1 стакан һыу иҫәбенән сығып алырға һәр 7-8 минут ҡайнатып, 2 сәғәт төнәтергә. Көнөнә 3 тапҡыр йылы көйөнсә йәйләп, аҙ уртлап яртышар стакан эсергә. Ул бик яҡшы йомшартыусы сара.

### Ҡуян көпшәһе

❖ Ҡуян көпшәһе (живокость полевая) ағыулы үҫемлектәрҙән булһа ла, халыҡ дауаһында яман шешкә ҡаршы һөҙөмтәле ҡулланыла. Әммә уның миҡдарын теүәл күҙәтеп ҡулланыу кәрәк. Ҡан баҫымы түбәнәйгән, йә мускул тонусы насарайғанда ярамай. Бөйөр һәм бауыр яман шеше булғанда 2 ҡалаҡ киптерелгән үләнгә 1 литр ҡайнар һыу ҡойоп, һауыты менән ҡайнап торған һыу быуына 15 минутҡа ҡуйырға, 1 сәғәт һыуынғанын көтөргә һәм һөҙөргә. Көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан 1 сәғәт алда йәки ашағандан һуң 1 сәғәт үткәс, 1/3 стакан эсергә.

❖ Үпкә елһенгәндә 1 балғалаҡ үләнгә 2 стакан ҡайнар һыу ҡойорға, йылы урында 8-10 сәғәт төнәтергә, һөҙөргә, ашағандан һуң көнөнә 4 тапҡыр 1/3 йәки 1/4 стакан эсергә.

### Гөлбаҙран

❖ Холецистит булғанда 50 грамм киптерелгән гөлбаҙран (пижма обыкновенная) сәскәһенә 0,5 литр араҡы ҡойоп, 2 аҙна төнәтергә. Көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан 20 минут алда теүәл 25 тамсы тамыҙып эсергә. Был рәүешле, гәҙиттә, 3 аҙна тирәһе дауаланалар.

❖ Тире яман шеше осрағында 5 ҡалаҡ киптерелгән гөлбаҙран сәскәһенә 0,5 литр ҡайнар һыу ҡойоп, талғын утта 10 минут ҡайнатырға, 1 сәғәт төнәтеп һөҙөргә. Сылатҡыстар яһарға, ваҡытыҙ ваҡыты менән алмаштырып торорға.

**Гәлиә ШӘМСИЕВА әҙерләне.**

✓ ***"Атайсал" проекты рухи яҡтан яҡындарҙы берләштерҙе, ул хәҙер проект ҡына түгел, ә тыуған төйәктәрен яратыусылар хәрәкәте, берҙәмлек символы" - тине Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров.***



*ЙОЛАНҒАН ЙҮН ТАП!*



# БАШҠОРТ БИҘӘҮЕСТӘРЕ

**Яға.** Учалы төбәкте өйрәнеү музейында һаҡлана. Тапшырылыу урыны - Илсе ауылы. Оҙонлоғо 40 см, өҫкө киңлеге 20 см, аҫҡы киңлеге 32 см, ауырлығы 1120,4 г. Биҙәүестә барлығы 276 элемент. Шуларҙың 147-һе - көмөш.



**Яға.** Учалы төбәкте өйрәнеү музейында һаҡлана. Тапшырылыу урыны - Байһаҡал ауылы. Оҙонлоғо 36 см, өҫкө киңлеге 16 см, аҫҡы киңлеге 32 см, ауырлығы 947,0 г. Биҙәүестә барлығы 192 элемент. Шуларҙың 37-һе - көмөш.



**Яға.** Учалы төбәкте өйрәнеү музейында һаҡлана. Тапшырылыу урыны - Иҡсан ауылы. Оҙонлоғо 35 см, өҫкө киңлеге 20 см, аҫҡы киңлеге 27 см, ауырлығы 1066,0 г. Биҙәнеү әйберендә барлығы 298 элемент. Шуларҙың 170-е - көмөш.



**Азат ҒАРИПОВ,**
**этнограф.**
**"Башҡорт биҙәнеү әйберҙәре" китабынан.**

*АТАЙСАЛҒА - ИЗГЕ ҒӘМӘЛДӘР*

# КӨСӨБӨҘ...

## тыуған яҡҡа

**(Башы 4-се биттә).**

4 майҙа "Торатау" Конгресс-холына "Яҡташлыҡ көсө" форумы изге уйлы, изге ниәтле меңдән ашыу меценаттарҙы, әүҙем эшҡыуарҙарҙы, йәмәғәт эшмәкәрҙәрен бергә йыйып, "Атайсал" проектының тәүге һөҙөмтәләрен барланы. Форум сиктәрендә йәмәғәт эшмәкәрҙәре һәм ижади интеллигенция өсөн "Илһамландырыу өсөн тыуғандар" панель секцияһы, асыҡ студиялар, төрлө йүнәлештәге фекер алышыу майҙандары, матбуғат сараларының эшмәкәрлеген, "Айыҡ ауыл" республика конкурсы проекттарын, ағинәйҙәр, йәш яҡташтар берлеге хәрәкәттәрен, махсус хәрби операцияла ҡатнашыусыларға ярҙам ойоштороу мәсьәләләрен яҡтыртҡан түңәрәк өҫтәлдәр һәм секциялар эшләне.

Шәхсән үҙем республикала әүҙем эшләп килгән "Ағинәй" һәм "Ир-егеттәр ҡоро" йәмәғәт ойошмалары етәкселәрен бер майҙанға туплаған "Беҙ - Атайсалдың усағын, йолаларын, именлеген һаҡлаусылар" секцияһы эшендә ҡатнаштым. Был майҙанға саҡырылыусыларҙың уйниәттәренә Свердловск өлкәһе губернаторы урынбаҫары, сығышы менән Мәләүез районы Муллағол ауылынан булған күренекле яҡташыбыҙ Азат Сәлиховтың һәм РФ Дәүләт Думаһы депутаты Зариф Байғусҡаровтың ҡатнашыуы мәртәбә өҫтәне. "Беҙ - айыҡбыҙ, иманлыбыҙ, кәсеплебеҙ; беҙ - Атайсалыбыҙҙың ҡотон, рухын, усағын һаҡлаусылар", - тине Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы Янбаева ҡорға йыйылыусыларҙың тәжрибә уртаҡлашыу майҙансығын асып. Ысынлап та, республиканың төрлө төбәктәренән килгән ағинәйҙәр тергеҙгән кәсептәр һоҡландырырлыҡ: аҫалы балаҫтар, сергетыш, милли кейемдәребеҙ, биҙәүестәр, тамбурлы сигеү менән нағышланған алъяпҡыстар, өҫтәл, ултырғыс япмалары - һәр береһе ҡойоп ҡуйған, һәр биҙәккә халҡыбыҙҙың меңәр йылдар туплаған фәлсәфәһе нағышланған, ҡото һеңгән. "Беҙ эшләгән әйберҙәргә һорау бар, заказ биреүселәр күп, эшләп өлгөрөп булмай", - тиҙәр сығыш яһаусы ағинәйҙәр. Эшләй генә башлаған йылдарында балаҫ һуғыу өсөн станоктар эҙләү, кейеҙ баҫыу өсөн ауылдар буйлап һарыҡ йөнө йыйып йөрөү күп ваҡыттарын алған, хәҙер ул хәстәрҙәр хәл ителгән: һорау булғас, станоктар эшләүсе ирҙәр, һарыҡ үрсетеүсе фермерҙары ла табылған. Эшләп кенә өлгөр!

"Беҙ ағинәйҙәрҙе йырлап-бейеп, сәхнәләрҙә генә йөрөй тиһәк, уларҙың кәсептәре лә бар икән!" - тип аптырашты ҡайһы бер районадан килгән ирҙәр. Ысынлап та, ҡайҙа ҡарама, ниндәй сараны алма - ағинәйҙәр майҙан уртаһында шул: ил хужаларын ҡаршы алыусылар ҙа, килен төшөрөүселәр ҙә, эскелеккә ҡаршы көрәшеүселәр ҙә, һалдаттарҙы әрмегә оҙатыусылар ҙа, хәрби операцияла ҡатнашыусылар өсөн йылы ойоҡбаштар бәйләүселәр ҙә, туҡмас ҡырҡыусылар ҙа, ҡорот баҫыусылар ҙа - ағинәйҙәр. Уйынлы-ысынлы әйтелгән һүҙгә ағинәйҙәрҙең яуабы тос булды: "Беҙ донъяны биҙәйбеҙ!" Улай ғына ла түгел, "Ир-егеттәр ҡоро" ағзаларын да әүҙемерәк булырға саҡырҙы улар. Халҡыбыҙҙың ирҙәр генә эшләр шөғөл-кәсептәре, йолалары, тәрбиә мәктәптәре күптән көтә ир-егеттәребеҙ ғәмәлдәрен.

**Ир-егеттәр хәрәкәтен әүҙемләштереү буйынса тәҡдимде Башҡортостан "Ир-егеттәр ҡоро" рәйесе Зариф Байғусҡаров та хупланы: "Елкәң булһа, ауылда лә йәшәп була, ҡарағат, һарымһаҡ үҫтер, һарыҡсылыҡты тергеҙ, ошо тәңгәлдә уңыш ҡаҙанғандарҙың тәжрибәһен барып өйрән. Умартасылар умарта кәрәк-яраҡтары, солоҡтар һатып алырға әҙер - эш күп. Өйрән, эшлә, эш урындары булдыр - был эштәргә улыңды, ейәнеңде лә өйрәт - халҡыбыҙҙың кәсептәрен тергеҙеүгә үҙ өлөшөңдө индер", - тип саҡырҙы ул ир-егеттәрҙе һәм үҙ тәжрибәһе, үҙ балалары менән бергә башҡарған изге ғәмәлдәре менән ихлас уртаҡлашты.**

Зариф Закир улының милләтебеҙҙең ҡотон һаҡлаусыларға төбәп әйтелгән тағы бер теләк-үтенесе айыҡ тормош булһа, икенсеһе - телебеҙ яҙмышы булды. "Иң мөһиме - ейәндәрегеҙ менән үҙ телебеҙҙә аралашығыҙ, телгә мөнәсәбәт ғаиләнән башлана", - тине ул. Хаҡ әйтте Зариф Закир улы - уның менән килешмәү мөмкин түгел. Эше буйынса аралашыу башлыса рус телендә һөйләшеүҙе талап итһә лә туған телен бөтә нескәлектәрендә белеүе, телмәрендә мәҡәл-әйтемдәрҙе иркен ҡулланыуы һоҡландырҙы Зариф Закир улының. Иң изге ғәмәл дә, бәлки, туған телебеҙҙе балаларыбыҙға, ейән-ейәнсәребеҙгә тапшырыу, туған телебеҙгә, тыуған төйәгебеҙгә тоғролоҡтор? Ғүмеренең күп өлөшөн ситтә үткәрһә лә Азат Рәфҡәт улы Сәлихов та тоғро кесе ватанына: 2017 йылда уҡ тыуған ауылына мәсет һалдыртҡан, изге йортҡа үҙен изге ғәмәлдәргә өйрәтеүсе Нәсимә өләсәһенең исемен биргән.

"Атайсал" проекты рухи яҡтан яҡындарҙы берләштерҙе, ул хәҙер проект ҡына түгел, ә тыуған төйәктәрен яратыусылар хәрәкәте, берҙәмлек символы" - тине Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров быйылғы йылдың төп идеологик майҙансығы эшенә баһа биреп. Юғары кимәлдә үткән форумға юғары ҡунаҡтар саҡырылған. Улар араһында 1991 йылда Рәсәйҙең яңы йәштәр сәйәсәтен формалаштырыусы, Йәштәр эштәре буйынса дәүләт комитетының беренсе рәйесе Андрей Шаронов, һалымдар һәм йыйымдар буйынса федераль министр Геннадий Букаев (әйткәндәй, күп ғәмәлдәребеҙҙе теркәп барыусы "социаль номер" - ИНН-ды ла Геннадий Иванович уйлап тапҡан, ИНН Башҡортостанда һынау үткәндән һуң тотош Рәсәйҙә ғәмәлгә ингән), Бөтә Рәсәй дәүләт телерадиокомпанияһының генераль директоры урынбаҫары - төбәк департаменты етәксеһе Рифат Сабитов кеүек күренекле яҡташтарыбыҙ ҙа бар ине. Ҡатмарлы шарттарҙа Рәсәй мәнфәғәтен яҡлаусы дипломат Азамат Рәхмәт улы Ҡолмөхәмәтов менән киң билдәле дәүләт эшмәкәре, Рәсәй Геройы Анатолий Александрович Сафронов хәрбиҙәрсә ҡыҫҡа һәм аңлайышлы итеп еткерҙеләр: "Беҙ Тыуған илдең тыныслығы һәм именлеге өсөн эшләйбеҙ".

Пленар ултырыштың һуңында Радий Хәбиров "Атайсал" проектында ҡатнашҡан бер төркөм әүҙем меценаттарға дәүләт наградалары һәм Рәхмәт хаттары тапшырҙы. "Айыҡ ауыл" республика конкурсы еңеүселәрен бүләкләү ҙә "Атайсал" проекты сиктәрендә үтте. "Атайсалға - изге ғәмәлдәр" йылы уйлыларҙы, ғәмләләрҙе, сәмлеләрҙе бергә туплай. Тупландыҡ. Уйлы, ғәмле, сәмле яҡташтарыбыҙҙың береһенән-береһе матур эштәрен күреп илһамландыҡ. Көсөбөҙ - республикабыҙҙың матур киләсәге хаҡына эшләнгән һәм эшләнәсәк изге ғәмәлдәребеҙҙә икәненә инандыҡ.

**Ғәлиә КӘЛИМУЛЛИНА.**



"Киске Өфө" гәзитенең махсус бите

20

# Ғаиләм-ҡәлғәм

13-19 май (һабанай)

2023 йыл

№18 (1060)

ӘЙТӘГҮР!



**Яратыу мөһимме, әллә яратылыумы? Йәш саҡта, йәғни ғаилә ҡорғанға тиклем был хаҡта барыбер башҡасараҡ фекер йөрөтәбеҙ. Хатта ул тойғо үҙе лә икенсерәк булған кеүек, романтика, матур хыял, мәңгелек хис булараҡ ҡабул итәбеҙ. Әммә ғаилә ҡороп, бер аҙ йәшәй биргәс, ул тойғо ла, уға булған ҡараш та үҙгәрә. Шулай ҙа, һәр ишкә лә бер үк ваҡытта яратыу ҙа, яратылыу ҙа бәхете тәтемәй. Береһе ысын һөйөү хисе менән яратҡанда, икенсеһенең йә оҡшатып, йә ғашиҡ булып, йә өйрәнеп кенә йөрөүе мөмкин. Әммә ғашиҡ булған, йәки ғәҙәтләнгән кешенең дә, яратам, тип уйлауы ихтимал. Ошо урында бик күптәрҙә ҡыҙыҡһындырған һорау тыуа: "Ғаилә тормошонда яратып йәшәү мөһимме, әллә яратылыумы?" Бәлки, һөйөүҙең әһәмиәте ирҙәрҙә бер төрлө, ҡатын-ҡыҙҙа икенсе төрлө булыуында ла хикмәт барҙыр? Ошондай һорауҙар менән бер нисә кешегә мөрәжәғәт иттек һәм төрлө быуындың фекерен һеҙҙең иғтибарға тәҡдим итәбеҙ.**

## ЯРАТЫП ТА, ЯРАТЫЛМАЙ ЙӘШӘҮ...

### яңғыҙ йәшәүҙән ауырыраҡ

**Сәлих Азаматов:** Үҙең яратып та, һөйгәнең һиңә битараф булһа, наҙы менән йылытып, тормошоңа ҡеүәт биреп тормаһа, һинең генә үлә яҙып яратыуыңдан ниндәй фәтеүә? Һине яратмаған йәрҙең һалҡынлығы, нисек кенә ҡыландырмаһын, барыбер тойола инде ул. Ә яратҡан булып ҡыланыу, алдау тағы ла нығыраҡ күңелде ҡыра. Үҙең яратып та, ҡатыныңдың яратыуын тоймау күңел төшөнкөлөгөнә, өмөтһеҙлеккә килтерә. Шуның өсөн үҙ-үҙеңә ҡул һалырға ла күп һорап тормай көслө тиғеп заттар. Әгәр ҙә ғаиләңдә һөйөү йылыһы юҡ икән, аҡса табам, донъя көтәм тип тырышыуҙан ни файҙа? Балалар атаһын яратһын, хөрмәт итһен өсөн ҡатыныңдың ирен яратыуы бик мөһим.

**Рәшиҙә Батырова:** Яратҡан ҡатын көсһөҙ, яратылғаны көслө. Ҡатын-ҡыҙға яратылып йәшәү кәрәк. Беҙ бит иғтибар, хәстәрлек күрһәткәнде яратабыҙ. Яратылмай йәшәү мөмкин түгел беҙгә. Кемдәндер яратҡанын тойһаҡ, үҙебеҙҙе донъяның беренсе бәхетлеһе итеп тоябыҙ. Яратып та, яратылмаған осраҡта ла артыҡ бер ни ҙә ҡыла алмайбыҙ. Һөйгән егетеңә яратыуыңды белдереү, үҙеңдеке итергә тырышыу - көлкө генә. Ундай ҡатын-ҡыҙға бөтөнләй башҡа ниәт, уй менән, кәмһетеп ҡарауҙары ихтимал. Ә ир-егеткә был йәһәттән енелерәк: оҡшатҡан ҡыҙы артынан маҡсатына өлгәшкәнсе "йүгерә" ала, иғтибар, хәстәрлек күрһәтеп, күңелен яулауы ла ихтимал. Әммә бөтөнләй бер ниндәй ҙә тойғоһоҙ йәшәү - шулай уҡ ҡурҡыныс. Исмаһам, ихтирам, оҡшатыу булырға тейеш.

**Әнисә Йәмилева:** Кейәүгә сыҡҡанға тиклем үк буласаҡ иремдең мине яратыуын теләй инем. Минең үҙемә әллә ниндәй ҡайнар тойғолар, хыялый хистәр кәрәкмәй. Улар, киреһенсә, башты әйләндереп, мөнәсәбәттәрҙе ҡырҡыулаштыра ғына. Сөнки ныҡ итеп яратҡан кешеңдең ҡырын һүҙ әйтеүен дә, ҡайһы саҡ иғтибарһыҙыраҡ булып китеүен дә күтәреүе ауыр. Яратҡан кешебеҙҙе беҙ, ғәҙәттә, идеаллаштырабыҙ, шуға ла күпте талап итәбеҙ, тупаҫыраҡ ҡыланыштарын кисерә алмайбыҙ. Иремде ихтирам итеү, уның мине һәм балаларҙы яратыуы, арабыҙҙа аңлашыу булыуы - шул еткән. Сикһеҙ яратыу тойғоларымды балаларыма бағышлайым. Ир ҡатынын яратһа, ситкә лә йөрөмәй, өй эштәрендә лә ярҙам итә. Сөнки ул яратҡан кешеһенең янында булыуынан ғына ла әллә күпме кинәнес ала.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**"Яңғыҙлыҡтан да бит ауырыраҡ икән яратылмай йәшәп, яратыу" тип йырлана йырҙа. Ә яратып та яратылмау ғазаптарын нимә менән сағыштырырға булыр ине икән? Һәр кемдең дә яратып та, яратылып та йәшәгеһе килә. Әммә әҙәм балаларына Хоҙай тарафынан өләшелгән һөйөү хисе, маңлайға яҙылған яҙмыш кеүек, төрлөсә. Шуныһы ҡыҙыҡ: яратып та яратылмағандар яратылыу хаҡында хыял итә, яратылып түйгәндар яратыу көҫәй. Ә яратып та, яратылып та йәшәгән бәғзе берәүгә нимә лә булһа етмәй торамы икән? Яратыу мөһимме, яратылыумы? Быуаттар дауамында кешелекте дер һелкеткән, тетрәндергән мәңгелек был һорау бөгөн дә һауала аҫылынып ҡала икән, уның бөтөн ҡыҙығы, бөтөн хикмәте тап ана шул асылмаҫ сер булыуындалыр, моғайын. Ә һеҙ нисек уйлайһығыҙ?**

Ләйсән СӘЛИХОВА әҙерләне.

ПСИХОЛОГ ЫҢҒАЙҒА КӨЙЛӘЙ

## ҠӘЙНӘҢ - ҺИНЕ,

### һин ҡәйнәңде хөрмәтлә



**Башҡорт халҡында борондан уҡ формалашҡан ғаилә ҡиммәттәре лә бөгөнгө заман елдәре тәьҫирендә үҙгәрештәргә дусар була. Ир баш булған ғаиләлә ҡатынға уңғанлыҡ, бөтмөрлөк, донъя көтә белеү кеүек сифаттар менән бер рәттән, баҫалҡылыҡ, ирендең туғандарына ихтирам менән ҡарау ҙа яҙылмаған ҡанун иҫәпләнгән. Бөгөн иһә күп кенә йәш ғаиләләрҙең ата-әсәһе, ҡайны-ҡәйнәһе менән дөрөҫ мөнәсәбәт ҡора алмауына ла шаһит булырға тура килә. Ошондай хәлгә ҡалған йәш кейәү һәм килендәргә нимә эшләргә? Әгәр ҙә үҙ ата-әсәйең ғаилә эсенә урынһыҙ тығыла икән, нисек сиктәрҙе билдәләргә? Ғөмүмән, бында кем ғәйепле? Психолог Гүзәл ТӨХВӘТУЛЛИНА менән ошо теманы асырға тырышасаҡбыҙ.**

- Бында иң ҡыҙығы шунда: замана менән бергә балалар ғына түгел, атай-әсәйҙәр ҙә үҙгәрә. Мәҫәлән, бөгөнгө өләсәйҙәрҙе беҙҙең боронғо өләсәйҙәр менән тиң ҡуйып булмай. Бөгөнгө өләсәй ул әүҙем, хаҡлы ялда ла эшләп йөрөй, хәҙер кеше элекке һымаҡ тиҙ ҡартаймай ҙа. Шуға ла ул ҡайһы саҡта ейәндәр ҡарап ултырғыһы ла килмәй. Шуға ла бында кемделер ғәйепләү урынһыҙ ҙа.

Башҡорттарҙа кейәү кешегә мөнәсәбәт башҡа ул, ҡәйнәләр, ғәҙәттә, кейәүҙәрен ярата, уларға һүҙ әйтмәй, быны ул ҡыҙына зыян килтермәйем, тигән уйҙан сығып та эшләй. Ҡәйнәләрҙең ҡәнәғәтһеҙлеге күберәк килендәргә төшә. Ҡыҙҙың әсәһе боҫоп ятыр, улдың әсәһе губернатор инде, халыҡ белеп әйткән быны. Тәжрибә күрһәтеүенсә, ҡайһы әсәйҙәр улының яңы ғаиләһенә килеп, уларҙың тормошона ҡыҫылып йөрөүҙе лә урынлы һанай. Бигерәк тә йортто, фатирҙы һатып алыуҙа уларҙың өлөшө ҙур булһа, быңдай хәлдәр йыш осрай. Улын килененән "яҡларға" тырышыусылар ҙа була, хатта улы өсөн "лайыҡлыраҡ" ҡыҙ кәрәклеген бар ҡиәфәте менән күрһәтеүселәр ҙә була.

Нимә эшләргә һуң? Ғаиләләге атай-әсәй һәм уларҙың инде өлкәнәйеп бөткән балаларын ҙур ағас һәм уның орлоғонан үҫеп сыҡҡан йәш үҫенте менән сағыштырырға була. Үҫенте бәләкәй саҡта әсәй-ағас уны ел-дауылдарҙан һаҡлай, уның янында уға тыныс. Әммә үҫенте ҙурайған һайын, өлкән ағас ышығында уға яҡтылыҡ етмәйәсәк, шуға ла уға буйға әсәй-ағастан да бейегерәк булып үҫергә тура киләсәк. Тәбиғәттә барыһы ла ябай, унда көслө көсһөҙҙө еңә. Әммә Хоҙай Тәғәлә беҙгә аҡыл һәм аң биргән. Күңелегеҙгә яҡын алмай, ҡәйнәгеҙҙең һеҙгә ҡарата мөнәсәбәтенә иғтибар итмәҫкә тырыша алаһығыҙ. Шул уҡ ваҡытта, ултырып һөйләшергә лә мөмкин бит. Минең тәжрибәмдә ошондай әңгәмәләрҙән һуң хәлдәрҙең ыңғай яҡҡа үҙгәреп киткәне бар, йә йәш ғаилә быға сик ҡуйырға көс таба, йә атай менән әсәй үҙҙәре дөрөҫ түгеллеген аңлай.

Түбәндә йәш ғаиләләр өсөн бер нисә кәңәш. Бер ҡасан да үҙегеҙҙең туғандарығыҙға ғаиләгеҙҙә булған нәмәне, ирегеҙҙе, ҡатынығыҙҙы яманлап һөйләмәгеҙ. Һөйләйһегеҙ икән, яҡшыһын да һөйләгеҙ. Кире, негатив яңылыҡтар йыйылып-йыйылып, аҙаҡтан үҙегеҙгә ҡаршы эшләй башлаясаҡ. Әсәйегеҙҙе, атайығыҙҙы ғаилә проблемаларына ҡатнаштырып, психологик негатив "ҡайтауаз" аласаҡһығыҙ, һеҙҙең насар кеше менән йәшәүегеҙгә ышанып (үҙегеҙҙең һөйләүегеҙ буйынса!), улар үҙҙәре һеҙҙе уға ҡаршы ҡоторта башлаясаҡ. Негатив мәғлүмәт бары негатив реакция ғына тыуҙыра ала. Әйткәндәй, туғандарығыҙ ғына түгел, икенсе яртығыҙ ҙа туғандарығыҙҙы яратмаясаҡ, үҙе тураһында ыңғай фекерҙә булмағандарҙы ул яратырға тейеш тә түгел. Ә был бәләнең артында бары тик һеҙҙең телегеҙҙе тыя белмәүегеҙ ята. Әхирәттәр менән ураҡлашыу ҙа дөрөҫ түгел.

Ике яҡтың туғандарын да тиң күрегеҙ. Бер ялдарҙа әсәйеңдәргә барҙығыҙ икән, икенсеһендә - ҡәйнәләргә. Турһайып барып инмәгеҙ, йылмайығыҙ, ҡосаҡлағыҙ, йылы һүҙҙәрегеҙҙе йәлләмәгеҙ. Бүләктәр алығыҙ, бәлеш бешереп алып барығыҙ. Яҡшы мөнәсәбәттәр икеләтә-өсләтә артып үҙегеҙгә ҡайтасаҡ.

Һеҙҙе һайлап, улының яңылышмауын иҫбатларға ла тура киләсәк. Бала тәрбиәләгәндә ата-әсәләрҙең 99 проценты формаль әйтберҙәргә генә күҙ уңында тота: бала асыҡмағанмы, башҡаларҙан ҡайтыш кейенмәгәнме, кесәһендә аҡсаһы бармы, бысраҡта йөрөмәйме, уны йәберләмәйҙәрме? Балаға 3 йәштә лә шулай, 23-тә лә, 33-тә лә, 53-тә лә. Шуға ла ҡәйнәң килгәндә өйөң ялтырап торһон, тәмле итеп бешергән ризыҡ булһын, һыуыткысыңда итең бөтөп китмәһен, балаларҙың сәсе үрелгән, үҙҙәре өләсәй-олатай өсөн әҙәләп торһон. Һәм тағы ла. Бер нәмәлә лә, бер ҡасан да ҡәйнәгеҙҙең бәлеше тәмлерәк, ҡорғандары матурыраҡ һ.б икәнен телегеҙ менән әйтеп торогоҙ. Ҡыйын түгел дә инде. Ҡустәнәстәрен дә алығыҙ. Бер биҙрә ҡыярҙы нимә эшләтергә белмәһәгеҙ ҙә, алығыҙ. Бер кем ашамаған консерваланған салаттарын да. Бала тәрбиәләү мәсьәләһендә лә кәңәшләшегеҙ. Балаларҙы улар менән аралашыуҙан тыймағыҙ, был иң түбән ҡылыҡ. Киләсәктә матур йәшәү өсөн ҡайһы саҡта түҙеп торорға ла була. Аҡыллыраҡ булығыҙ, йәштәр, шул саҡта аҡылға ҡушылып тормош тәжрибәһе лә киләсәк.

Ләйсән ВӘЛИЕВА яҙып алды.

✓ *Һәр эштә лә сабырлыҡ кәрәк. Шул уҡ эшкә өйрәткәндә лә сабыр булыу мөһим. Уларҙың эш эшләгәндә яңылышыуын күреп, ҡыҙмаҫҡа, килеп сыҡмаһа, тауыш күтәрмәҫкә, иплап кенә төҙәтеү фарыз.*



**"Ғаилә ҡоро"ноң бөгөнгө ҡунаҡтары Иглин районы Һарт-Лабау ауылында йәшәүсе Әлфиә менән Илдар НУРИЕВтар. Уларҙың матур ғаиләһендә алты бала тәрбиәләнә. Илдар ауылдың Шәйхулла мәсете имам-хатибы, Әлфиә - уҡытыусы. Нуриевтар ғаиләһе "Өлгөлө башҡорт ғаиләһе" асыҡ республика конкурсының төбәк этабында "Ғаилә йолалары һәм ҡиммәттәре" номинацияһы еңеүселәре лә. Әңгәмәбеҙ ғаилә ҡиммәттәре, тәрбиә, йолалар тураһында.**

# ҺӘР ЭШТӘ ЛӘ САБЫРЛЫҠ КӘРӘК...

**Ваҡыты етә килә һәр кем үҙенең булаҫаҡ ғаиләһенең моделен күҙ алдына баҫтыра. Ә һеҙҙең ошо күҙаллауығыҙ тормошҡа аштымы?**

**Илдар:** Мин ғаиләлә бер бала ғына инем, шуға күрә һәр саҡ ҡорасаҡ ғаиләмдең ҙур, ишле, балалар тауышынан гөрләп торған йортло итеп күҙ алдына баҫтыра инем. Бәләкәйҙән етем ҡалып, бабайым Ғәбделшәкүр ғаиләһендә тәрбиәләндем. Ул хәҙрәт ине һәм бәләкәйҙән уның: "Яҡшы ғаилә ҡороп, матур итеп донъя көтөргә яҙһын, аҡыллы, уңған ҡатын тура килһен, балалар бәхете бирһен", - тигән теләктәрен ишетеп үҫтем.

**Әлфиә:** Һәр ҡыҙ бала буласаҡ иренең яҡшы күңелле, эшсән, матур холоҡло булыуын теләй. Беҙ ғаиләлә ике бала үҫтек һәм мин ҙур ғаилә тураһында ул ҡәҙәре уйланманым да. Ләкин Илдар менән ғаилә ҡороп йәшәй башлағас, уның ышаныслы икәнлеген аңланым, уның донъя тотҡаһы, ныҡлы терәк булырҙай кеше икәнен күрҙем. Әле бына алты балаға ғүмер биреп, матур итеп йәшәп ятабыҙ.

**Баланы табыу ғына түгел, уны бағыу, тәрбиәләү ҙә ҙур, яуаплы эш...**

**Илдар:** Биш малай һәм бер ҡыҙ үҫеп килә ғаиләбеҙҙә. Балалар үҙ-ара дуҫ, олоно оло, кесене кесе итә беләләр. Киске намаҙҙан һуң мотлаҡ балалар менән төрлө темаларға - сәйәсәт, һаулыҡ, дини һәм башҡалар тураһында әңгәмәләр үткәрәм. Иң күбе 5 минут тирәһе ваҡыт түгәм быңдай әңгәмәләргә, ләкин ошо аҙ генә ваҡыт та миңә, атай булараҡ, тәрбиә эшен алып барыуҙа ҙур роль уйнай.

**Әлфиә:** Балаларҙың характерҙары, холоҡ-фиғелдәре, ҡыҙыҡһыныуҙары, үҙҙәрен тотоштары, темпераменттары бер-береһенән айырылып тора. Илдар менән һәр ваҡыт уларҙың бер туған булыуҙарын, береһе өсөн икенсеһе ҡая һымаҡ торорға тейешлектәрен аңлатырға тырышабыҙ, берҙәм, татыу булып үҫеүҙәренә ҙур иғтибар бүләбеҙ. Араларында аңлашылмаусылыҡтар килеп тыуһа ла, һүҙгә килешеп китһәләр ҙә, бер-береһенә ихтирамлы булып үҫеп киләләр, туғанлыҡ хисе көслө, тормошта ниндәйҙер хәл килеп тыуһа, улар бер-береһенә ныҡлы терәк булаҫаҡтар.

**Дини тәрбиәгә айырым урын бүленәләр ғаиләгеҙҙә...**

**Илдар:** Хәҙрәт бабайым ғаиләһендә, дини мөхиттә үҫһәм дә, бер кем дә мине бер ҡасан да дингә килергә көсләмәне, бар нәмә бабайымдың өлгөһө менән бирелде миңә. Хәҙер үҙемдең ғаиләлә лә шулай: балаларҙы мәжбүри дингә алып килеү, тигән ҡағиҙә юҡ өйөбөҙҙә. Малайҙар бәләкәйҙән минең намаҙ уҡығанды, дини ғәмәлдәрҙе башҡарғанды күреп үҫә һәм үҙҙәре лә ошоға тартыла. Ҙур малайҙар минән күреп үҫһә, бәләкәстәре ағалары миҫалында тәһәрәт алыу, бит-ҡулдарын йыуыу тигән ғәмәлдәрҙе үтәп, беҙҙең менән бергә намаҙға ултыра.

**Баланы эш тәртибенә өйрәтеү ҙә атай-әсәйҙең изге бурысы...**

**Илдар:** Йортобоҙҙа һәр кемдең үҙ эше, үҙ вазифаһы бар. Өйҙәге, ҡуралағы бөтә эш малайҙарҙың үҙҙәре төҙөгән график буйынса эшләнә. Аҙанды ла һәр береһе алмашлап уҡый. Бөтә эш тә бүленеп башҡарылғас, барыһын да тиҙ генә эшләп ҡуялар. Мин дә, Әлфиә лә уларҙы ҡарауыллап, "шуны эшлә, быны эшлә", тип ултырмайбыҙ, барыһын да үҙҙәре белеп башҡара.



**Әлфиә:** Малайҙарҙың олоһона 17 йәш, ҡалғандары ла уны ҡыуа килә, инде ҡул араһына инеп, беҙҙең ҙур ярҙамсыларға әйләнделәр. Ҡатын-ҡыҙ эше, тип тә баш бороп тормайҙар, миңә ярҙам итәләр. Кәрәк икән, ҡамырын баҫып, билмән дә эшләйҙәр, башҡа аш-һыуҙы ла етештерәләр.

Ғаилә ҡорғас та уҡ, балаларҙың үҙаллы булып үҫеүҙәренә баҫым яһарға кәрәк, тип килештек Илдар менән. Шуға күрә һәр эштең рәтен-йыйын белеп, уның айышына төшөнөп башҡарһындар, тип өйрәтергә тырышабыҙ. Яндарында беҙ булмаған саҡта ла, ниндәйҙер хәл килеп тыуһа, йәки берәй эш башҡарырға кәрәк булғанда, аптырап ҡалмаһындар, тотоп эшләй башларлыҡ һәләттә булһындар, тип тәрбиәләйбеҙ.

**Илдар:** Һәр эштә лә сабырлыҡ кәрәк. Шул уҡ эшкә өйрәткәндә лә сабыр булыу мөһим. Уларҙың эш эшләгәндә яңылышыуын күреп, ҡыҙмаҫҡа, килеп сыҡмаһа, тауыш күтәрмәҫкә, иплап кенә төҙәтергә, эштең айышына яңынан өйрәтеү фарыз. Берәү ҙә белеп тыумай, барыһы ла яйлап, яңылыша-яңылыша өйрәнә, иң мөһиме, баланың эшкә булған ҡыҙыҡһыныуын юғалтыуға юл ҡуймаҫҡа, уның күңелен һүрелдермәҫкә кәрәк.

**Әлфиә:** Тиҙ-тиҙ генә үҙең эшләп бөтөү яйлы, әлбиттә, ләкин ошо эш араһында буталаныйп йөрөп кенә бала эштең рәтен белеп үҫәсәк. Шуға күрә бөтөн эштә лә балаларҙы бәләкәйҙән ҡатнаштырабыҙ: баҡса, бесән эштәре, еләк-бәшмәк йыйыу, миндек бәйләү һәм башҡалар. Бер-икене күрһәтеп бирһәң, артабан улар үҙҙәре лә бик матур итеп башҡара.

**Илдар:** Беҙҙең өйҙә һәр бер малайҙың үҙенең йәшенә тура килеп торған, уңайлы эш ҡоралдары - балта, бысҡы, сүкеш, кәрәк, салғы һәм башҡалары бар. Минең янда булышып йөрөп, эшкә өйрәнеп китәләр. Әлеге көндә, мәҫәлән, мунсаға утын әҙерләгәндә минең хатта ҡулым да теймәй ҡала, барыһын да малайҙар үҙҙәре эшләй. "Дружба" электр бысҡыһын да ышанып тапшырҙым уларға. Башта ҡыйынараҡ тотоналар ине, хәҙер оҫтарҙылар. Бысҡыны тотона ғына башлағандарында күпме сылбыр алыштырҙым мин, ҡаҙаҡҡа йә берәй тимергә тейҙергәндәрендә бысҡыны йылан ҡуя инем, ләкин бер нәмә лә әйтмәнем, сөнки минең ҡул аҫтында өйрәнмәһәләр, кем өйрәтә уларға. Һәр атай кеше малайына эш рәтен танытып, өйрәтергә тейеш тип уйлайым. Башта әллә ни килеп сыҡмаһа ла, күңелдәрен ҡалдырырлыҡ һүҙ әйтмәйем, яйлап ҡына аңлатып бирәм барыһын да.

Бәләкәй генә сағында балаға уйынсыҡ балта тотторам. Ул минән, ағаларынан күреп, уны нисек тоторға, үткерләргә, ҡулды нисек күтәрергә, утындың ҡайһы еренә сабырға кәрәклеген күреп өйрәнә. Бер аҙ үҫкәс, ысын балта тотторам да, бәләкәйерәк утын киҫәктәрен ярырға өйрәнә.

Ғөмүмән, балаларҙы тормошҡа төрлө яҡлап әҙерләйем. Атай-әсәйҙең оло бурысы был. Мәҫәлән, ҡорбан салыу, уны тунау, эшкәртеү кеүек эштәрҙе лә белгән кеше һирәк хәҙер, тотош ауыл менән бер-ике кешегә ҡарап тороп ҡалған ерҙәр бар. Минең үҙемдә бабайым өйрәтте был эшкә. Талап та итмәне, ныҡышманы ла, башта "Улым, ҡарап тор нисек эшләргә икәнлеген", тиер ине. Мин уның янында булышып ҡына йөрөнөм, ә бер ваҡыт ул: "Улым, мин намаҙ уҡып сығайым, һин эшкәртә тор", - тине лә инде лә китте. Минең бабайҙан шелтә алғы килмәй, бөтә өйрәнгәндәремде иҫемә төшөрөп, теүәл генә эшләп ҡуйҙым, бабай маҡтаны. Уның тәрбиә нескәлеген нисек аңлап эш иткәненә һоҡланам. Әгәр ҙә минең эшләгәнде ҡарап торһа, мин ҡаушар инем, белгәнемде лә онотор инем, ә бер үҙемдә ҡалдырып киткәс, яйлап эшләп бөттөм. Хәҙер үҙем дә шулай итәм. Малайҙарға "Эшләй тороғоҙ", тием дә ситкә китәм. Эш барышының ниндәй булыуы мөһим түгел, уның һөҙөмтәһе мөһим.

**Бер-берегеҙҙә булған ниндәй сифаттар оҡшай һеҙгә?**

**Әлфиә:** Илдар бик дәртле кеше, башлаған эшен урын еренә еткереп тамамлай. Йәмәғәт эштәрендә бик әүҙем ул - спортта ла, мәҙәниәт өлкәһендә лә урала йөрөй.

Ул тыныс холҡло, шул уҡ ваҡытта юморға бай. Һәр нәмәне төплө уйлап, аҡыл менән эш итә. Бөтә үҙгәрештәрҙе лә тик яҡшыға юрай белеүе менән дә күңелемә яҡын. Уның ошо холҡо мине лә тынысланырға, ниндәйҙер кире күренеште лә ыңғай үткәреп ебәрергә булышлыҡ итә. Йәш саҡтағы дауамаллығы, тиҙ ҡыҙып барыусанлығы яйлап бөтә бара. Сабыр булыуы беҙҙең ғаилә өсөн ҙур терәк.

Ярҙамсыл, асыҡ күңелле, һәр кем менән уртаҡ тел табып, һөйләшергә темаларын табып ҡына тора, әңгәмәсеһе менән матур мөғәмәләлә була белә. Яҡты, асыҡ кеше Илдар.

**Илдар:** Ҡатын-ҡыҙҙы биҙәгән оло сифат - ул тыныслыҡ. Әлфиәләге ошо сифат бик күңелемә яҡын. Ниндәй хәлдә лә ул үҙен ҡулда тота белә, артыҡ, кәрәккән-кәрәкмәгән һүҙ һөйләүҙән азат, аҡыллы. Ир һүҙен һүҙ итә белә, ғаиләбеҙҙең йылы усағын һаҡлаусы. Балалар өсөн яҡшы әсәй, тәрбиә өлкәһендә лә бик аҡыллы эш итә. Әлфиәнең бешергән аш-һыуы бик тәмле.

**Ялдарығыҙ нисек үтә? Ғаиләгеҙгә генә хас ниндәй ғәҙәттәрегеҙ бар?**

**Әлфиә:** Беҙҙең ял - күмәкләшеп тәбиғәттә булыу, бергәләп бесән эшләү, еләк-емеш йыйыу, миндек бәйләү. Шулай уҡ балаларҙың тыуған көнөндә, каникулдар ваҡытында Илдар уларҙы Өфөгә алып бара. Кино ҡарап, тәм-том ашап, паркта йөрөп, музейҙарға барып, бәләкәйерәктәре уйын булмәләрендә уйнап, күңелдәре булып ҡайта.

**Илдар:** Ҡышын да, йәйен дә спорт менән шөғөлләнеүгә ҙур иғтибар бирәбеҙ. Ҡышын ауылдағы күл туңғас, балалар хоккей уйнай, йәйгеһен туп тибә. Лабау йылғаһы буйында ял итергә яратабыҙ, унда балыҡ тотоп ҡурабыҙ, көтөү көтөргә лә малайҙар менән бергә йөрөйбөҙ. Ошондай ваҡытта ла малайҙар менән тәрбиә эшен алып ба-

рам - төрлө темаларға аралашабыҙ, ниндәйҙер шөғөлдәргә өйрәтәм.

**Әлфиә:** Балалар менән һәр ваҡыт әңгәмәләшәбеҙ. Мәктәптән ҡайтҡас, дәрестәре нисек үтеүен, ниндәй хәлдәр булыуын, көндәлек пландары тураһында гелән ҡыҙыҡһынып, һорап ҡына торабыҙ. Һәр ата-әсә балалары менән һөйләшергә, уның тормошо менән ҡыҙыҡһынырға, уның кәйефе, эштәре тураһында белеп торорға тейеш, тип уйлайым. Әгәр ҙә баланды тыңларға ваҡыт бүлә алмаһаң, һуңынан уның тормошонда атай-әсәйгә бөтөнләй урын булмауы бар.

**Илдар:** Ғаиләбеҙҙең тағы бер матур йолаһы - һәр бер баланың үҙенең фотоһүрәттәр альбомын тултырып барабыҙ. Балалар табыу йортонан сыҡҡанда төшкән фотонан башлана һәм артабан тулыландырыла. Был бала өсөн дә, ата-әсәгә лә бик матур иҫтәлек. Ваҡыты-ваҡыты менән бергә ултырып ҡарап алабыҙ, фотоларға бәйле төрлө ваҡиғаларҙы иҫләйбеҙ. Был дә ғаиләне яҡынайта, бер бөтөн итә.

**Әлфиә:** Тыуған көндәргә, байрамдарға бер-беребеҙгә матур бүләктәр әҙерләү ҙә ғаиләбеҙҙең матур бер йолаһы. Балалар һәр береһе айырым йәки бергәләшеп аталарына, миңә, бәләкәй һеңле-ҡустыларына бүләктәр ала. Бүләк өсөн аҡсаны үҙҙәре эшләп таба, эшләйем тигән кешегә ауылда эш күп.

**Илдар:** Дин, спорт һәм мәҙәниәт - беҙҙең ғаиләнең девизы. Дин беҙгә рух тәрбиәһе бирә, күңелде тәрбиәләй, иман байлығы бирә. Спорт - ул хәрәкәт, хәрәкәттә - бәрәкәт, тән таҙалығы, һаулыҡ өсөн файҙалы. Мәҙәниәт күңел өсөн, берәй мәҙәни саранан һуң күңелләнеп, илһам алып ҡайтаһың.

**"Башҡорт ғаиләһе" конкурсында ҡатнашыу һеҙҙең өсөн шәхсән һәм башҡа ғаиләләр өсөн нимәһе менән яҡшы, тип уйлайһығыҙ?**

**Илдар:** 2021 йылда конкурста үҙ көсөбөҙҙө һынап ҡараған инек, ул ваҡытта төбәк этапта 3-сө урын яуланыҡ. Быйыл конкурсҡа төплө әҙерлек менән сыҡтыҡ, балалар ҙа хәҙер аңлы рәүештә үҙҙәренән талап ителгәндең барыһын да теүәл генә башҡара, үҙҙәрен сәхнәлә лә иркен тота.

**Әлфиә:** Илдар матур итеп гармунда, ҡурайҙа уйнай. Уның музыкаль һәләте балаларға ла күскән, шулай уҡ йыр-моңдо яраталар, аяҡтарына баҫҡас та, көй ишетһәләр, бейеп торалар. Әлеге конкурста бик теләп ҡатнашабыҙ. Республика кимәленә сығыуыбыҙға бик шатбыҙ. Бындай конкурстар ғаиләләргә төрлө өлкәлә үҙ көсөн һынап ҡарарға булышлыҡ итә, башҡа ғаиләләр менән танышырға мөмкинлек бирә. Балалар өсөн дә яҡшы тәжрибә, тип уйлайым, сөнки улар күмәк кеше араһына сыға, тиҫтерҙәрен күрә, үҙҙәренең мөмкинлектәрен барлай.

**Илдар:** Конкурс ғаилә ҡиммәтен арттырырға, ғаиләләге атай һәм әсәй ролен үҫтерергә булышлыҡ итә, милли традицияларҙың бәсен күтәрә.

**Гөлназ САФУАНОВА**
**әңгәмәләште.**

ИР-ЕГЕТ ҠОЛАҒЫНА

# ӘСӘҺЕНӘ ҠАРАП...

## ҡыҙы тураһында фекер төйнә



**Бөгөнгө заманда күптәр өсөн ныҡ, тулы, ышаныслы ғаилә ҡороу ауыр мәсьәләгә әйләнә бар. Социаль иҫәпләүҙәр буйынса, айырылышыуҙарҙың 75 проценты һуңғы йылдарға тура килә. Был тенденция демографик хәүеф кенә тыуҙырмай, ә киләсәктә беҙҙең этносҡа юғалыу ҡурҡынысы менән дә янай. Шуға күрә әлеге хәлде тиҙ арала үҙгәртергә кәрәк. Ләкин быларҙың барыһы ла эҙемтәләр генә, һәм беҙгә килеп тыуған хәлдең сығанағына мөрәжәғәт итергә кәрәк.**

Беҙҙең йәмғиәттә ҡатын-ҡыҙҙар ауыҙынан ир-егеттәрҙе ҡәмләү, хурлау, улар менән риза булмау һүҙҙәрен йыш ишетергә тура килә. Улар бөтә нәмәгә һәм һәр кемгә бәлә һала, психологик күҙлектән сығып ҡарағанда, үҙҙәрен йәлләтергә тырыша. Шул уҡ ваҡытта айырылышыуҙарҙың 80-85 проценты нәҡ ҡатын-ҡыҙҙар инициативаһы менән башҡарыла. Ошо урында "Ә ҡатын-ҡыҙҙар тарафынан ризаһыҙлыҡ тыуҙырған ир-егеттәрҙе кем тәрбиәләй һуң?" тигән һорау тыуа. Барыбыҙға ла яҡшы мәғлүм - балаларҙы тәрбиәләү менән, күпселек осраҡта, әсәйҙәр шөғөлләнә, балалар баҡсаһында һәм мәктәптә - ҡатын-ҡыҙҙар, юғары уҡыу йортонда тағы ла ҡатын-ҡыҙҙар. Һәм бына -эҙемтәләре.

**Ир-ат һүлпән зат, уға мөнәсәбәттәрҙә тотороҡлоҡ һәм ныҡлы тыл кәрәк. Әгәр ҙә ул тотороҡлоҡҡа ынтылмаһа, бәлки, өйләнеп тә тормаҫ ине. Иң тәүҙә ир-егеттәр һайлаған ҡыҙының матурлығына ҡарай. Һәм ошо сибәрлек менән аңы томаланған, күҙҙәре һуҡырайған йәш кеше янындағы гүзәл заттың "ваҡ" етешһеҙлектәренә иғтибар итмәй, ә ҡатын-ҡыҙҙар ошоноң менән файҙалана.**

Ирҙәр, ғәҙәттә, 50 йәшкә етәрәк айырылышыу тураһында уйлай башлай йәки ныҡлап айырыла. Улар бындай ҡарарға оҙаҡ килә, оҙаҡ түҙеп, ҡатынының етешһеҙлектәренә күнеп йәшәй. Ләкин һәр түҙемлектең дә сиге була. Шулай итеп, ҡатынының ниндәй етешһеҙлектәре ир-егеттәр тарафынан айырылышыуға килтерергә мөмкин? Иң ауыры - ҡатынының тиҫкәрелеге. Иренең бөтә әүҙемлеге, нимәгәлер ынтылышы ҡатынының аңламауына, һуҡыр тиҫкәрелеккә барып төртөлә. Бындай ҡатын-ҡыҙҙар һәр ваҡыт үҙҙәре әйткәнсә эшләнеүен теләй. Улар ирҙәренең генә түгел, ә киләсәктә балаларының да тормошон боҙорға мөмкин. Улын килененән көнләшәсәк, ҡыҙының ире лә, үҙенең тормош иптәше кеүек үк, ҡатыны һүҙенән сыҡмаған әҙәм булыуын теләйәсәк.

Ир-ат логика менән йәшәй. Ул бөтә нәмәне нигеҙләй, һәр эштең дә, тегеләй йәки икенсе төрлө эшләгәндә, ниндәй эҙемтәләргә килтерәсәген миҫалдар менән аңлатырға тырыша, ләкин ҡатыны уны ишетмәй һәм ишетергә теләмәй.

Ғәҙәттә, ундай ирҙәр аҡыллы, юғары белемле, һөйкөмлө булалар. Ләкин үрҙә һүрәтләнгән ҡатын менән тормош юлы үтеү уны иртә ҡартайта. Быларҙың барыһы ла даими көсөргәнешлектән һәм стрестан килеп сыға.

Егеттәрҙең матурлыҡҡа иғтибар итеүен белгән сибәр ҡыҙҙар үҙҙәренә иң перспективалы, амбициялы, интеллигент егеттәрҙе һайлап ала. Ә аҡыллы, яҡшы күңелле, әммә йөҙгә әллә ни матур булмаған ҡыҙҙарға икенсе пландағыраҡ егеттәр менән хушһынырға тура килә. Ләкин улар үҙҙәренең аҡылы, ирҙәренә булған иғтибары, уларҙың һүҙҙәренә ҡолаҡ һалыуы, һәр эште лә кәңәшләшеп эшләүе менән үҙҙәренең ошо "икенсе" сорт ирҙәрен юғары "сортлыға" әйләндерәләр.

Ҡатын-ҡыҙҙың төп бурысы - ырыуҙы дауам итеү һәм ғаиләнең, ырыуҙың, халыҡтың хәүефһеҙлеге һәм кешелектең эволюцион үҫеше өсөн инендә яуаплылыҡ ятҡан ир-егеткә ныҡлы терәк булыу. Ир-атҡа тормошта ныҡ ҡатмарлы маҡсат йөкмәтелгән.

Быйыл "Һау йәмғиәт" форумында Рәсән Фәндәр академияһы ағза-корреспонденты, Рәсәй Һаулыҡ һаҡлау министрлығының штаттан тыш баш белгесе Аполихин, 52 процент ир-егеттәр 65 йәшкә тиклем етә алмай донъя ҡуя, тип белдерҙе. Ирҙәр араһында иң киң таралған сирҙәр - яман шеш һәм йөрәк-ҡан тамырҙары ауырыуҙары. 40 йәштән 65 йәшкә тиклемге ир-егеттәрҙә, беҙҙең тикшереүҙәр ваҡытында бауыр һимеҙлеге күренеше асыҡланды. Артабанғы тикшереүҙәр барышында бының сәбәбе алкоголь эсемлектәр ҡулланыуҙан түгел, ә даими рәүештә стресс кисереүҙә икәнен асыҡланыҡ, тине ул үҙенең сығышында. Ир-егеттәр стресты ҡатын-ҡыҙға ҡарағанда ауырыраҡ кисерә, шуға күрә уларҙы бынан һаҡларға кәрәк.

Ир-ат ҡасан юғары бейеклектәр яулай? Әлбиттә, уның артында ышаныслы терәк, тыл булған саҡта! Әгәр ҙә ул үҙен ышаныслы тотһа, уны һәр ваҡыт ҡабул итеүҙәренә, бер ҡасан да хыянат итмәүҙәренә ышанған хәлдә ул юғары унышҡа өлгәшәсәк.

Психологиянан сығып ҡарағанда, ирҙәр бер маҡсатлы. Әгәр ҙә уның өйөндә ниндәйҙер аңлашылмаусанлыҡтар тыуһа, ул һәр ваҡыт ошо турала, ҡатынының ни өсөн һөйләшмәүе, нимә менән ҡәнәғәт булмауы хаҡында уйлаясаҡ һәм эшенә тейешле иғтибар бүлә алмаясаҡ. Ҡатыны ғаилә тормошондағы бурыстарҙы дөрөҫ бүлә белгән, уны күтәрмәләп торған ирҙәр үҙ-үҙҙәренә ышаныусан булалар һәм юғары бейеклектәр яулайҙар.

Айырылышыу алдында торған ирҙәр үҙҙәренән насар уҡыған, төҫкә-башҡа ла күрекһеҙ генә булған курсташтарының яҡшы һәм аҡыллы ҡатын-ҡыҙҙы кәләш итеп алыуы арҡаһында, уларҙы бар йәһәттән дә уҙҙырыуҙары тураһында белдерәләр. Уларҙың ҡатындары өсөн ирҙәре - донъя үҙәге, тормошта иң мөһим урынды улар өсөн ирҙәре һәм балалары алып тора.

Һәр әсәй улына иң яҡшы ҡатын тура килеүен теләй. Ләкин уларҙың: "Иң мөһиме, яҡшы кеше булһын һәм һинең уны яратыуың", - тиеүҙәре дөрөҫ түгел. Иң мөһиме - ҡатыны ирен ратһын. Ул ваҡытта ире ғаиләһе өсөн ул барыһын да эшләйәсәк. Әгәр ҙә кеше, айырыуса ҡатын-ҡыҙ, ярата икән, ул үҙе лә яҡшы яҡҡа үҙгәрәсәк һәм эргә-тирәһен дә яҡшыға үҙгәртәсәк.

Нимә ул мөхәббәт? Мөхәббәт - яуабына бер нәмә лә көтмәйенсә, бар булмышыңды биреү. Гүзәл зат йортта нәҡ үҙе хужа икәнлеген аңларға тейеш, ире түгел, ә үҙе. Нәҡ ҡатын кеше йортта яҡшы кәйеф тыуҙыра, унайлыҡтар булдыра, йәм һәм ҡот бирә. Ҡатындың кәйефе ниндәй, йорттағы мөхит тә шундай була.

**Ирҙәргә нимәнән ҡурҡырға кәрәк? Ҡатын-ҡыҙҙың һәм ҡатынының тиҫкәрелегенән. Үсексән ҡатындарҙан һаҡ булығыҙ. 2-3 айлап ире менән һөйләшмәгән ҡатындар була. Аҡыллы ҡатын, ире гәйепле саҡта ла, хәлде ыңғайға бороп ебәреү өсөн үҙе тәүге аҙымды эшләй, сөнки, әйтеп үткәнемсә, өйҙәге мөхиттә нәҡ ҡатын булдыра.**

Ирҙәр хис-тойғоларға бирелеп кенә өйләнергә тейеш түгел, ниндәй һайлау эшләгәнен аңлап эш итергә бурыслы, сөнки ул яңылышлыҡ эшләһә, уны төҙәтеү өсөн эҙләнеүҙәрен дауам итәсәк. Был ваҡытта инде ғаиләлә бала тыуа, намыҫлы ир үҙенең ғаиләһен ташламаясаҡ һәм ғүмер буйы түҙеп йәшәйәсәк.

Ирҙәрҙең балалары менән түгел, ә ҡатыны менән айырылышыуын аңларға кәрәк. Һөйөү һәм аңлашыусанлыҡ булмаған ғаиләлә йәшәгән балаларға икеләтә ауыр.

Ирҙәр айырылышыу яҡлы түгел, сөнки айырылышыу һәр ваҡыт насар, улар яҡшы, дөрөҫ тормош иптәше һайлау яҡлы. Кеше өсөн иң мөһиме - тормошта дөрөҫ һөнәр һәм тормош иптәше һайлау.

Барыһы ла ҡатын-ҡыҙҙан тора. Өйҙәге мөхит, ирҙең ғүмер оҙайлығы, уның һаулығы, һөнәри баҫҡыстан нисек күтәрелеүе, ғаиләләге мөнәсәбәттәр, ике яҡлап та туғандар менән мөнәсәбәт - барыһы ла ҡатындан тора. Һәм иң мөһиме, балаларҙың ниндәй булып үҫеүҙәре лә ҡатындан тора. Ғаиләлә тәрбиә менән атай кеше шөғөлләнергә тейеш.

Беҙҙең халыҡта "Кәләш һайлағанда уның әсәһенә ҡара", тигән мәҡәл бар, сөнки донъяуи ҡарашты әсәй кеше һала. Шуға күрә ир-егеттәргә, буласаҡ ҡәйнәгеҙгә ҡарап, ҡыҙы тураһында фекер төйнәгеҙ, тип әйтергә теләйем. Ир-егеттәргә һәм уларҙың әсәләренә аҡыл теләйем, сөнки аҡыллы ир-егет үҙенә ҡатынды дөрөҫ һайлап ала.

Ҡатын-ҡыҙҙар, тормошта аҡыллыраҡ булығыҙ, һеҙ - милләттең киләсәге.

**Шамил БАТЫРШИН,**
**Өфө дәүләт нефть техник университеты уҡытыусыһы,**
**психология магистры.**

✓ *Шул да нығ борсолдора: үҙе өсөн йәшәү, үҙ мәнфәғәтен бала бағыуҙан өҫтөн ҡуйыу башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының да тормош рәүешенә әйләнде. Күбеһе бер бала табыу менән генә сикләнә, байтағы икенсеһен теләмәй.*

УЙЛЫҒА - УЙ



# ИРТӘГӘ ТҮГЕЛ...

## бөгөн йәшәйек әле

**Һеҙҙең өйҙә лә барҙыр ул әллә ҡасан һатып алып та бөгөнгәсә тотонолмай ятҡан әйберҙәр. Кәрәкмәгәндән түгел, ә үҙ ваҡытын еткереп ала алмай сабыр ғына көтөп ятҡан һауыт-һаба, мендәр тыштары, ашъяулыҡ, таҫтамалдар... Әллә күпме матур кәрәк-яраҡ табыла ул шкафтарҙы йыйыштыра башлаһаң. Ҡайһы берҙәрен, хәҙер бындайҙы тотонмайҙар инде, модаһы үткән, тип, ҡайҙа ҡуйырға белмәй, кире урынына һалып ҡуябыҙ.**

Тормошта ҡасандыр килеп тыуаһы "мөһим" осраҡтар өсөн һаҡлаған әйберҙәр ҙә бихисап. Уларҙы тотоноу иһә бер нисә йылдан билдәләнәсәк юбилейға, өй туйына, ҡапыл килеп төшәсәк ҡунаҡтарға, баланың никахына йә туйына һәм башҡа байрамдарға барып бәйләнә. Магазинда осрап алған сәй сервизын ҡайтыу менән өҫтәлгә ҡуйып, ғаиләгеҙ менән ултырып сәй эскәнегеҙ бармы? Бар икән, тимәк, һеҙ дөрөҫ йәшәгән кеше. Бөгөнгө көн менән йәшәгән бәхетле кеше, тип әйтер инем. Ҡасандыр алып ҡуйған затлы әйберҙәрен рәхәтләнеп тотонорға өлгөрмәй ҡалған кешеләр ҙә юҡ түгел бит...

...Танышыма ҡунаҡҡа барғас, шкафтарын йыйыштырырға булып киттек тә, унда күптән алынып та, бөгөнгәсә тотонолмай ятҡан байтаҡ әйбергә юлыҡтыҡ. Совет заманындағы сынаяҡтар, төрлө һауыт-һаба йыйылмалары, ашһыу бүлмәһе өсөн кәрәк-яраҡ, матур-матур сувенирҙар... Араларында магазиндан һатып алғандары ғына түгел, бүләккә бирелгәндәре лә етерлек. Уларҙың һәр ҡайһыһының үҙенең тарихы бар, шуларҙы иҫләп, ҡыҙыҡ хәлдәргә көлөшөп, хатта эшебеҙҙе лә онотоп киткәнбеҙ. "Ошо сынаяҡтарҙы күршем бүләк иткәйне, шкафтан сығарғаным да булманы, тәүҙә ҡунаҡтар килгәндә алырмын, тип һаҡланым, һуңынан уларҙың барлығы онотолоп та киткән инде. Ғүмер буйы үҙемдең өйөмдән кеше өҙөлмәне, уларҙы шул көн дә тотонғандарҙан сәй эсергәнмен инде",- ти апай. Күҙҙең яуын алып торған матур һауыт-һабаһының шкафта тороп "ҡартайыуы" бөгөн уның өсөн үкенесле ине. Сағыу биҙәкле, семәрле әйберҙәрҙең һәр ҡайһыһын ҡулға алып: "Быларҙы хәҙер музейға ғына тапшырырға инде", - тим. Сығарып ташларға ҡул бармай, уларҙы бер ҡумтаға тултырып, соланына сығарып ҡуйҙыҡ. Ул ҡумтаның төпкө бүлмәлә тағы нисә йыл ятыры билгеһеҙ...

Кейем шкафынан да хаҡтары алынмаған байтаҡ күлдәк - костюм табылды. "Бынау күлдәкте туйға кейермен тип алғайным, унда бара алмағайныҡ, шунан нисәмә йылдар буйы эленеп торҙо инде. Байрам өсөн тегелгәнде көндәлеккә кейеп булмай ҙа", - тип, заманында бик ҡупшынан һаналған, тик үҙ сиратын көтөп ала алмағанлыҡтан "боронғо"ға әйләнгән һәр кейем өсөн аҡланыу сәбәбе табылды. "Ни эшләп хаҡы яҙылған ҡағыҙын алып ташлап, үҙеңдең берәй тыуған көнөңдә булһа ла кеймәнең?" - тим, ут яҡтыһында әле бер, әле икенсе төҫкә инеп ялтлаған, байтаҡ ваҡыт үтһә лә, матурлығын юғалтмаған кейемгә ҡарап. "Тыуған көнгә икенсе әйбер алғанмындыр ҙа, быныһы онотолоп ятҡан инде", - тип, апайым әле һаман үҙенә ярап, килешеп торған күлдәген кейеп, көҙгө алдында әйөрөлөп ала.

Өр-яңы кейемдәрҙе мохтаждарға бирер өсөн әҙерләһәк, бер өлөшөн аш-һыу бүлмәһендә сепрәк итеп тотоноу өсөн айырып алдыҡ, ҡайһы берҙәрен һүтеп, хужабикә уларҙан ултырғыс япмалары тегергә ҡарар итте, машина һөртөргә яраҡлылары иренең гаражына сығып китте.

"Күпме әйберҙе тотонмай рәнйетеп ятҡырғанһың, апай", - тим, шкафтарҙы тәртипкә килтереп бөткәс. Шул саҡ үҙемдә лә ҡайһы бер кәрәк-яраҡтың "бәхетле" осраҡ көтөп ятыуы иҫемә төшә. Ә уйлап ҡараһаң, тормоштоң һәр көнө мөһим бит ул. Матур сынаяҡтарыңды теҙеп, яҡындарың менән бергәләп ултырып сәй эсеүҙең дә бәхет икәнен аңлау ғына кәрәк.

Һеҙҙең өйөгөҙҙә лә барҙыр, моғайын, сабыр ғына үҙ сиратын еткерә алмай ятҡан әйберҙәр. Әйҙәгеҙ, өҫтәлгә быға тиклем һаҡлап тотҡан матур ашъяулығыбыҙҙы йәйеп, шкафта күҙҙең яуын алып ултырған сервизды сығарып, яҡындарыбыҙ менән бергәләп матур сынаяҡтарҙан сәй эсәйек. Иртәгәне көтөп түгел, бөгөн йәшәй башлайыҡ әле.

**Лена ХӘЙРУЛЛИНА.**

ӘЙТЕР ҺҮҘЕМ БАР!

**Борон башҡорттарҙа ырыу берҙәмлеге билдәләренең береһе оран булған. Батырҙар, азамат ирҙәр ҡан ҡәрҙәштәрен, йорт-илде яуға, көрәшкә, донъяуи ҙур эшкә саҡырып оран һалған. Урал батыр, Һәүбән, Салауат, Әхмәтзәки... Ил ағаларының ялҡынлы һүҙҙәре, ҡайнар өндәмәләре йөрәктәрҙе ҡуҙғытҡан, халыҡты бер уй, ниәт менән беректереп, изге эшкә ҡуҙғатҡан. Бөгөн дә бөтә башҡорт халҡына оран ташлар хәлдәр, яр ҡысҡырып иғлан итер хәбәрҙәр бар. Уларҙың иң-иң мөһимдәренең береһе - өйләнеү, ғаилә ҡороу, нәҫел-нәсәпте ишәйтеү.**

# ХАЛҠЫБЫҘҘЫ ЙӘШӘТЕР ИМ-ӘМӘЛ



### Ишләнеү, түлләнеү зарурлығы

Халҡыбыҙҙы тергеҙеү һәм үҫтереү өсөн беҙгә ишле лә, берҙәм дә булыу зарур. Ишләнеү, берәүҙән икәү, икәүҙән өсәү булыу әүәл-әүәлдән хуп күрелгән. "Быларҙың беренән-бере батыр улдары, беренән-бере матур ҡыҙҙары тыуып ҡына торған, ти. Балалары, балаларының балалары ишәйеп китеп, бара-бара бер ауыл булған, ти", - тип, әкиәт һөйләр ине бабайым. Әкиәт түгел, тормош хәҡиҡәте булған был. Борон халҡыбыҙ ишле булғанға күрә Урал буйына таралып ултыра алған бит. "Урал батыр" эпосында был хаҡта бик асыҡ һүрәтләнә. Йәнә "Урал батыр"ҙа беҙгә фәһем булырҙай шундай һүҙҙәр бар: "Әжәлдән ҡурҡыр йән булһа, ҡотолорға юл эҙләр; түл йәйергә уйлаһа, илде гиҙеп яй эҙләр". Бөгөн Урал батыр нәҫелдәренә нәҫелде дауам итеү өсөн түл йәйеү, үрсеү бик мөһим. "Башҡорттарым, артайыҡ, күбәйәйек!" - тип алғыш әйтер, оран һалыр саҡ, халҡыбыҙҙың аҙайыуынан ҡотолорға юл эҙләр, бергә ултырып яй эҙләр мәл. Әүәл иһә килен төшөргәндә, бала, ишле нәҫел көҫәп, ошондай теләктәр теләнгән:

*Түлле, түлле, түлле бул,*
*Бүҙәнәләй түлле бул.*
*Иренмәһәң игеҙ тап,*
*Йыбанмаһаң, йыл да тап!*

Йәки:

*Ҡотло аяғың менән,*
*Еңел тояғың менән!*
*Ҡушағалар ҡушылып,*
*Тигеҙ ғүмер итегеҙ,*
*Алты ҡыҙлы булығыҙ,*
*Ете уллы булығыҙ!*

Ҡояш тыумаһа, таң атмаһа, донъяны ҡараңғылыҡ баҫыр; ҡатын-ҡыҙ түлләмәһә, бала тыумаһа, нәҫел ҡорор, халыҡ бөтөр. Тыуым ғына халыҡты йәшәртә, йәшәтә. Шуға ла халыҡ: "Ул тыуғанға көн тыуған. Ул тыуҙы - илгә тыу тыуҙы. Ул - һөйөнөс, ҡыҙ - ҡыуаныс", - тигән. Сөнки ул-ҡыҙ тыуыу ата-инәнең генә түгел, бөтә йорт-илдең ҡыуанысы ла. Бишек кенә - киң донъяға ишек. Бишек йыры, бала тауышы ишетелмәү - халыҡтың, милләттең фажиғәһе һәм әжәле яҡынайыуға ишара. Шуға ла теләк әйткәндә һис тартынмай: "Икәү булып ятығыҙ, өсәү булып тороғоҙ", - тигәндәр...

### Һәр ҡатындың бала бағыуы яҡшы

Тормош ҡануны шундай: кеше тыуымдан ҡалмағас, үлемдән дә ҡалмай; ҡысҡырып, яр һалып донъяға килһә, әхирәткә тауышһыҙ-тынһыҙ ғына китә. Тыуымдан үлеме күбәйгән милләт тә тын ғына ҡараңғы донъяға юллана. Башҡорт халҡы өсөн үткән егерменсе быуат үтә лә хәүефле булды. Төрлө бәлә-ҡаза, үләт, һәләкәт үңәстән алды. 1897 йылдан һуң йөҙ йыл эсендә төрки халыҡтарынан ҡырғыҙҙар, төркмәндәр - 10, әзербайжандар - 6, үзбәктәр - 4, татарҙар - 3 тапҡырға артһа, башҡорттар ни бары 1,1 тапҡырға ғына күбәйгән. Хәл-торошобоҙ һис кенә лә ҡыуандырмай. Һуңғы ҡырҡ-илле йыл эсендә тыуым өс тапҡыр кәмегән.

Йорт-илдә яу юҡта, именлек мәлендә тыуымдан үлем арта. Бынан арыныуҙың, тереклек итеүҙән туҡталмауҙың әмәле фәҡәт үрсеү генә. Мәгәр быны төшөнөргә теләмәйбеҙ. Хәҙер хатта башҡорттар күмәк йәшәгән төйәктәрҙә биш-алты, етеһигеҙ балалы ғаиләләр бик һирәк. Сәскәһеҙ, емешһеҙ ағас кеүек балаһыҙ ғаиләләр тормоштоң ҡотон ебәрә. Инәйҙәребеҙҙең ике баланы бергә иҫәплә, бер баланы юҡҡа иҫәплә, тигән аманаты хәтерҙәрҙән юйылды. Ә бит инәйҙәребеҙ күлдәктәрен йүргәк итеп, арыш икмәге имеҙеп, ете, һигеҙ, туғыҙ бала баҡты, ир бала - йортҡа терәк, ҡыҙ бала - өйгә биҙәк икәнен тәбиғәттән бирелгән булмыштары менән тойоп ғүмер кисерҙе, бер-береһенә, алғы итәгеңде бала баҫһын, арт итәгеңде мал баҫһын, тип теләк теләне. Хәҙер килеп, ҡәрҙәштәребеҙ: "Бала - донъя зиннәте", - тигән ил һүҙен онотто. Ахырызаман еткәндәй, баланан биҙеп, бәғзеләрҙең нәҫеле ҡорой, йәшәү ҡото бөтә.

Әйтерһең, еребеҙҙә йәндәрҙе биҙҙереп, Иблис тигән яуыз зат йөрөй. Ир-егеттәр, ҡатын-ҡыҙҙар ғаилә ҡорорға, тупылдатып бала табырға, һөйөргә ашыҡмай. Утыҙға еткәнсе һәм утыҙҙан ашҡансы буйҙаҡ йөрөгәндәр, яңғыҙҙар, тол ҡалғандар бихисап. Ауылдарҙа кәләш йәрәшә алмай ҡаңғырған, ни эшләргә белмәй аптыраған егет-елән, ҡала-ҡасабаларҙа кейәү таба алмай зарыҡҡан ҡыҙ-ҡырҡын иҫәпһеҙ. Улар бала баҡмай, ир-ҡатын бәхете татымай олоғая, ғүмер заяға үткәнде аңлағанда бәпес күрергә һуң була. Кеше ҡаны уйнап торған саҡта үҙен донъяға мәңгегә килгәндәй хис итә. Мәгәр үткән ғүмер - иҫкән ел кеүек кенә. Ул үкенесле булмаһа икән.

**Егет-ҡыҙҙарыбыҙға йәш, матур саҡта иштәрен табып ҡушылыу фарыз. Милләтебеҙҙең яҡты киләсәге өсөн үҙ милләт кешеһе менән парлашыу айырыуса мөһим. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, хәҙер ҡатнаш никахтар күбәйҙе. Ҡалаларҙа кейәү-кәләш башҡорт милләтенән булған парҙар ғәйәт аҙ. Был халҡыбыҙ яҙмышына - афәт. Тормош тәжрибәһенән күренеүенсә, башҡа милләт кешеһенә кейәүгә сыҡҡан һылыуҙарыбыҙҙың һәм уларҙың ҡыҙҙарын йәрәш-кән ир-егеттәребеҙҙең балалары башҡорт булмай. Шуға ла башҡорт йәштәрен бер-береһе менән таныштырыу, аралаштырыу, димләү, ҡушыу йолаһын киң даирәгә йәйелдереү зарур.**

Шул да нығ борсолдора: үҙе өсөн йәшәү, үҙ мәнфәғәтен бала бағыуҙан өҫтөн ҡуйыу башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының да тормош рәүешенә әйләнде. Күбеһе бер бала табыу менән генә сикләнә, байтағы икенсеһен теләмәй, бик аҙы ғына өсөнсөһөн тыуҙырырға баҙнат итә. Статистика мәғлүмәттәренә ҡарағанда, ғәмәлдә утыҙ йәшкә тиклемге ҡатындар (80 процент самаһы) бала таба. Утыҙҙан уҙғандар заман башҡа - заң башҡаға һылтанып, бәпес хәстәрен ауыр күрә, йөклөләргә сәйерһенеп ҡарай. Йәнәһе, хәҙер ғәҙәт икенсе, күп бала ҡатын-ҡыҙға хуш түгел. Ғаиләһеҙ, балаһыҙ кеше - бәхетле кеше тигән уй-ҡараш иң яман уй, халыҡ өсөн үлемесле сир. Унға бар, уңғансы бар, тиеү беҙҙең башҡорт йолаһы түгел һәм уның әҙемтәләре лә хәсрәтле.

**Сәлимйән БӘҘРЕТДИНОВ,**
**филология фәндәре кандидаты.**
**(Дауамы бар).**

**✓ Ошонан аҙаҡ ҡына мин үҙ хәлемдең мөшкөллөгөн аңлаған һымаҡ булдым. Ауырыйым тип алдап тороп ҡал да әсәйем ҡайтыуға шулай ҡул һындырып ят инде. Ниңә шуға эйәреп китеп барырға миңә? Их, ҡыйын булһа ла, бесәнгә барһам.**






* * *

Тағы ике көн йөрөнөм мин әсәйем менән бесән йыйырға. Икенсе, өсөнсө көндәренә бесән, бакуйҙарҙың башын әйләндермәһәң дә, кипкәйне инде. Мин хәҙер әсәйем артынса ҡалдыҡ-боҫтоҡ бесәнде йыйып йөрөү менән генә сикләнмәйем, ҡыҫҡараҡ бакуйҙарҙы ла тәгәрләтәм. Шулай ҙа өсөнсө көнөнә ныҡ арыным, ауылға саҡ ҡайтып еттем. Өйгә инеү менән, йыуынып та тормаҫтан, башымды мендәргә төрткәйнем, үҙем дә һиҙмәҫтән, йоҡлап киткәнмен. Әсәйем уятҡанда, төн үтеп, яңы көн тыуғайны инде.

- Тор, балам, - ти әсәйем, сәсемдән һыпырып, - анау ҡалған бакуйҙы йыйып бөтөп ҡайтайыҡ.

Тороу түгел, бармаҡты ла ҡыбырҙатҡы килмәй. Сабынлыҡҡа йәйәүләп барырға, көн буйы тирләп-бешеп бесән йыйырға, унан арыған көйө тағы һәлпәңләп ҡайтырға. Унда йыяһы бакуй күп ҡалманы бит, мин бөгөнгә бармаһам да, әсәйем яңғыҙы бөтөрөр әле. Ҡотолоу юлын эҙләп, шулай аҡыл ҡороп яттым да, ауыр ғына ҡуҙғалып, тороп ултырҙым.

- Әсәй... баш ауырта...

- Китсе, - әсәйем йүгерә-атлап эргәмә килеп етте, - әллә кисә ҡояш һуҡтымы икән? Һы... - Башымды тотоп ҡарап, аҙ ғына һүҙһеҙ торғас, өҫтәне: - Ярар, бөгөнгә барма, йә ныҡлап ауырып китерһең. Тик, ҡара уны, урамға сығып йөрөмә, ятып ҡына тор.

Хәшейә апайыма ла үҙе ҡайтҡансы ниҙәр эшләргә кәрәклеген әйткәс, ул яңғыҙы ғына бесәнгә китте. Мин, юрғанымды ҡабат бөркәнеп, тағы йоҡлағанмын. Уянһам, ҡояш әллә ҡайҙа күтәрелгән, тәнемде бая баҫып торған ауырлыҡ та ғәйеп булған.

- Туғаным, ҡабат ятһаң, урыныңды анау ситкә күсереп һалып бирәйем. Был урындыҡты йыйыштырырға кәрәк, - ти апайым, миңә хәстәрлекле ҡарап.- Әллә ашап алаһыңмы?

Һуңлап торғас ни, ашағы ла килә ине. Тышта йыуынып ингәс, яйлап тамаҡ туйҙырҙым. Ләкин, апайым урын һалып ҡуйһа ла, ҡабат ятаһы килмәй ине. Күңел тышҡа, иптәштәр янына, тартыла. Өс көн уларҙы күрелмәгән бит. Уйын да һағындырған. Нисек итеп түҙеп ятмаҡ кәрәк? Өйҙә, унан ихатала ары-бире һуғылып йөрөнөм дә, апайым өйҙә эш менән булышып йөрөгән арала, урамға сығып һыҙҙым. Ғәҙәт буйынса, Ғимран бабайҙарҙың өй артына ыңғайланым. Унда минән бер-ике йәшкә бәләкәй өс-дүрт малай ғына саңға ултырып, тупраҡтан тау яһап, әллә ниндәй таш, кирбес киҫәктәре менән уйнап маташа. Былар менән буталыу ҡыҙыҡ түгел ине миңә. Үҙемдең дуҫ малайҙар ниңә күренмәй әле?

- Ағайың ҡайҙа? - тип һорайым, әлеге уйнап йөрөгән малайҙарҙың береһенән.

- Бесәндә. Бөгөн атайым кәбән ҡоя. Шәфҡәт ағайым күбә тарттырғанда ат башында йөрөй, - тип теҙеп алып китте малай. - Мин дә барайым тигәйнем, арбала урын булманы.

Беҙҙең Ҡыҙылташ йылғаһы аша күпер ғәләмәт ҡыҙыҡ итеп һалынған. Баш-баштары ярҙағы таш бураларға терәлгән буй урҙалар дүрткелләп бысылған арҡыры урҙалар менән арҡыс-торҡос тоташтырылған. Күпергә йәйелгән таҡталар менән ошо арҡыры урҙалар араһында ике метр самаһы ара бар. Беҙ, малайҙар, ана шул аралыҡта урҙанан-урҙаға тейендәй һикереп йөрөүҙе һөнәр иткәнбеҙ. Һөнәр генәме, бер баштан икенсеһенә туҡтауһыҙ барып сыҡҡан малай иң йылғыр, ҡыйыу кеше иҫәпләнә. Минең улай уҡ йөрөргә батырсылыҡ иткәнем юҡ, әммә бер нисә араны һикергәндә һикереп, йә буй урҙаға йәбешеп үткәнем бар. Был күпер аҫтына тартҡан нәмәләрҙең береһе йылғырлыҡты һынау булһа, икенсеһе - балыҡ. Күпер аҫтындағы тәрән генә сыбайға, көн эҫе саҡта унда күләгә булғанғалыр инде, бәрҙеләр йыйылыусан. Беҙ осона мәскәү тағылған оҙон һуйылдарыбыҙҙы тотоп киләбеҙ ҙә, арҡыс-торҡос урҙаларға ашатланып ултырабыҙ һәм сәғәттәр буйына бәрҙе мәскәүләйбеҙ. Әлбиттә, уларҙы эләктереүе еңел түгел. Күпер аҫтына көн һайын әллә нисәмә кеше төшөп йөрөгәнлектән, бәрҙеләр шул тиклем шаянланған, һуйылыңды һыуға төшөрөү менән улар икенсе яҡҡа ялтана. Һин уларға яҡынлау өсөн артабанғыраҡ урҙаға күсәһең, ә балыҡтар, ялт итеп, тәүге урынына барып ята... Шулай ҡыуыша торғас, күҙҙәр тоноп бөтә. Ләкин беҙ уларҙың бер нисеһен тотмайынса күпер аҫтынан сыҡмайбыҙ.

Ҡайҙа барырға, тип торғанымда, аҫҡы урамдың һуҡыр Шәһите килеп сыҡты. Ул минән өс-дүрт йәшкә олораҡ. Ниндәйҙер иҫке снаряд башынан еҙ ҡулсаһын алырға маташҡанында әлеге нәмәкәй шартлап киткән дә бер күҙе әйләнеп сыҡҡан. Һис тә һүҙ күтәрмәй, һәр саҡ һуғышырға әҙер торғанғамы, яратмай инек беҙ уны. Әсәйем дә, үҙенең ҡушҡанын тыңламай ҡаршылашһам: "Шәһит булдыңмы әллә", - тип асыулана.

Шуға күрә әле лә Шәһиттең эргәмә килеүенә иҫем китмәйерәк тора инем, ул үҙе:

- Әйҙә, Кинйәбай, күпер аҫтына балыҡ мәскәүләргә, - тип һүҙ башланы.

Әле Шәһиттең ана шул күпер аҫтына димләүе ине. Бүтән саҡта булһа, берәй сәбәбен табып, уның менән йөрөмәҫ тә инем. Башҡа иптәштәр күренмәгәс, аласыҡ башында ятҡан оҙон һуйылымды ҡайтып алдым да киттек күпер аҫтына. Бөгөн, беҙҙән алда килеп, балыҡтарҙы өркөтөп йөрөүсе булмаған, ахырыһы. Күпер күләгәһендә әллә ни тиклем бәрҙе теҙелеп ята, хатта араларында ҡарыш-аялайҙары ла бар. Шәһит урҙаларҙың дүртенсе рәтенә үк һикереп сыҡты, мин өсөнсөһөндә ҡалдым. Һуйылымды ипләп кенә төшөрөп, мәскәүҙе ҙурыраҡ бәрҙегә яҡынлата башлайым. Мәскәүҙе башына инде кейҙерҙем генә тигәндә, бәрҙе йылҡ итеп борола ла аҫҡараҡ күсеп ята. Икенсе береһе атылып мәскәү үтә сығып, юғарыға - шаршыға уҡ елдерә. Мин урҙа буйлап түбәнгәрәк шыуышам. Һәм өсөнсө бер балыҡты эләктерергә самалайым. Бына, мәскәү балыҡтың муйынында. Тартҡан ыңғайы мәскәүеңдең балыҡты һыҡҡанын тойоу, уның ялтырап һыу өҫтөнә күтәрелеүен күреү ниндәй рәхәт! Ләкин был юлы мин ошо рәхәтлекте кисерһәм дә, балыҡты ҡулға уҡ тотоу бәхетенә ирешә алманым. Бәрҙе ҡойроҡ ос яғынараҡ һығылған, күрәһең, тартып сығарып килтергәндә шап итеп һыуға төштө лә китте. Ул ҡырылған тәңкәләрен ҡойоп, ары-бире ялтанғылап түбәнгәрәк барҙы ла, кире әйләнеп килеп, Шәһит тәңгәленә ятты. Ахырыһы, бәрҙе нык һығылған, таш ҡырына һыйынып, һыу төбөнә үк лыпашты.

Күҙе рәтләп күрмәгәнгәме, Шәһиттең балыҡ мәскәүләргә барымы юҡ ине. Ошонда ҡайһы саҡта көндәр буйы ултырһа ла, бер балыҡ тота алмай ҡайта. Әле уға:

- Шәһит, һығылған бәрҙе ана һинең тәңгәлгә барып ятты. Мәскәүлә! - тип ҡысҡырғайным, эй аланлап эҙләргә тотондо.

- Анау яҫмаҡ таш буйын ҡара!

Бәрҙене шулай тип әйткәс кенә күрҙе Шәһит һәм күп тә үтмәй уны ялпылдатып килтереп тә сығарҙы. Мин һеңгәҙәткәнсе һығып төшөргән балыҡты алғанын уйламай:

- Уларҙы дәдәң бына шулай итеп эләктерә! - тип маҡтанған була бит әле.

Әллә ҡайҙан әйттем шул маҡтансыҡҡа, тип йәнем көйөп ултыра инем, тәңгәлемә генә бер ҙур бәрҙе килеп ятты. Быны эләктерһәм, әсәйем ҡайтыуға һый була инде, мин әйтәм. Бәрҙе ике сиректәй булыр. Арҡаһы йәшкелтләнеп, ҡанаттары ҡыҙарып ята. Ниңәлер йөрәгем дөпөлдәп тибә, ҡулдарым ҡалтырана башланы. Бәрҙене Шәһит тә әллә ҡайҙан күрә һалып ҡалған бит әле.

- Һинең өркөтөп кенә ебәреүең булыр, ҡана үҙем мәскәүләйем, - ти шәп кеше һымаҡ.

Әллә ул шулай һөйләнеп сәмләндергәнгә инде, ҡулым дерелдәүе ҡапыл бөттө, донъямды онотоп, әлеге бәрҙегә төбәлдем. Ух, ҙурлығы! Ауыҙын бер асып, бер йомғанында айғолаҡтары ҡыҙарып күренеп ҡала. Алып булһа инде быны, Шәһиттең күҙен дүрт итер инем... Иплəп кенә мәскәүемде яҡынлатам быға, ә ул әкрен генә артына сигенә. Мин һуйылды шәберәк алып барып, мәскәүҙе башына керттем дә бөтә көсөмә тарттым. Елле бәрҙене тыбырсындырып үргә һөйрәйем, хатта һуйыл бөгөлөп киткән. Бына ул минең ҡулда, ике усыма ҡыҫып тотоп алдым. Ә ул тулай, һаман ысҡынырға маташа. Мәскәүҙән ысҡындырып, айғолағына бармағымды тыҡтым ғына тигәндә...

...Балыҡтың һыуға ялпылдап төшөп барғанынан башҡа бер нәмә лә хәтеремдә түгел. Иҫемә килгәндә, өйөбөҙҙөң ишек төбөндәге урындығында ята инем. Өй эсе ниңәлер томанһыу төҫтә күренә. Эргәмдә сырайы ҡаҫҡан апайым ултыра. Әллә илаған инде, күҙҙәре ҡыҙарып бөткән. Туҡта, был ни ғәжәп әле? Мин күпер аҫтында балыҡ мәскәүләп ултыра инем бит. Ҡыбырҙарға иткәйнем, тәнем ауырта, ә уң ҡулым таш бәйләгән кеүек. Ҡараһам, ул, ысынлап та, буйынан-буйына ураулы, етмәһә, уны ниҙер ике яҡтан ҡыҫып тора.

- Ни эшләгәнмен мин, апай? - тип һорайым, аптырағас.

Яуап биреү урынына, апайым танауын мыш-мыш тартып илай башланы.

- Күпер аҫтына осоп төшкәнеңде лә белмәйһеңме әллә? - тине ул йәш аралаш.

Ошонан аҙаҡ ҡына ике сирекле, ҡып-ҡыҙыл ҡанатлы бәрҙенең ҡулымдан ысҡыныуы, үҙемдең уны тоторға теләп ынтылыуым, өтәләнеүҙән урҙаға яҙа таяныуым һәм күпер аҫтына баш түбән ҡолауым берәм-берәм күҙ алдыма килде.

- Апай, ә теге балыҡ ни эшләне икән?

Хәшейә апайым миңә асыуланып ҡарай.

- Һаман балығыңды һөйләйһеңме ни әле? Үлемдән ҡотолғаныңа ҡыуанмай...

Ул миңә хәлде төшөндөрөбөрәк һөйләп бирҙе. Бәхетемә күрә, мин осоп төшкән саҡта күперҙән өҫтәрәк бар апай кер сайҡап торған икән. Теге апай йүгереп килеп күтәреп алмаһа, шунда иҫемә килмәйенсә һыуҙа сәсәп тә үлгән булыр инем. Шәһит, ауыҙын йырып көлөп, минең ҡулдан ысҡынып, һеңгәҙәп ятҡан балыҡты мәскәүләп тик ултыра, ти.

- Алдымы икән балыҡты?

- Исмаһам, һөйләмә шул балығыңды!.. - тип апайым асыуҙан иренен тешләй. - Фельдшер Настя апай килеп, ҡулыңды ике яҡлап ҡабыҡ менән ҡыҫтырып бәйләгәс кенә йән инеп ҡалды. Үләһең тип торам. - Апайымдың күҙенән тағы йәш тәгәрәй. - Йә, әсәйем ҡайтҡас, ни тиермен...

Ошонан аҙаҡ ҡына мин үҙ хәлемдең мөшкөллөгөн аңлаған һымаҡ булдым. Ауырыйым тип алдап тороп ҡал да әсәйем ҡайтыуға шулай ҡул һындырып ят инде. Ҡайҙан тура килде шул һуҡыр Шәһите? Ниңә шуға эйәреп китеп барырға миңә? Их, ҡыйын булһа ла, бесәнгә барһам, был бәләгә лә тарымаған булыр инем... Аптырағас, апайымды йыуатып ҡарайым.

- Һин ғәйепле түгел бит. Ниңә илайһың?

- Түгел һиңә... Әсәйем бер ҡайҙа сығарып йөрөтмәҫкә ҡушып киткәйне, һин сығып ҡасҡанһың!..

Эйе, бөтәһе лә минең арҡала. Ялҡаулыҡтың аҙағы яман, тип әйткәндәре шулдыр инде. Әсәйем бесәндән ҡайтҡас, уның күҙенә ҡарарға ла ҡурҡып ятҡандарымды, иртәгеһенә район больницаһына алып барып һалғастар, унда ай буйына көн үткәрә алмайынса, ауылымды, әсәйем менән апайымды, иптәштәремде һағынып йөҙәгәнемде белһәгеҙ ине. Шул саҡта мин ҡабат ғүмеремдә лә алдашмаҫҡа эсемдән генә ант иттем.

* * *

Һуғыш бөтһә лә, уның ҡара еле һаман йәндәрҙе ҡыя ине. Ана бит, шунда алып ҡайтҡан яранан атайым үлде. Ә 1947 йылдың яҙы алып килгән аслыҡ тағы ауыр һуғыш йылдарын хәтерләтте. Әсәйем көҙҙән үк ондо бермә-бер ҡәҙерләп тотона башлағайны. Барыбер ҡыш уртаһына уҡ бөттө. Ҡайһылай етте, шулай итеп ҡыш сыҡтыҡ. Был хәл беҙҙең күңелдәрҙе лә һүрәүләндерҙе. Уйындар һирәкләнде, Ғимран бабайҙарҙың өйө эргәһенә йыйылған саҡта ла һүҙ күберәк тамаҡ тураһында бара. Кем күпме һарына ҡаҙып алып ҡайтҡан, монар көпшәһе тәмлерәкме, әллә балтырғанмы? Онға әтлек ҡушып бешергән икмәк яҡшымы, әллә бәрәңге ҡушһаң туҡлыҡлыраҡмы?..

**(Дауамы. Башы 15-17-се һандарҙа).**

*✓ Күрше постарҙа торған ҡыҙҙар Зәйтүнәнең ғүмеренең һуңғы минуттарында әйткән һүҙҙәрен ишетә. Яҡынлашып килгән немецтарҙы күргәс, ҡыҙ тәртип буйынса был турала роталарына хәбәр итә һәм "Ут асам!" ти.*



ИНТЕРНЕТТАН



# ИРТӘРӘК ЯҠШЫРАҠ

■ Австралияның Мензис ғилми-тикшеренеү институты үткәргән тикшеренеүҙәр раҫлауынса, иртәнге ашты ашамай йөрөүселәрҙә йөрәк-ҡан тамырҙары системаһы сирҙәре, диабет барлыҡҡа килеүе ихтимал. Был ғилми эштең авторы Кайли Смит билдәләүенсә, иртәнге аш артыҡ ауырлыҡты кәметергә ярҙам итә, бынан тыш, ҡандағы инсулин һәм холестеринды бер кимәлдә тота, тимәк, йөрәк сирҙәре, диабеттың үҫеүенә юл ҡуймай. Сәләмәтлек өсөн иртәнге аштың әһәмиәте ҙур. Ошоно иҫтә тоторға һәм балалар ҙа һеҙҙән матур үрнәк алып үҫһен өсөн, бергәләп иртән бутҡа, йомортҡа ашау бик кәрәк.

■ Америка ғалимдары йоҡоноң оҙайлығы кешенең сәләмәтлегенә нисек йоғонто яһауын тикшереп ҡараған. Һөҙөмтәлә, төүлегенә 5-6 сәғәт йоҡлау - иң яҡшыһы, тигән фекергә килгәндәр. 14 йыл дауамында барған тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, 5-6,5 сәғәттән оҙағыраҡ йоҡлау йөрәк-ҡан тамырҙары сирҙәренә килтерә. Шулай уҡ төндә йоҡламаусыларҙың да сәләмәтлегенә зыян килә икән, улар ҡан баҫымы күтәрелеү менән йышыраҡ яфалана.

■ Бөгөн йәштәребеҙ ғаилә ҡорорға ашыҡмай. Быны сәбәптәре төрлө, шулай ҙа төүге урынға эште, карьера яһауҙы ҡуйыу уларҙы ошоға этәрә лә инде. Әммә кеше ни тиклем иртәрәк өйләнә йәки кейәүгә сыға, шул тиклем уның психологик сәләмәтлеге нығыраҡ була икән. Америка ғалимдары билдәләүенсә, йәштәрҙең генә түгел, ошо ғаиләлә тыуған балалар өсөн дә быны ыңғай яғы бар. 8 мең йәш ғаиләне тикшереп, психологтар шундай һығымта яһаған: йәш саҡтарында уҡ өйләнешеп, ғаилә ҡороусылар араһында үҙ-ара мөнәсәбәттәр шул тиклем йылы булған, улар балаларын да матур мөхиттә тәрбиәләй, балаларҙың иһә интеллект кимәле лә юғарыраҡ була икән. Тимәк, был йәһәттән ни тиклем иртәрәк, шул тиклем яҡшыраҡ тигән ҡағиҙәгә таянып эш итергә кәрәк. Ғалимдарҙың "йәш саҡта" тигән критерийы иһә үҙ эсенә 18-25 йәш арауығын ала.

■ 2011 йылдан Еврокомиссия балалар туҡланыуы өсөн тәғәйенләнгән пластик шешәләр етештереүҙә бисфенол А матдәһен ҡулланыуҙы тыя. Был химик ҡушылманың бала үҫешенә кире йоғонто яһауы бар. Бисфенол А төрлө үтә күренмәле пластик һауыт-һаба етештереүҙә киң ҡулланыла. Шешәне йылытҡанда йәки уға майлы ризыҡ һалғанда ул төрлө реакцияға инеп, ағыуға әйләнеүе ихтимал. Шулай уҡ эргә ҙә пластик шешә күптән ҡулланыла һәм уның һыҙырылған урындары бар икән, уны икеләнмәйенсә алыштырырға тәҡдим ителә. Был осраҡта ризыҡҡа бүленеп сыҡҡан бисфенол А матдәһенең күләме тағы ла артып китә.

■ Урманда йөрөү агрессияны кәметә һәм психик сирҙәрҙе булдырмай, тип белдерә Урман тикшеренеүҙәре институты ғалимдары. Бынан тыш, урман буйлап йәйәү йөрөү иммунитетты нығыта, яман шеш күҙәнәктәре юҡҡа сыға. Терапевтар хроник стрестан һуң сирлеләргә тәбиғәт ҡосағына йышыраҡ сығырға кәңәш итә. Артериаль ҡан баҫымы, йөрәк тибеше, мускулдар көсөргәнеше һәм гормондар күләме лә тәбиғәттә тиҙерәк нормаға килә.

ХӘТЕРКИТАП

**Коллегам, театрҙың баш рәссамы Валерий Яшкулов һүҙгә бик әүәҫ кеше. Ҡалмыҡ милләтенән булған яңы дуҫымды театр сәнғәтенә ҡағылышы булғандар яҡшы белә, ул Ҡалмыҡстандың һәм Рәсәй Федерацияһының атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре. Күп урында эшләгән, күп күргән, күп белә. Бик уҡымышлы, шуға күрә уны уйынлы-ысынлы ике аяҡлы энциклопедия тип йөрөтәбеҙ. Бер көн Бөйөк Ватан һуғышы тураһында һүҙ сыҡҡас, "Башҡорт Зояһы тураһында беләһеңме?" тип һорап ҡуйҙы. Юҡ, тинем, был турала тәүгә ишеткәс. Валерий Борисович, ул саҡта Ҡалмыҡстан президенты Кирсан Илюмжиновтың эстетика һәм дизайн буйынса советнигы, үҙ республикаларының Сарпин районы Садовый ауылына эш буйынса барғанында ишетә башҡорт ҡыҙы Зоя-Зәйтүнәнең батырлығы тураһында. Шунда уҡ интернеттан ҡыйыу башҡорт ҡыҙы тураһында материалдар эҙләй башланым һәм ошо "Зоя-Зәйтүнә ҡалҡыулығы" тип аталған мәҡәләгә тап булдым.**

# БАШҠОРТ ЗОЯҺЫ



"Миәкә хәтере" исемле эҙәрмәндәр отряды 2012 йылдан уңышлы эшләп килә. Ошо осорҙа илһөйәрҙәр хәрәкәтендә ҡатнашыусылар илебеҙҙең бик күп ҡалалары һәм һәм райондарында булып, ҙур эштәр атҡарҙылар. Һуңғы сәйәхәт ваҡытында улар Ҡалмыҡстандың Сарпин районы Садовый ауылында булдылар.

Билдәләнгән урын осраҡлы һайланмай, бындағы Хәрби Дан мемориалында беҙҙең яҡташыбыҙ, Ҡырғыҙ-Миәкә ауылынан Зәйтүнә Альбаеваның (Әлибаевалыр, күрәһең - **авт.**) исеме мәңгеләштерелгән. Нәҡ ошо ҡалмыҡ ерендә 1942 йылдың авгусында ул батырҙарса һәләк була. Урындағылар данлыҡлы башҡорт ҡыҙын үҙ батырҙары кеүек күрәләр, хөрмәтләп иҫкә алалар.

Зәйтүнә Әлибаева 1922 йылда Ҡырғыҙ-Миәкә ауылында тыуған. 1938 йылда улар ғаиләләре менән Маҡар (хәҙерге Ишембай) районына күсенәләр, сөнки ҡыҙҙың атаһын, Рәхмәтулла Хәйрулла улын Әсеялан ауылына совхоз директоры итеп тәғәйенләйҙәр.

Бөйөк Ватан һуғышы башланғас, Зәйтүнә Стәрлетамаҡ ҡалаһындағы санитаркалар әҙерләүсе тиҙләтелгән курстарға уҡырға инә. Әммә уҡып бөтмәйенсә, 1942 йылдың майында үҙе теләп фронтка китә. Йәш доброволец-ҡыҙҙарҙан торған эшелон тура Сталинград һуғышына килә. Ҡалмыҡстандың баш ҡалаһы Элистала ҡыҙҙарҙы дошман самолеттарын тауыштары буйынса танырға өйрәтәләр һәм Зәйтүнәне һауаны күҙәтеп, хәбәр итеүсе 44-се батальонға тәғәйенләйҙәр.

1942 йылдың 9 авгусында Зәйтүнә Әлибаева Сталинградтан 120 километр алыҫлыҡтағы Ҡалмыҡстан АССР-ның Сарпин районы Садовый ауылы эргәһендәге Песчанка ҡалҡыулығына хәрби дежурға баҫа. Шул көндә ауылға немецтарҙың моторизацияланған разведка отряды бәреп инә. Элемтәсе Зәйтүнә дежурлыҡ иткән ҡалҡыулыҡ ҡыҙыҡһындыра уларҙы. Мотоциклдарынан төшөп, гитлерсылар юғары үрмәләй башлай. Һәм шул саҡ атыу тауыштары яңғырай. Актриса булырға хыялланған сибек ҡыҙ, утыҙ ғына патроны булыуға ҡарамаҫтан, винтовкаһын тоҫҡап, тиңһеҙ һуғыш башлай, башкөллө ҡоралланған фашистарға ҡаршы тора. Гитлерсыларҙың береһе, убаны икенсе яҡтан урап, һалдатка пулялар яуҙырғансы, ҡыҙ оҙаҡ алыша. Шунан ғына немецтар көн оҙоно кем менән һуғышҡандарын аңлайҙар. Ҡыҙҙың үле кәүҙәһе эргәһендә карабины ята, тирә-яҡҡа атылған гильзалар сәселгән, винтовкала һуңғы патрон ҡалған.

Оҙаҡ йылдар Зәйтүнә Әлибаева хәбәрһеҙ юғалған тип иҫәпләнә, исеме онотола. Был тиңһеҙ алыштың шаһиттары күрмәгәс, көнөн, сәғәтен минутына тиклем иҫләгән шаһиттар булыуға ҡарамаҫтан, ни өсөн ул хәбәрһеҙ юғалғандар араһында булыуы аңлашылмай. Күрше постарҙа торған ҡыҙҙар Зәйтүнәнең ғүмеренең һуңғы минуттарында әйткән һүҙҙәрен ишетә. Яҡынлашып килгән немецтарҙы күргәс, ҡыҙ тәртип буйынса, был турала роталарына хәбәр итә һәм "Ут асам!" ти. Яңғыҙ карабин тауышына автоматтар тырылдауы ҡушыла. Зәйтүнәнең "Ҡыҙҙар, бәхил булығыҙ, Тыуған ил өсөн үләм!" тигән һуңғы һүҙҙәре ишетелә. Был турала Әлибаеваның туғандарына 44-се ВНОС батальоны командиры В. Бейхлис хат аша хәбәр итә.

Ошо тиңһеҙ алыштың шаһиттары булған урындағы халыҡтың һөйләүенсә, Зәйтүнәләрҙең командиры яу ялаһын ташлап ҡаса. Немец разведчиктарының яҡынлашыуы тураһында ишеткәс тә, ул ҡатын-ҡыҙ кейеме кейеп, ҡасыу яғын ҡарай. Тик Зәйтүнә Әлибаева ғына антына тоғро ҡалып, дошман утына яңғыҙы ташлана".

Мәҡәләне уҡығас, тән сымырҙап, күҙҙәргә йәштәр төйнәлде... Аяттар уҡыған һайын, батырҙарыбыҙға доға ҡылайыҡ, дуҫтар! Әруахтар тик шуға ғына мохтаждар...

**Радик ӨМӨТҠУЖИН.**

ҺАБАҠТАР

# ТЫШТАН ЯЛТЫРАП...

## эстән ҡалтырап

**Булһа була бит ул матур ҡатын-ҡыҙҙар... Маршрутҡала ҡаршымда ултырған ханыма һоҡланып барам. Зауыҡ менән кейенгән, йөҙ һыҙаттары ла иҫ киткес сибәр. Күҙҙәре, әйтерһең дә, төпһөҙ зәңгәр күл, ә керпеге - күлде уратып алған ҡуйы ҡамыш. Подиумдарҙа ғына йөрөй торған буй-һын. Минең генә түгел, ҡаршыһындағы бөтәһенең дә һоҡланыулы ҡарашын тойоп, ул сейә ҡыҙыл төҫкә буялған тырнаҡтарына текәлде...**

Күп тә үтмәй, бер туҡталышта сығырға тура килде беҙгә.

- Бәләкәй ҡаланың шуныһы минә оҡшамай: кешене күрәләтә күҙҙәре менән ашайҙар. Үҙемде ҡайҙа ҡуйырға белмәй ултырҙым, - тип һүҙ ҡушты ул, ә бәлки, минең дә ҡарап ултырғаныма төрттөргәндер. - Мәҙәнилек тә, тәрбиә лә юҡ.

"Мәҙәниәтһеҙлегемә" уңайһыҙланып, ни тип әйтергә лә һүҙ таба алмай, ыҡ-мыҡ иткәнсе, матур ҡатын, бейек үксәләре менән тыҡ-тыҡ баҫып китеп тә барҙы. Тик ырғытып киткән һыу шешәһе лә, билеты ла сүп һауытына барып етмәй, кеше күпләп йөрөгән туҡталыштарҙың береһен тағы ла нығыраҡ ҡыйлап ятып ҡалды...

Әле генә күптәр өсөн, шул иҫәптән миңә лә, гүзәллек алиһәһе булып тойолған ҡатындың нәзәкәтлелегенән, матурлығынан бер нәмә лә ҡалманы, тиһәм, бер ҙә арттырыу булмаҫ. Ауыҙ тултырып, мәҙәнилек, тәрбиә тураһында әйткән булды, ә үҙенең артынан сүп кенә түгел, ә тирә-яҡҡа асыу ҙа сәселде...

Һуңғы ваҡытта урамдар, туҡталыштар, биҫтәләр бысраҡ булыуы, сүплеккә әйләнеүе тураһында күп һөйләйбеҙ. Уның өсөн власты, йыйыштырыусы ойошмаларҙы әрләйбеҙ. Экология, тирә-яҡ мөхит бысрана тип һөрәнләйбеҙ, яр һалабыҙ. Тик үҙебеҙ йәшәгән урыныбыҙ таҙа, һулар һауабыҙ саф булһын өсөн нимә эшләйбеҙ һуң?

Эйе, сүплек мәсьәләһе әле һаман иң төп проблемаларҙың береһе булыуын дауам итә. Көнкүреш ҡалдыҡтары элеккесә баҡса йорттары, коттеджлар биҫтәһе, урман һыҙаттарында, йәғни кешеләр йөрөгән, дөрөҫөрәге, кеше үҙен иректә тойған, бер ниндәй контроль, күҙәтеү юҡ тип иҫәпләгән ерҙә осрай. Бигерәк тә яҙ һәм йәй көндәрендә күбәйә улар. Ни өсөн шулай килеп сыға һуң? Нимә сәбәпсе быға? Тәрбиәһеҙлекме, әллә тейешле урында сүп һауыттары булмауымы? Ә, бәлки, үрҙә атап киткән ҡатын кеүек, урнаситенә ырғытҡан өсөн яза системаһы ҡаралмауылыр?

Бынан бер нисә йыл элек сүп һауытында эҙләнгән асарбаҡ менән һөйләшкәйнем. Ул кешеләрҙең бай йәшәүен билдәләгәйне. "Кисә һатып алған икмәген бөгөн ашамайҙар, былтыр алған кейеменә лә шкафта урын юҡ, бөтәһен дә сығарып ташлайҙар", - тигәне хәтерҙә ҡалған. Эйе, бөгөн кешелә әйбер күп, береһенән-береһе уҙҙырып байыраҡ йәшәргә ынтыла. Тик матди байлыҡ йыйған һайын, үрҙә атап киткән ҡатын кеүек, күңелдәре ярлыланмаһа ине лә бит...

**Лена АБДРАХМАНОВА.**

**✓ Сығып ҡапҡа асам. Ҡаҙыбыҙ инергә ашыҡмай, ҡапҡа артына һонолоп ҡарап, кемделер саҡыра. Мин сығып, ҡапҡа артын ҡарайым. Унда, оялғандай башын ситкә бороп, күрше инә ҡаҙ йәшеренеп тора.**



ЙӘНӘШ ЙӘНДӘР

# ҠАҘҒА МӘДХИӘ

**Совет осоронда ауылдың һәр йортонда тиерлек күпләп ҡаҙ көттөләр. Колхоздар гөрләп торҙо, ырҙында иген тау булып өйөлөп ятты. Эшкә йөрөгән ҡатын-ҡыҙҙар, бала-саға биҙрәләп, итек ҡуныстарына, кеҫәләренә тултырып, ем алып ҡайтып, йорт ҡош-ҡорттарын һыйлар ине. Хәҙер инде тынып ҡалған буш ырҙын янынан үткәндә эс боша, күңелдә шом баҫа. Йылға буйында элек мыжғып торған ҡаҙ-өйрәктәр ҙә һирәк осрай.**



Беҙгә бала саҡтан зоология дәрестәрендә ҡош-ҡорт, хайуандар нәҫелдән-нәҫелгә күсеп килгән инстинкт, йәғни аҡыл-зиһенгә бәйләнмәгән, тәбиғәткә яраҡлаштырып һалынған программа буйынса йәшәй, тип уҡыттылар. Шулай ғынамы икән? Ҡаҙ көткән һәр кеше уларҙың бик аҡыллы, аралашыусан, таҙалыҡты яратҡан һөйкөмлө ҡош икәнен белә. Ҡаҙҙың хәтере һәйбәт, үҙ хужаһын таный, ихтирам итә. Улар ҙа беҙҙең кеүек тәбиғәт балалары. Эмоцияларын күрһәтә - асыулана, ҡурҡа, аптырай беләләр. Ҡаҙҙар бик ҡайғыртыусан ата-әсә: бәпкәләрен яраталар, ҡурсалайҙар, һаҡлайҙар. Инә ҡаҙ яңы тыуған бәпкәләрен эйәртеп, ояһынан сыҡҡас, түҙемлек менән көтөп йөрөгән ата ҡаҙҙың, ҡыҫҡырып йүгереп килеп, муйындарын дуғаландырып, ҡанаттарын йәйеп ебәреп, инәһе-бәпкәләре тирәләй тыпылдап түңәрәтеп бейегәнен күргәнегеҙ барҙыр.

Ә йоморҡалары серетке булып, бәпкәһеҙ мәхрүм ҡалған ҡаҙҙар бик моңһоу, күңелһеҙ, ҡыҙғаныс күренәләр. Ситтән генә башҡа ҡаҙҙарҙың бәпкәләрен күҙәтәләр. Ата-инәһе үлән сүпләп, саҡ ҡына иғтибарын юғалтҡан арала, әкрен генә барып, ситкәрәк киткән бәпкәне әүрәтеп, үҙ арттарынан эйәртеп, урлап алып китеүҙәре лә бар. Ата-инәһе был хәлдә ваҡытында күреп ҡалһа, ата ҡаҙ ҡысҡырып, бурға ташланып, бәпкәһен кире ҡайтарып ала. Үткән йыл баҙарҙа, ҡаҙ бәпкәләре һатыусыларҙың машинаһы янына килеп, ике ҡаҙҙың ҡысҡырып бәпкә даулап йөрөгәндәрен күрергә тура килде. Ҡаҙҙарҙы ҡыуып ебәрәләр, улары кире әйләнеп килә.

Ҡаҙ яңғыҙлыкты ауыр кисерә. Ә инде тоғролоҡҡа килгәндә, был ҡош кешегә үрнәк булырлыҡ. Ошо турала ҡыҙыҡлы һәм ғибрәтле бер хәлде яҙып үтмәксемен. Ун биш йылдар элек Остап һәм Машка ҡушаматлы татыу пар ҡаҙҙар көттөм. Яҙ көнө, тамағына берәр нәмә тығылдымы, инә ҡаҙ ашай алмай, ятып үлде. Остап ҡар ireп бөткәнсе шым ғына ояһы янында ятты. Ҡар ирегәс, үлән сүпләргә урамға, йылға буйына сыға башланы. Минең күршеләрҙең дә пар ҡаҙҙары бар ине. Шул яҙҙа тағы бер инә ҡаҙ һатып алып ҡайттылар. Ата ҡаҙҙары яңы инәһен яратманы, суҡып, урамға ҡыуып сығарҙы. Үгәйһетелгән инә ҡаҙ ҡапҡа алдында яңғыҙы ултырыр ине. Минең яңғыҙ ҡалған Остап башта күрше ҡаҙға иғтибар бирмәне. Аҙағыраҡ, иртән урамға сыҡҡас, ҡаңғылдашып, бер-береһен сәләмләй, унан бергә йылғаға йөрөй башланылар. Ҡаҡылдап, туҡтауһыҙ нимәлер һөйләшәләр. Кис Иҙел буйынан ҡайтҡас, Остап башта дамаһын ҡапҡаһы төбөнә тиклем оҙатып ҡуя, унан ҡайтып, ҡысҡырып, ҡапҡа астыра.

Көҙ ҙә етте. Ғәҙәттәгесә, ҡараңғы төшөүгә, тышта ҡаҙ ҡысҡырған тауыш ишетелә. Сығып ҡапҡа асам. Ҡаҙыбыҙ инергә ашыҡмай, ҡапҡа артына һонолоп ҡарап, кемделер саҡыра. Мин сығып, ҡапҡа артын ҡарайым. Унда, оялғандай башын ситкә бороп, күрше инә ҡаҙ йәшеренеп тора. Ҡапҡаны асыҡ ҡалдырып, ситкәрәк китеп күҙәтеп торам. Мин юғалғас, ҡаҙҙар башта ҡапҡа тышынан муйындарын һоноп, кеше юҡмы, тигәндәй, ишек алдын байҡап сыҡтылар, унан эскә уҙып, алдан әҙерләп ҡуйған емде ашай башланылар. Икенсе көнөнә күстәнәс тотоп, күршеләргә инеп, хәлде аңлатып бирҙем. "Үҙҙәре килешеп ҡушылғас, айырып тормайыҡ инде", - тип, миңә ҡаҙҙарын һатырға булдылар. Киләһе йылына улар күп бәпкә сығарып, ҡарап үҫтерҙеләр. Шул көҙҙә ишек алдында ҡунған ҡаҙҙарға төндә көҙән һөжүм итә. Ата ҡаҙ ояһын һаҡлап, йыртҡыс менән алышып һәләк булды.

Уҙған йыл Иҫке Собханғол ауылында, Ағиҙелдең арьяҡ яр сите буйлап туңмай ҡалған ерендә, иптәштәренән айырылып, көньяҡҡа осоп китә алмай ҡалған мөхәббәт символы - яңғыҙ аҡҡош бер кемде лә битараф ҡалдырмағандыр, моғайын. Ошо яңғыҙ аҡҡош яҙмышын уртаҡлашып, уға иптәшкә ябай йорт ҡаҙының барып ҡушылыуы барыһын да ҡыуандырҙы. Ҡаҙ яҙ еткәнсе аҡҡоштан айырылманы. Сумып, бергә ылымыҡ ашайҙар, боҙға сығып ултырып, ҡауырһындарын таҙарталар. Яҙ сыҡҡансы бөтә Бөрйән халҡы ҡоштарҙың яҙмышы өсөн янып йәшәне. Уларҙың бергә иҫән-һау яҙ сығыуы барыбыҙ өсөн дә оло ҡыуаныс булды.

**Заһир ДӘҮЛӘТБИРҘИН.**
**Бөрйән районы.**

**Редакциянан: Бөрйән районында йәшәп ятыусы авторҙарыбыҙ - тарих уҡытыусыһы Заһир Дәүләтбирҙиндың ошо йәнәш йәндәр, мәсәләнән, йыландар, Ҡар кешеһе, биология фәндәре докторы Әғләм Шәриповтың төрлө урман кейектәре, бал ҡорттары тураһында яҙғандары һәр ваҡыт ҡыҙыҡһынып уҡыла. Был авторҙарҙың тәбиғәттең тере йәндәре буйынса белеме, күҙәтеүсәнлеге һәр ваҡыт һоҡланыу уята. Беҙҙең гәзит уҡыусылар араһында ла барҙыр ошондай белемле, тәбиғәткә яҡынлығын юғалтып өлгөрмәгән кешелер. Яҙып ебәрегеҙсе беҙгә үҙ күҙәтеүҙәрегеҙ тураһында.**

БАҠСА МӘШӘҠӘТТӘРЕ

## Ҡый үләндәренән арыныу

Баҡсала түтәлдәр араһына сыҡҡан дегәнәк һәм ҡурйын үләне кеүек эре ҡый үләндәренең тамырын йолҡоп алыуы еңел түгел. Тамыры төпкә китеп үҫкән ҡый үләндәрен яҡшылап ҡаҙып та булмай, эргәһендәге файҙалы үҫентеләргә зыян килтереүе мөмкин. Был ҡый үләндәрен түбәндәге ысул менән бөтөрөргә була: үләндең өҫкө өлөшөн тулыһынса ҡырҡып алып, тамырһабағы өҫтөнә бер-ике семтем тоҙ һибергә кәрәк. Тоҙ үләндең тамырын ашап бөтөрә, үҫеүен туҡтата.



## Ҡурай еләген кәртәләү

Ҡурай еләге бик тәмле емеш, әммә уның тамырҙары тиҙ таралып, бөтә баҡсаны баҫып алырға мөмкин. Ҡурай еләгенең тамырҙары баҡсаның кәрәкле өлөшөнән артыҡ ситкә сығып үҫмәһен өсөн ул ултырған ерҙе тирәләтеп ҡаҙып, шифер һалырға тәҡдим ителә. Әммә шиферҙе ҡырҡыуы ауыр, бынан тыш, матур күренмәй. Шифер урынына ҡурай еләге үҫкән территорияны пластик ҡайма менән уратып алырға була. Уның киңлеге 20 сантиметрҙан да кәм булмаҫҡа тейеш. Әгәр ҙә был рәүешле ҡаймалап ҡуйырға теләмәһәгеҙ, ҡурай еләге тирәләй һарымһаҡ һәм петрушканы бер йә өс рәт итеп сәсергә мөмкин.

## Баҡсаны ҡырмыҫҡа баҫһа

**Баҡсаны ҡырмыҫҡалар баҫһа, түбәндәге әмәлдәрҙе күрергә була:**

- Ҡырмыҫҡалар насар еҫтән ҡурҡа. Ҡырмыҫҡа иләүе өҫтөнә ыҫланған селедка башы, томат һәм петрушка һабағы, дәрсен, ҡором һалырға кәрәк.
- Ҡырмыҫҡалар төйәкләгән ерҙе йомшартып, эҙбиз һипергә. Унан тыш, лимон кислотаһы, аш содаһы, ҡайнар һыу ҡойорға мөмкин.
- Ҡырмыҫҡа ояһын йоморҡа һалған ҡатламына тиклем ҡаҙып, кер йыуыу өсөн тәғәйенләнгән порошок иретмәһен ҡойоп, яңынан күмергә.
- 10 литр һыуға 1 ҡалаҡ һеркә, 2 ҡалаҡ үҫемлек майы, бер аҙ шыйыҡ һабын һалып болғатырға һәм ҡырмыҫҡа ояһының уртаһына тишек ҡаҙып ҡойоп, бер нисә көнгә пленка менән ябып ҡуйырға. Ҡырмыҫҡалар башҡаса был урында булмаясаҡ.
- Бор кислотаһы һәм шәкәр иҙмәһе лә ҡырмыҫҡаларҙан ҡотолорға ярҙам итә. Әҙер иретмәне бәләкәй һауыттарға, дарыу һауыттарына ҡойоп, тәмле еҫ аңҡыһын өсөн бер аҙ бал ҡушып һалып, ҡырмыҫҡа иләүе тирәләй ултыртырға.
- Мамыҡты кәрәсингә манып алып, ҡырмыҫҡа иләүе эргәһенә һалған осраҡта ҡырмыҫҡалар был урындан ҡаса.
- Ҡырмыҫҡаларҙан ҡотолған осраҡта ла инә ҡорт урынында ҡала икән, был бөжәктәр кире шул урынға килеп тулыуын көт тә тор. Был осраҡта иң йоғонтоло ысул - ҡырмыҫҡа ояһын баҡсанан ситкә ҡаҙып алып сығарыу булыр.

УҢЫШ ҠАҘАН



# ҺОРАҒЫҘ - АЛЫРҺЫҒЫҘ

### Инеш

Билдәле бер ваҡытҡа тиклем олатайым уңышлы эшҡыуар булды, әммә идара итеүҙең бай тәжрибәһенә ҡарамаҫтан, аңлатып булмаған ваҡиғалар сылбырына эләгеп, бар мөлкәтен тигәндәй юғалтты. Был ваҡытта миңә 9 йәш булһа ла, олатайым минең алдыма төп бурыс итеп уңыш ҡанундарын өйрәнеү бурысын ҡуйҙы. Мин уның уңышһыҙлығын асыҡларға тейеш инем. Белем эстәүем бер йәкшәмбелә Джозеф Мэрфиҙың "Төпкө аңды файҙаланып, сәләмәтлеккә, байлыҡҡа эйә булығыҙ" тигән китабынан өҙөктәр уҡыуҙан башланды. "Был тормошта нимәгә өлгәшһәгеҙ ҙә, - тип яҙа ул, - барыһы ла төпкө аңығыҙҙан килә. Төпкө аң - һеҙҙең күңел түрендәге уйҙарығыҙҙы тормошҡа ашырыусы ул".

Әлбиттә, был йәштә балалар ундай һүҙҙәрҙе ҡолағына ла элмәй. Шулай ҙа белем орлоғо минең аңымдың ундырышлы тупрағында ерегеп китә алды. Шунан башлап тормошом бер бөйөк теләк: уныш серен төшөнөү теләге тирәләй әйләнде.

Ғалим-физик булараҡ, үҙебеҙ йәшәгән ҡыҙыҡлы Йыһан тураһында бик аҙ билдәле булыуына аптырауҙан туҡтаманым. Бынан тыш, кешеләрҙең аңын һәм аҡылын тәбиғәт ҡанундарына яраҡлаштырыу өсөн саҡ ҡына ла тырышмауына аптырайым. Күптәребеҙ әһәмиәтһеҙ уңыш һәм уңышһыҙлыҡ, ваҡ хыялдар һәм өмөтһөҙлөккә риза булып йәшәй. Физика менән шөғөлләнеү мине тормош тәҡдим иткән бар нәмәне ҡулланып ҡарап тикшерергә өйрәтте. Барлыҡ тәжрибәләрем төп хәҡиҡәтте аңларға ярҙам итте: тормош сифаты уны нисек итеп ҡороуығыҙға бәйле үҙгәрә. Физика беҙгә тәбиғәт күренештәрен ышанып булмаҫтай гипотезалар, теорияны тәжрибә менән тикшереү һәм фактарҙы анализлау ярҙамында аңларға ярҙам итә. Барлыҡ был арсеналды уныш, маркетинг, байлыҡ һәм бәхет серен өйрәнеүҙә ҡулланырға мөмкин.

Һеҙ икенсе тормошҡа ынтылаһығыҙмы, маҡсаттарығыҙға өлгәшергә һәм хыялдарығыҙҙы ысынбарлыҡҡа әүерелдереү ысулдарын эҙләргә тырышаһығыҙмы? Был кәңәштәр һеҙгә тормошоғоҙҙо ысынлап та үҙгәртергә теләһәгеҙ, үҙегеҙҙә ҡыйыулыҡ табып, һорарға өйрәнергә ярҙам итер. Бына минең ябай кәңәшем: һорағыҙ, һорағыҙ һәм бер ваҡытта ла һорауҙан туҡтамағыҙ. Ни тиклем күберәк һораһағыҙ, шул тиклем күберәк алырһығыҙ.

Иң элек ҡағыҙ менән ҡәләм алығыҙ. Ашығыҙ, ваҡыт көтмәй. Тормошоғоҙҙағы үҙгәртергә теләгән өс нәмәне яҙығыҙ, уларҙы хәтерегеҙҙә тоторға тырышмағыҙ. Һорауҙарығыҙ ни тиклем аныҡыраҡ булһа, уларға яуап та тулыраҡ булыр. Ваҡытты бушҡа әрәм итмәгеҙ, зинһар, яҙығыҙ! Ҡыҙыҡ өсөн генә яҙмағыҙ, ул бер нәмәгә лә килтермәҫ. Әйҙәгеҙ, ни өсөн икәнен аңларға тырышмайыҡ. Ә тәүҙә нисек тип уйлайыҡ. Бары тик тормошоғоҙ, уныш, именлек, мөнәсәбәттәр - нимә кәрәк шул мәсьәлә буйынса һорауҙарығыҙҙы, үтенесегеҙҙе яҙығыҙ.

"Һоролған ҡулды буш итмәм", - тигәнде һәр кем белә. Ә һәр көн иртән уянғас, нимә һорайһығыҙ? Бер нәмә лә, шулай бит? Әгәр иртән бер нәмә лә һорамаһағыҙ, кискә бер нәмә лә алмаясаҡһығыҙ. Шуның өсөн тормоштан һәр саҡ нимәлер һорау, һәр һорауҙы алдағыһына ҡарағанда әһәмиәтлерәк итеү ғәҙәтен индерергә кәрәк. Әгәр үтенес, һорау яҙам тип алған ҡағыҙығыҙ бөгөн буш икән, ҡәләмегеҙҙе ҡағыҙ өҫтөнән йөрөргә өйрәтегеҙ. Өс һорау - башлап ебәреү өсөн етеп торор. Ваҡыт үткәс, һеҙ "Һорағыҙ - алырһығыҙ" тигән ябай һүҙҙең көсөнә аптырарһығыҙ.

**Пьер МОРАСИ.**



## 15 МАЯ
## ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.10 Премьера. "АнтиФейк". [16+]
9.50 "Жить здорово!" [16+]
10.40, 11.20 Д/ф "3723 Вознесенский". К 90-летию Андрея Вознесенского. [12+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
12.00, 0.25, 1.05, 1.45, 2.25, 3.05, 3.15, 3.55 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
12.45, 14.15, 18.05 Информационный канал. [16+]
17.15 "Мужское / Женское". [16+]
19.50 Премьера. "Куклы наследника Тутти". [16+]
21.00 "Время".
22.00 Т/с Премьера. "Трейдер". [16+]
23.55 Премьера. "На футболе с Денисом Казанским". [18+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1
5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
14.55 Кто против? [12+]
16.30 Малахов. [16+]
21.20, 22.20 Т/с "Земский доктор. Восемь лет спустя". [16+]
23.25 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
2.05, 2.50 Т/с "Московская борзая". [16+]
3.45 Т/с "Пыльная работа". [16+]
4.34 Перерыв в вещании.

### БСТ
7.00 "Сәләм".
10.00 "Байык-2023". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. [12+]
11.00 Новости недели (на рус.яз).
11.45, 14.45, 20.15, 21.15 Интервью. [12+]
12.00 Спортивная история. [12+]
12.30, 16.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз).
12.45, 4.15 Счастливый час.
13.30, 14.30, 18.30, 22.30, 1.45 Новости (на баш. яз).
13.45 Бәхетнамә.
15.00 М/с "Нурбостан сәйәхәте". [6+]
15.30 Гора новостей.
15.45 Преград. Net. [6+]
16.00 "Это моя профессия". [12+]
16.45 Специальный репортаж. [12+]
17.00 Республика LIVE #дома. [12+]
17.30 Т/с "Все возрасты любви". [16+]
19.00 Вечерний телецентр.
20.00 Сәңгелдәк. [0+]
20.30 "Бай". [12+]
21.00 Пофутболим? [12+]
22.00 Тайм-аут. [12+]
23.00 Д/ф "Я живой". [18+]
0.00 Х/ф "Землетрясение". [12+]
2.15 "Моя семья". [12+]
5.00 Вечерний телецентр. [12+]
6.00 Следопыт. [12+]

## 16 МАЯ
## ВТОРНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 Премьера. "АнтиФейк". [16+]
9.40 "Жить здорово!" [16+]
10.30, 11.20, 14.15, 18.05, 23.00 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
17.15 "Мужское / Женское". [16+]
19.50 Премьера. "Куклы наследника Тутти". [16+]
21.00 "Время".
22.00 Т/с Премьера. "Трейдер". [16+]
0.35, 1.15, 1.55, 2.35, 3.05, 3.20, 4.00 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1
5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Кто против? [12+]
16.30 Малахов. [16+]
21.20, 22.20 Т/с "Земский доктор. Восемь лет спустя". [16+]
23.25 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
2.05, 2.55 Т/с "Московская борзая". [16+]
3.45 Т/с "Пыльная работа". [16+]
4.34 Перерыв в вещании.

### БСТ
7.00 "Сәләм".
10.00 "Ете егет". [12+]
10.45 "Ҡурай даны". [12+]
11.00, 16.00, 6.00 "Дорога к храму". [0+]
11.30, 12.30, 16.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз).
11.45, 14.45, 20.15, 21.15 Интервью. [12+]
12.00 Моя планета - Башкортостан. [12+]
12.45, 4.15 Счастливый час.
13.30, 14.30, 18.30, 22.30, 1.00 Новости (на баш. яз).
13.45 Бәхетнамә.
15.00 Детей много не бывает. [6+]
15.30 Гора новостей. [6+]
15.45 "Кош юлы. Балалар". [6+]
16.45 Криминальный спектр. [16+]
17.00 "Автограф". [12+]
17.30 Т/с "Все возрасты любви". [16+]
19.00 Вечерний телецентр.
20.00 Сәңгелдәк. [0+]
20.30 Елкән. [6+]
21.00 Полезные новости. [12+]
22.00 Республика LIVE #дома. [12+]
23.00 Атлас Баженова: Башкортостан. [12+]
23.30 Х/ф "На крючке". [16+]
1.30 Спектакль "Встреча с молодостью". [12+]
3.45 Үткән гүмер. [12+]
5.00 Вечерний телецентр. [12+]

## 17 МАЯ
## СРЕДА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 Премьера. "АнтиФейк". [16+]
9.40 "Жить здорово!" [16+]
10.30, 11.20, 14.15, 18.05, 23.00 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
17.15 "Мужское / Женское". [16+]
19.50 Премьера. "Куклы наследника Тутти". [16+]
21.00 "Время".
22.00 Т/с Премьера. "Трейдер". [16+]
0.35, 1.15, 1.55, 2.35, 3.05, 3.20, 4.00 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1
5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Кто против? [12+]
16.30 Малахов. [16+]
21.20, 22.20 Т/с "Земский доктор. Восемь лет спустя". [16+]
23.25 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
2.05, 2.55 Т/с "Московская борзая". [16+]
3.45 Т/с "Пыльная работа". [16+]
4.34 Перерыв в вещании.

### БСТ
7.00 "Сәләм".
10.00 Әлләсе... [6+]
10.45 "Ҡурай даны". [12+]
11.00 Д/ф "И снится мне сцена". [12+]
11.30, 12.30, 16.30, 21.30 Новости (на рус. яз).
11.45, 14.45, 20.15, 21.15 Интервью. [12+]
12.00 Дознание. [12+]
12.15 Пофутболим? [12+]
12.45, 4.15 Счастливый час.
13.30, 14.30, 18.30, 22.30, 1.15 Новости (на баш. яз).
13.45 Бәхетнамә.
15.00 МузКәрәҙ. [6+]
15.30 Гора новостей.
15.45 "КультУра". [6+]
16.00, 6.00 Тайм-аут. [12+]
16.45 Новости спорта.
17.00 Республика LIVE #дома. [12+]
17.30 Т/с "Все возрасты любви". [16+]
19.00 Вечерний телецентр.
20.00 Сәңгелдәк. [0+]
20.30 Тормош. [12+]
21.00 Полезные новости. [12+]
22.00 Историческая среда. [12+]
23.00 Автограф. [12+]
23.30 Х/ф "Плюс один". [16+]
1.45 Спектакль "Белые ночи Акмуллы". [12+]
3.30 Бәхетнамә. [12+]
5.00 Вечерний телецентр. [12+]
6.30 Новости (на рус. яз). [0+]

## 18 МАЯ
## ЧЕТВЕРГ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 Премьера. "АнтиФейк". [16+]
9.40 "Жить здорово!" [16+]
10.30, 11.20, 14.15, 18.05, 23.00 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
17.15 "Мужское / Женское". [16+]
19.50 Премьера. "Куклы наследника Тутти". [16+]
21.00 "Время".
22.00 Т/с Премьера. "Трейдер". [16+]
0.35, 1.15, 1.55, 2.35, 3.05, 3.20, 4.00 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1
5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Кто против? [12+]
16.30 Малахов. [16+]
21.20, 22.20 Т/с "Земский доктор. Восемь лет спустя". [16+]
23.25 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
2.05, 2.55 Т/с "Московская борзая". [16+]
3.45 Т/с "Пыльная работа". [16+]
4.34 Перерыв в вещании.

### БСТ
7.00 "Сәләм".
10.00 "Алтын тирмә". [0+]
10.45 "Ҡурай даны". [12+]
11.00 "Этюд с натуры". [12+]
11.30, 12.30, 16.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз).
11.45, 14.45, 20.15, 21.15 Интервью. [12+]
12.00 Историческая среда. [12+]
12.45, 4.15 Счастливый час.
13.30, 14.30, 18.30, 22.30, 1.45 Новости (на баш. яз).
13.45 Бәхетнамә.
15.00 Сулпылар. [0+]
15.30 Гора новостей. [6+]
15.45 "Этно-краса". [6+]
16.00 Патриот РФ. [12+]
16.15 Специальный репортаж. [12+]
16.45 Криминальный спектр. [16+]
17.00 Моя планета - Башкортостан. [12+]
17.30 Т/с "Все возрасты любви". [16+]
19.00 Вечерний телецентр.
20.00 Сәңгелдәк. [0+]
20.30 Башкорттар. [6+]
21.00 Полезные новости. [12+]
22.00 Республика LIVE #дома. [12+]
23.00 Колесо времени. [12+]
0.00 Х/ф "Тихая семейная жизнь". [16+]
2.15 Спектакль "Близнецы". [12+]
5.00 Вечерний телецентр. [12+]
6.00 "Это моя профессия". [12+]

## 19 МАЯ
## ПЯТНИЦА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00 Новости.
9.05 Премьера. "АнтиФейк". [16+]
9.40 "Жить здорово!" [16+]
10.30, 11.20, 14.15 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
17.20, 18.40 "Человек и закон" с Алексеем Пимановым. [16+]
18.00 Вечерние новости.
19.05 "Поле чудес". [16+]
20.20, 21.45 "Сегодня вечером". [16+]
21.00 "Время".
22.45 "Вызов. Первые в космосе". [12+]
23.45 Премьера. "ГОЛОС" весны в обновленном составе. Прямой эфир. [12+]
1.50, 2.30, 3.10, 3.50, 4.25, 5.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]

### РОССИЯ 1
5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.15 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Кто против? [12+]
16.30 Прямой эфир. [16+]
21.30 Удивительные люди. Новый сезон. [12+]
23.35 Истории Большой Страны. [12+]
0.35 Х/ф "Мой близкий враг". [12+]
3.50 Т/с "Пыльная работа". [16+]
4.42 Перерыв в вещании.

### БСТ
7.00 "Сәләм".
10.00 Атлас Баженова: Башкортостан. [12+]
10.30, 18.00 "Йома". [0+]
11.00 Моя планета - Башкортостан. [12+]
11.30, 12.30, 16.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз).
11.45, 14.45, 20.15 Интервью. [12+]
12.00 Формула меда. [12+]
12.45 Үткән гүмер. [12+]
13.15 Ҡурай даны. [12+]
13.30, 14.30, 18.30, 22.30, 1.45 Новости (на баш. яз).
13.45 Д/ф "Дневник дивизии". [12+]
15.00 "АйТеКә!" [6+]
15.15 "КультУра". [6+]
15.30 Гора новостей. [6+]
15.45 Патриот РФ. [12+]
16.00 "Аль-Фатиха". [12+]
16.45, 19.45 История одного села. [12+]
17.00 Республика LIVE #дома. [12+]
17.30, 21.15 Специальный репортаж. [12+]
19.00 Честно говоря. [12+]
20.00 Сәңгелдәк. [0+]
20.30 "Башкорт йыры-2023". Телевизионный конкурс среди профессиональных исполнителей башкирской песни. [12+]
22.00, 6.00 Спортивная история. [12+]
23.00 "Байык-2023". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. [12+]
0.00 Х/ф "Путешествие с домашними животными". [16+]
2.15 Спектакль "Асылъяр". [12+]
4.15 Башкорттар. [6+]
4.45 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]
5.30 Тормош. [12+]

## 20 МАЯ
## СУББОТА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
6.00 Телеканал "Доброе утро. Суббота".
9.00 "Умницы и умники". [12+]
9.45 "Слово пастыря". [0+]
10.00 Новости.
10.15 Премьера. "Поехали!" [12+]
11.10 "Повара на колесах". [12+]
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 Т/с "По законам военного времени-5". [16+]
16.10 Д/ф "Байконур. Первый на планете Земля". [12+]
17.00 Д/ф Премьера. "Прыжок из космоса". [12+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.15 Премьера. "Кто хочет стать миллионером?" [12+]
19.15 "ГОЛОС" весны в обновленном составе. [12+]
21.00 "Время".
21.35 "Клуб Веселых и Находчивых". Высшая лига. [16+]
23.50 Х/ф "Девятый калибр". [18+]
1.35, 2.15, 2.55, 3.30, 4.05, 4.45, 5.20 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]

### РОССИЯ 1
5.00 Утро России. Суббота.
8.00 Местное время. Вести-Башкортостан.
8.20 Местное время. Суббота.
8.35 По секрету всему свету.
9.00 Формула еды. [12+]
9.25 Пятеро на одного.
10.10 Сто к одному.
11.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.40 Доктор Мясников. [12+]
12.45 Т/с "Паромщица". [12+]
18.00 Привет, Андрей! [12+]
21.00 Х/ф "Старая развалина". [12+]
0.40 Х/ф "Вера". [12+]
4.05 Х/ф "Осколки хрустальной туфельки". [12+]
5.49 Перерыв в вещании.

### БСТ
7.00 "Доброе утро!" [12+]
7.30, 18.30 Новости (на баш. яз).
7.45 "Ете егет". [12+]
8.30 Это моя профессия. [12+]
9.00 М/ф "Мультфильмы". [0+]
9.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз).
10.00 Елкән. [6+]
10.30 "Гора новостей". [6+]
10.45 "Этно-краса". [6+]
11.00 Лит-ра. [6+]
11.30 МузКәрәҙ. [0+]
12.00 Тәмле. Мы вместе! [12+]
12.30 Новости (на баш. яз). [12+]
13.00 Үткән гүмер. [12+]
13.30 Башкорттар. [6+]
14.00 Дарю песню. [12+]
16.00 Колесо времени. [12+]
17.00 "Башкирская юниор-лига КВН". Финал. [6+]
18.15 "Ҡурай даны". [12+]
19.00 Интервью. [12+]
19.15 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]
20.00 Сәңгелдәк. [0+]
20.15 Полезные новости. [12+]
20.30 "Байык-2023". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. [12+]
22.00 Республика LIVE #дома. [12+]
22.30, 1.45 Новости недели (на баш. яз).
23.15 "Башкорт йыры-2023". Телевизионный конкурс среди профессиональных исполнителей башкирской песни. [12+]
0.00 Х/ф "Спартак и Калашников". [0+]
2.30 Спектакль "Индийская насмешница". [12+]
4.15 Автограф. [12+]
4.45 История одного села. [12+]
5.00 "Млечный путь". [12+]
6.00 Мистический Башкортостан. [12+]

## 21 МАЯ
## ВОСКРЕСЕНЬЕ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
6.00, 10.00 Новости.
6.10, 0.05, 0.45, 1.25, 2.05, 2.40, 3.15 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
6.55 Играй, гармонь любимая! [12+]
7.40 "Часовой". [12+]
8.10 "Здоровье". [16+]
9.20 "Мечталлион". Национальная Лотерея. [12+]
9.40 "Непутевые заметки" с Дмитрием Крыловым. [12+]
10.10 "Жизнь других". [12+]
11.05 Премьера. "Повара на колесах". [12+]
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Видели видео?" [0+]
14.10 К 80-летию Аль Бано. "Felicita на бис!" Концерт в Кремле. [12+]
15.55 Д/ф "Польша. Отравленные ненавистью". [16+]
16.55 Д/ф Премьера. "Мариуполь. Возвращение домой". [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
19.00 "Две звезды. Отцы и дети". Новый сезон. [12+]
21.00 "Время".
22.35 Д/ф "Мариуполь. Возвращение домой". [16+]
23.30 Д/ф Премьера. "Арт и Факт". [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1
6.10, 1.30 Х/ф "Храни ее любовь". [12+]
8.00 Местное время. Воскресенье.
8.35 Когда все дома с Тимуром Кизяковым.
9.25 Утренняя почта с Николаем Басковым.
10.10 Сто к одному.
11.00, 17.00 Вести.
11.40 Большие перемены.
12.45 Т/с "Паромщица". [12+]
18.00 Песни от всей души. [12+]
20.00 Вести недели.
22.00 Москва. Кремль. Путин.
22.40 Воскресный вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
3.19 Перерыв в вещании.

### БСТ
7.00 "Доброе утро!" [12+]
7.30 Новости (на баш. яз).
7.45 "Йома". [12+]
8.15 Тормош. [12+]
8.45 "Ҡурай даны". [12+]
9.00 "Бай". [12+]
9.30 Новости (на рус. яз).
10.00 "Книга сказок". [0+]
10.15 "Городок АЮЯ". [0+]
10.30 "Гора новостей". [6+]
10.45 "Сулпылар". [0+]
11.15 М/с "Нурбостан сәйәхәте". [6+]
11.30 "Кош юлы. Балалар". [6+]
11.45 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]
12.30 Новости недели (на баш. яз).
13.15 "Алтын тирмә". [0+]
14.00 Дарю песню. [12+]
15.00 "Дорога к храму". [0+]
15.30, 4.30 Историческая среда. [12+]
16.00 "Честно говоря". [12+]
16.45 "За все тебя благодарю". Юбилейный вечер народного артиста РБ, заслуженного артиста России Раиля Кучукова. [12+]
19.00 Әлләсе... [6+]
19.45 Патриот РФ. [6+]
20.00, 4.00 Атлас Баженова: Башкортостан. [12+]
20.30 Спортивная история. [12+]
21.00, 6.45 Специальный репортаж. [12+]
21.15 Дознание. [16+]
21.30, 6.00 Новости недели (на рус.яз.).
22.15 Республика LIVE #дома. [12+]
22.45 Концерт Гальсар Байгускаровой. [6+]
0.15 Х/ф "Мы купили зоопарк". [12+]
2.15 Спектакль "Мы с тобой одной крови". [12+]
5.00 "Млечный путь". [12+]

✓ Баймаҡта бүрегә һунар итеүҙең кешелекле ысулы һаҡланып ҡалған. Бүрене тере килеш алалар, йорт ихатаһында бер нисә ай сылбырҙа тоталар һәм ҡолағына билдә һалып, кире урманға ебәрәләр.



БАШ ЭШЛӘТМӘК

# ХАЛЫҠ-АРА ҒАИЛӘ КӨНӨНӘ




Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.

**17-се һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Өфө. Магадан. Кострома. Мәрйәм. Һамар. Таяу. Нужа. Хажи. Олимп. Ганг. Сумо. Сана. Гәлсәр. Ут. Ек. Радио. Сым. Елек. Томск. Бокс. Кран.

**Вертикаль буйынса:** Һарытау. Кемерово. Рыбинск. Март. Силәбе. Рота. Фигаро. Армыт. Хис. Омск. Ағуна. Дюйм. Алаша. Сара. Магнитогорск. Галле. Йома. Мончегорск.

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ



## М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**18 май "Ҡыҙ урлау"** (М. Кәрим), комедия. 12+

**19 май "Мөхәббәт ҡоштары"** (И. Йомағолов), музыкаль комедия. 16+

**20 май "Бәхет хаҡы"** (Х. Мөҙәрисова), музыкаль мелодрама. 18.00 16+

## М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**17 май "Звезда героя"** (Ф. Әхмәҙиев, О. Мусина), драма. 15.00 12+

**18 май "Приключения Тома Сойера"** (М. Твен), әкиәт. 11.00 6+

**20 май "Три сестры"** (А. Чехов), драма. 18.00 16+

**21 май "Чиполлино"** (Дж. Родари), мажаралар. 12.00 0+

## Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**16 май "Моңло ғүмер"** Р. Вәдүтовтың юбилей кисәһе. 6+

**"Барокконан Таривердиевҡа тиклем"** (Э. Ямалова), орган концерты. 6+

## Салауат дәүләт башҡорт драма театры

**16 май "С чего начинается Родина?"** әҙәби-музыкаль лекторий. 13.00 6+

**18 май "Тоғролоҡ"** (М. Ҡунафин), драма. 16+

**20 май "Бишкә тиклем һанайым"** әкиәт. 13.00 0+

## А. Мөбәрәков исемендәге Сибай дәүләт башҡорт драма театры

**17 май "Һинән - фатир, минән - ир"** (Н. Гәйетбай), комедия-гротеск. 16+

**18 май "Их, күгәрсенкәйҙәрем!"** (Ф. Буләков), лирик комедия. 12+

**19 май "Шахтер"** (Б. Ҡаһарманова), драма. 12+

**"Их, күгәрсенкәйҙәрем!"** (Ф. Буләков), лирик комедияһы менән **19 май** - Матрай, **20 май** - Әбделкәрим ауылдарында гастролдәр. 12+

## БР Милли музейы

**16 май "Археологик Өфө"** баш ҡаланың тарихи урындары буйлап. 18.00 6+

**17 май "Сүпләп һуғыу"** күргәҙмәне асыу. 15.00 6+

**20 май "Музейҙар төнө"** Бөтә Рәсәй акцияһы. 18.00 0+

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1444 һижри йыл.*

| Май (Шәүүәл - Зөлҡәғиҙә) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Ахшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 15 (25) дүшәмбе | 3:42 | 5:12 | 13:30 | 18:49 | 21:13 | 22:43 |
| 16 (26) шишәмбе | 3:40 | 5:10 | 13:30 | 18:50 | 21:14 | 22:44 |
| 17 (27) шаршамбы | 3:39 | 5:09 | 13:30 | 18:51 | 21:16 | 22:46 |
| 18 (28) кесе йома | 3:37 | 5:07 | 13:30 | 18:52 | 21:18 | 22:48 |
| 19 (29) йома | 3:36 | 5:06 | 13:30 | 18:53 | 21:20 | 22:50 |
| 20 (30) шәмбе | 3:34 | 5:04 | 13:30 | 18:53 | 21:21 | 22:51 |
| 21 (1) йәкшәмбе | 3:32 | 5:02 | 13:30 | 18:54 | 21:23 | 22:53 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

МИЛЛИ КӘСЕПТӘРЕБЕҘ

# БҮРЕ ҺУҒА БЕЛӘҺЕҢМЕ?



**Башҡорттарҙың бүре һуғыу ысулын матди булмаған мәҙәни мираҫ федераль реестрына индергәндәр.**

2022 йылда был реестрға "Башҡортостандың Баймаҡ районында бүре һуғыу ысулы" менән "Берестиночка" халыҡ фольклор коллективы ижадында Балаҡатай районының рус йырҙары традициялары" ингән. Республика халыҡ ижады үҙәге директоры Салауат Кирәев билдәләүенсә, Рәсәйҙә берҙән-бер урында - Баймаҡта бүрегә һунар итеүҙең кешелекле ысулы һаҡланып ҡалған. Бүрене тере килеш алалар, йорт ихатаһында бер нисә ай сылбырҙа тоталар һәм ҡолағына билдә һалып, кире урманға ебәрәләр. Был бүре бер ҡасан да ауылға ҡабат килмәй. Икенсе объект иһә рус йырҙарын башҡарыу традицияһы менән бәйле. Был ансамбль ҡасандыр Пермь губернаһы Көнгөр өйәҙенән килеп, ауылға нигеҙ һалыусыларҙың йырлау үҙенсәлектәрен һаҡлау менән шөғөлләнә.

Был реестрҙың каталогына инеү өсөн тәҡдим ителгән объекттар бик уникаль булырға тейеш. Мәҫәлән, Ҡырмыҫҡалы районында һаҡланып ҡалған ыласын менән һунар итеү һәм йыртҡыс ҡоштарҙы өйрәтеү традицияһы ла юғалыу өҫтөндә. Шыға ятыу - боҙға ятып, мәкенән балыҡ тотоуҙы ла белеүселәр һирәк. Бына ошондай шөғөлдәр, бәлки, киләсәктә реестрҙы тулыландырыр әле.

✔ *Бер ҙур халыҡ-ара байрамда башҡорттар булмауына йәнем әрнене лә, мәҙәни үҙәк булдырыу йәһәтенән эшкә тотоноп, фольклор коллективы ойоштороҙом.*



МИЛЛӘТ БАЛҠЫШЫ

# ХАЛҠЫБЫҘ ИЖАДЫНА...

## һоҡланыуҙан туҡтамайым

**Мәскәүҙә йәшәүсе яҡташтарыбыҙ булдырған "Аҡ тирмә" Башҡорт фольклор колективы 2014 йылда барлыҡҡа килгән. Коллектив башҡорт мәҙәниәтен төрлө фестивалдәрҙә, шул иҫәптән халыҡ-ара кимәлдә лә күрһәтеп өлгөргән. Уның етәксеһе, режиссер, рәссам һәм педагог, РФ Мәҙәниәт эшмәкәрҙәренең ижади берләшмәһе ағзаһы Гөлсинә Алтынтимер ҡыҙы БАТЫРШИНА күп йылдар илебеҙҙең баш ҡалаһында ғүмер итә һәм башҡорт мәҙәниәтен пропагандалау йәһәтенән арымай-талмай эшләй. Уның менән әңгәмә тәҡдим итәбеҙ.**



**Ни өсөн Мәскәүҙе һайланығыҙ? Бала, үҫмер сағығыҙ Башҡортостандың ҡайһы төбәгендә үтте?**

- Стәрлебаш районы Һарайса ауылында тыуғанмын. Бала саҡтан матурлыҡҡа ынтылдым, һөнәремдә лә, шәхси тормошомда ла иң алдынғы булырға ыҡыялландым, бәләкәйҙән үк ҡалала уҡығым килә ине. Шулай итеп, 10 йәшемдә Стәрлетамаҡ башҡорт мәктәп-интернатына уҡырға киттем. Мәктәпте тамамлағас, Мәскәүҙә белем алырға теләй инем, килеп сыҡмағас, балаларым булһа ла мотлаҡ баш ҡалала уҡырға теләйеш, тигән маҡсат барлыҡҡа килде. Стәрлетамаҡ мәҙәниәт- ағартыу училищеһында уҡыттым. "Урал" галереяһында һынлы сәнғәт буйынса ойошторолған шәхси күргәҙмәмдә ҙур уңыштарымдың береһе тип иҫәпләйем. Сәнки унда билдәле рәссам Әхмәт Лотфуллин килеп, "Әсә портреты" тигән эшемде үҙендә ҡалдырыуымды һораны. Стәрлетамаҡта "Комарткы" (хәҙер "Ашҡаҙар нағыштары") тигән фольклор коллективы төҙөнөм. Ул ваҡыттағы Стәрлетамаҡ педагогия институтында художество графикаһы бүлеген асыуға нигеҙ һалдым, интернатта махсус рәссам студияһы булдырҙым, аспирантура тамамланым. Ниндәйҙер бер мәлдә балаларҙың барыһы ла минә ҡыҙыҡ түгеллеген аңланым һәм Мәскәүгә күсергә тигән тәҡдим алғас, уйламай ҙа ризалаштым.

**"Аҡ тирмә" ансамбле нисек барлыҡҡа килде? Исемен кем тәҡдим итте?**

- Ниндәйҙер бер ҙур халыҡ-ара байрамда башҡорттар булмауына йәнем әрнене лә, мәҙәни үҙәк булдырыу йәһәтенән эшкә тотоноп, фольклор коллективы ойоштороҙом. Өфөләге "Аҡ тирмә" клубы тураһында күп ишеткәнем булды, уның тирәләй халыҡтың әүҙемлеге оҡшай ине миңә. Рәсәйҙең бөтән ҡалаларында ла шундай милли-мәҙәни үҙәктәр булһын ине, тигән теләгем бар ине. Ҡәҙим Аралбайҙың: "Башҡортостан - аҡ тирмәләр иле, бар Ватанға тора күренеп. Яҡты моңға, наҙ-һағышҡа тулы, аҡ тирмәле халҡым күңеле..." - тигән юлдары оран кеүек башымда әйләнеп тик торҙо.

Ансамбль Мәскәү төбәгендә башҡорт мәҙәниәтен, тарихын, телен популярлаштырһын, тигән маҡсат ҡуйғайныҡ. Бер йылдан инде Рафаэль Зиннуров етәкселегендәге БР Яҡташтар ойошмаһы эргәһендә Башҡорт мәҙәни үҙәген асыу тураһында хәбәр иттек.

**Ансамблдең репертуары бик үҙенсәлекле...**

- Репертуарҙы Мәскәү тамашасыһын күҙ уңында тотоп, үҙем һайлайым. Шаян йырҙар, таҡмаҡтар барыһына ла оҡшай, әммә "Уралым", "Сыбай ҡашҡа", "Бер алманы бишкә бүләйек", "Ете ҡыҙ" кеүек оҙон йырҙарҙы башҡарыр алдынан мотлаҡ уларҙың тарихын һөйләйбеҙ, бейеп тә алабыҙ. Ансамбль бөтөн башҡорт милләтен һынландыра, шуға ла беҙ ижадыбыҙ менән матур өлгө күрһәтергә тейешбеҙ.

**Ҡыҙыл майҙандағы сығыштарығыҙ күптәрҙең хәтерендә ҡалды, уны ойоштороуы ауыр булдымы?**

- Минә клиптар төшөрөүҙе ойоштороу ауыр түгел, кирененсә, кинәнес кенә. Нимәне нисек төшөрөргә икәнен процесс барышында хәл итәбеҙ, ижад шуныһы менән дә мауыҡтырғыс. Ҡыҙыл майҙанда клип төшөрөү ҙә ошо уҡ юл менән барҙы, гөмүмән, ошондай һәр сараға ҙур теләк менән барабыҙ. Костюмдарыбыҙ барыһына ла, бигерәк тә сит ил кешеләренә һәм баш ҡала ҡунаҡтарына оҡшай.

**Башҡорт сәнғәтен үҙәк телеканалдарҙа, конкурс һәм фестивалдәрҙә лә күрһәтәһегеҙ. Һеҙҙе үҙҙәре саҡырамы, әллә быңдай бәйләнештәрҙе маҡсатлы рәүештә үҙегеҙ эҙләйһегеҙме?**

- Беҙҙе башлыса интернет аша табалар. Йәки берәй сарала ҡатнашҡандан һуң, башҡалар саҡыра башлай. "Елки-8" фильмын төшөрөүселәр интернет аша бәйләнешкә сыҡты һәм Мәскәүҙә ошондай коллектив булыуына бик ҡыуанды.

**Бер нисә һүҙ менән генә башҡорт халыҡ ижадын нисек һүрәтләр инегеҙ? Ни өсөн башҡорт мәҙәниәте кешеләргә шул тиклем оҡшай?**

- Халыҡ ижады - ул милләтебеҙҙең рухи һәм матди байлығы! Халыҡтың рухи белеменең төп сығанағы. Күптәр быны аңламай, үкенескә. Бөтөн халыҡтарҙы ла, уларҙың мәҙәниәтен дә ихтирам итәм, әммә үҙ милләтемдең халыҡ ижадын ныҡ яратам һәм уның менән һоҡланыуҙан туҡтамайым. Ошо байлыҡты тулы кимәлдә булмаһа ла, өлөшләтә генә булһа ла башҡаларға күрһәтә алыуыбыҙ менән бәхетлемен.

**Ләйлә АРАЛБАЕВА.**

ӘЙҘӘГЕҘ...

# "КӘКҮК СӘЙЕ"НӘ!

**"Кәкүк сәйе - 2023" республика этнофестивалендә ҡатнашыуға ғаризалар ҡабул ителә. Фестиваль үҙешмәкәр халыҡ ижадының төрлө йүнәлештәге фольклор коллективтары, саҡырылған коллективтар һәм айырым башҡарыусылар араһында ойошторола.**

Проект башҡорт халҡының милли-мәҙәни үҙенсәлеген, йолаларын һәм халыҡ байрамдарын һаҡлауға һәм үҫтереүгә йүнәлтелгән. Ойоштороусылар хәбәр итеүенсә, байрам 20 майҙа Нуриман районы Павловка ауылының "Павловка паркы" үҙәге биләмәһендә уҙғарыла. Этнофестивалдә "Иң яҡшы кейем", "Иң яҡшы фольклор коллективы", "Иң яҡшы сәй", "Иң яҡшы байрам символы (кәкүк)" номинациялары буйынса конкурстар була. Сараның программаһында: номинациялар буйынса конкурстар, оҫталыҡ дәресе, башҡорт сәйенең презентацияһы, М.В. Гордеевтың фитоүҙәге, халыҡ ижады әйберҙәре, ҡулдан эшләнгән биҙәүестәр һәм сувенирҙар һатыу-күргәҙмәһе, "Кәкүк сәйе - 2023" республика этнофестивалендә ҡатнашыусыларҙы бүләкләү.

Ғаризаны 2023 йылдың 20 майына тиклем "Кәкүк сәйе - 2023" билдәһе менән Республика халыҡ ижады үҙәгенең электрон адресына (ontrcnt@bk.ru) ебәрергә кәрәк. Фестивалде ойоштороусылар: Башҡортостандың Мәҙәниәт министрлығы, Республика халыҡ ижады үҙәге, Нуриман районы хакимиәте, "Павловка паркы" тау саңғыһы үҙәге.

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ҺАНДУҒАС ЙЫРЫН ЙЫРЛАП...

## үҙ йырыңды онотма

Юлдашың яман булһа, йыраҡ йөрөп көн ҡатма; ҡатының яман булһа, кеше алдында һүҙ ҡатма.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Түҙемлек һаҡлаған кешелә асыу булмай.

**(Франциск Ассизский).**

Йән ябай ғына ул, ә яуызлыҡ иһә шул тиклем ҡатмарлы.

**(Филипп Сидни).**

Мәңгелек тойғоноң ләззәтен татығанда ғына минутлыҡ тойғоларҙы ҡыуып була.

**(Августин).**

Ике төрлө белем була. Береһе беҙҙе тормошто нисек үҙгәртеп ҡорорға, икенсеһе нисек йәшәргә өйрәтә.

**(Генри Адамс).**

Һәр кемдең, ай һымаҡ, яҡтыртылмаған яҡтары була һәм ул уны бер кемгә лә күрһәтмәй.

**(Марк Твен).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Ике эшҡыуар икенсе бер ҡалаға эшлекле осрашыуға барырға йыйына. Улар унда шәхси фирмалары өсөн файҙалы килешеү төҙөргә тейеш була. Әммә аэропорт юлында улар ултырған машина аварияға осрай. Эшҡыуарҙар, билдәле, самолетҡа һуңлай һәм файҙалы килешеү төҙөлмәй ҡала. Аҙаҡ ишетелеүенсә, эшҡыуарҙар ултырырға тейешле самолет та һауала һәләкәткә осрай, бар пассажирҙар һәләк була. Әлеге эшҡыуарҙар был хәл тураһында дауаханала ишетә.**

**Автомобиль һәләкәте ваҡытында алған яраларын дауалағандан һуң, был эшҡыуарҙар үҙҙәренең ҡәҙимгә эшенә тотона. Әммә уларҙың икеһенең дә эше әллә ни ырап китә алмай. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, эшҡыуарҙарҙың береһе үҙен бәхетһеҙ, ә икенсеһе бик ныҡ бәхетле итеп тоя. Ни өсөн шулай килеп сыға һуң? Эйе, уларҙың тормошо тыштан ҡарағанда үҙгәрмәгән кеүек, юл һәләкәтенә тиклем дә, унан һуң да бер үк төрлө эш менән шөғөлләнәләр. Хикмәт шунда ғына: беренсе эшҡыуар ғүмере буйы бизнесын үҫтерергә булышлыҡ итәсәк файҙалы килешеүҙе өҙгән баяғы юл һәләкәте ваҡиғаһын әрләп йәшәй, ә икенсе эшҡыуар шул юл һәләкәтен барлыҡҡа килтереп, ғүмерен һаҡлаған Хоҙайға рәхмәт әйтеүҙән бушамай..."**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Кин коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мирасты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Сәриә ҒАРИПОВА,
Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
БР «Республика Башкортостан» нәшриәт йорто ДУП филиалы - «Башкортостан» республика нәшриәтендә баҫылды (450079, БР, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**
**Баш мөхәррир** 253-25-44
**Хәбәрселәр** 252-39-99
**Матбуғат таратыу** 252-39-99

**Ҡул ҡуйыу ваҡыты -**
12 май 17 сәғәт 30 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**
Тиражы - 3267
Заказ - 615

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44** телефоны буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.